ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискэ Өфө

15-21 октябрь (карасай) 2022

№41 (1031)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Премияларҙың...** ике яҙмышы бар



3

**Теләктәр хаҡы**



6

**Беҙҙә берләштерәсәк...** нейроселтәрҙе башҡортсаға өйрәтеү проекттары



8-9

**Яңы миҙгел асабыҙ**



11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Бер уҡыусы остазынан һорай икән: "Остазым, донъя ҡайғы-хәсрәт менән тулған. Ошондай заманда кеше ни менән йыуанырға, ҡайғы-хәсрәттән нисек арынырға тейеш?" "Ниндәй кеше тураһында әйтеүеңә ҡарап, яуап бирәм, - тигән остаз. - Аҡыллы кеше: "Яҙмышыма яҙылған икән, был хәсрәткә тарыр кеше мин булғанмын", - тип йыуана. Ахмаҡ иһә: "Бындай ҡайғы-хәсрәт мине урап үтәсәк, миңә ҡағылмаясаҡ", - тигән уйҙан йыуаныс таба".***

*ШАҒИР ҺҮҘЕ*

# ШАЙМОРАТОВ ГЕНЕРАЛ

*Баш ҡалабыҙҙа Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовҡа һәйкәл асылыу уңайы менән яҙылған йөрәк һүҙе.*




***Асығыҙсы Өфө ҡапҡаларын!
Киңерәк итеп!
Аса һалығыҙ!
Уттан сығып, батыр ҡайтып килә,
Ҡайтып килә атлы данығыҙ!***

***Халыҡ белде: утта яндырманы,
Һыуға батырманы Батырын;
Ат өҫтөндә яуға ингән батыр,
Ат өҫтөндә кире ҡайтырын!***

***Батырҙарҙың даны алдан ҡайта,
Үҙе ҡайта яуҙар баҫылғас...
Миҙал булып ҡайтты батырыбыҙ,
Өфө ҡапҡалары асылғас.***

***Герой булып ҡайтты!
Улдарының
Күкрәгендә йәшәй әле ҡуҙ!
Утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ Батыр,
Тыуған илкәйеңә түрҙән уҙ!***

***Буденныйҙан алған бүләк ҡылыс
Уң ҡулында - тоғро ҡоралы.
Ҡаныбыҙға һеңгән был исемде
Халҡы ятҡа бирә буламы!***

***"Беҙ - Салауат тоҡомдары!" - тиеп,
Оран һалып ингәс майҙанға.
Утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ Батыр
Ҡайтыр кеүек ине ҡайҙан да!***

***Асығыҙсы Өфө ҡапҡаларын!
Киңерәк итеп!
Аса һалығыҙ!
Ат уйнатып ҡайтып килә, ана,
Шайморатов атлы данығыҙ!***

***Һәйкәл булып ҡайтты!
Уттан сығып,
Утҡа инеп бара хаҡ даны...
Йөрәгемдә өтә 41-ҙең
Ат өҫтөндә тыуған ораны:***

***Башҡорттар китте һуғышҡа...
Оҙатып ҡалды киң Урал...
Ат уйнатып, алдан бара
Шайморатов генерал...***

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ?

## *Был көндәрҙә ауыл ҡатын-ҡыҙҙары ниндәй хәстәрлектәр менән йәшәй?*

***Даян ФӘТХУЛЛИН, Әбйәлил районы Байым ауыл хакимиәте башлығы:*** Ауыл ҡатын-ҡыҙҙары - һөйөклө әсәйҙәребеҙ, өләсәй-ҡартәсәйҙәребеҙ, һеңел-апайҙарыбыҙ, ҡатындарыбыҙ, инәйҙәребеҙ барсаһы ла йөрәк түренә инеп ултырған ватаныбыҙ төшөнсәһенең һәм, ғөмүмән, йәшәйешебеҙҙең айырылғыһыҙ өлөшө ул. Бөгөн улар иңенә тарих тағы бер һынау йөкмәтте: ил һаҡларға киткән улдары, ирҙәре, кейәү балаҡайҙары өсөн хафаланыу йөрәктәрҙе өтә, төн йоҡоларынан яҙҙыра, ут йоттора уларҙы... Ә инде ҡәҙерлеләрен юғалтҡан әсәләр һәм ҡатындарҙың хәлен Хоҙай башҡаларға күрһәтмәһен! Ауыр һынау... Бөгөн килеп, тарихта ҡалған Ватан һуғышына һигеҙ тиҫтә йыл үткәндән һуң, ата-бабаларыбыҙ азат иткән Көнбайыш менән НАТО хөсөтөнән килеп тыуған фашистик нацизм ҡалдыҡтары баш ҡалҡытыр тип кем уйлаған! Өлөшләтә мобилизация халҡыбыҙ өсөн сираттағы ауыр һынау булһа ла, әлеге шул ауыл ҡатындары - әсәләр һәм кәләштәр сарбайлап сыҡманы, сабыуламаны, сабыр ғына күҙ йәштәрен тыйып, аят-доғаларын бағышлап, ут йотһа, йотто - митингылар үткәреп, йолалар үтәп, изге теләктәр менән ил улдарын ватанды һаҡларға оҙатып ҡалды.

Тормош дауам итә, донъя бағырға, киткәндәрҙе көтөп алырға, яугирҙарыбыҙ өсөн йылы кейем хәстәрләп, ойоҡбаш-бирсәткәләр бәйләп, посылка әҙерләп, йөрәк йылыларын ҡушып ебәрә ауыл ҡатындары. Был изге эштә урындағы хакимиәт биләмәһенең бөтөн ауылдары ҡатын-ҡыҙҙары, ағинәйҙәре лә ихлас ҡатнаша. Яугирҙарыбыҙға кәрәкле йылы кейем: ҡулдан бәйләнгән һәм һатып алынған термоойоҡбаштар, йылы триколар, тәү ярҙам бұлырлыҡ дарыу препараттары, башҡа төр медицина кәрәк-яраҡтары йыялар. Оло хәстәрҙәр һәм ир-егеттәребеҙ, уландарыбыҙҙың тиҙерәк еңеү менән ҡайтыуҙарын теләп, фатихаларын юллап йәшәй әлеге көндә ауыл ҡатын-ҡыҙҙары.

12+

БАШ ҠАЛАМ

# БАРЫҺЫ ЛА ОҠШАЙ...

**Өфө тураһында яҙырға күптән ниәт итәм. Үҙемдең яҙмамда баш ҡала тураһындағы фекерҙәрем менән уртаҡлашып үткем килә.**

Ҡаланың үҙе тураһында һүҙ йөрөткәндә, тәү сиратта, минә уның урынлашҡан урыны оҡшай. Эйе, башҡа ҡалалар кеүек киңлеккә йәйрәп ятмаһа ла, уның үҙенә генә хас үҙенсәлектәре бар. Мәҫәлән, минә уның ике йылға араһында урынлашыуы бик оҡшай. Шулай уҡ тау битләүендә булыуы ла күңелемә яҡын, сөнки уның ҡайһы нөктәһенән ҡараһаң да, күҙ күреме офоҡто күҙләргә мөмкин.

Ҡала һәр ваҡыт кешеләрҙең унайлығы өсөн күп эштәр башҡарылды. Элекке ваҡыттарҙа ла йәшеллеккә төрөнгән парк, скверҙар күп булды Өфөлә, бөгөн дә был йәһәттән зарланырлыҡ түгел. Ҡайһы берәүҙәрҙең урам буйлап үҫкән ағастарҙың ҡырҡылыуына йәне әсеһә лә, был кәрәкле һәм үҙ ваҡытында башҡарылған эш, тип уйлайым, сөнки ҡарт ағастарҙың ҡолау ҡурҡынысы тураһында онотторға ярамай. Шулай уҡ баш ҡаланы ғына түгел, ә тотош республика буйлап иғлан ителгән һәм әүҙем башҡарылған ағас ултыртыу, йәшелләндереү эштәренең киң йәйелгән булыуын һәр кем күреп-белеп тора. Тимәк, Өфө үҙенең "иң йәшел ҡала" тигән статусын оҙаҡ йылдар һаҡлап ҡаласаҡ әле.

Ҡала архитекторҙарының ҡайһы бер эштәре оҡшап етмәһә лә, тотошлайы менән алғанда, эшмәкәрлектәренә һүҙ тейҙерерлек түгел. Мәҫәлән, заманса йорттар төҙөгәндә улар ҙы элекке биналарға "үрелдереп" алып барыуҙары маҡтауға лайыҡ. Мәҫәлән, әлеге мәлдә Аксаков урамындағы иҫке йорттарҙы заманға яраҡлаштырып эшләйҙәр һәм эш аҙағында бик күркәм генә ансамбль килеп сығыр, тип өмөтләнәм.

Тағы ла баш ҡалала инфраструктураға һәм юл хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә ҙур иғтибар бүленә. Мәҫәлән, светофорҙар беҙҙә теүәл эшләй һәм әленән-әле яңы объекттар ҡуйыла. Шундайҙар рәтендә быйылғы йылда Әхмәтов менән Шмидт, Геофизик менән Булат Имашев, Пугачев менән Колгуев һәм башҡа урамдар киҫелештәрендә урынлаштырылған яңы светофорҙарҙы билдәләп үтер инем.

Тағы ла өфөләргә һәм килгән ҡунаҡтарға ял итеү урындары күп беҙҙә һәм уларға өҫтәп тағы ла яңыларының да асылыуы ҡыуаныслы. Минә бигерәк тә Мөбәрәков урамында урынлашҡан "Йәш армеец" скверы оҡшай. Скверға ингән урында беҙ бала саҡта күкрәккә тағып йөрөгән йондоҙ тороуы әллә ҡупме матур хәтирәләр уята.

Өфөгә "Хеҙмәт каһарманлығы ҡалаһы" исеме биреләүенә шатланмаған кеше булмағандыр, сөнки беҙҙең ҡала, ысынлап та, бөйөк Еңеүҙе яҡынлаштырыуҙа ҙур роль уйнаған ҡалаларҙың береһе. Шуға күрә ошо исемдә мәңгеләштергән стеланы ҙур түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ һәм был йәһәттән Өфөгә ингән ерҙә ҡыҙыу эштәр алып барылыуы күңелдәргә йылылыҡ өҫтәй. Баш ҡалабыҙға Көньяҡ ҡапҡанан ингәндәрҙе Салауат Юлаев һәйкәле, Дуҫлыҡ монументы һәм ошо мөһабәт стела ҡаршылаясаҡ.

Ҡала урамдарын ташландыҡ машиналарҙан арындыра башлауҙары ла тик хуплауға лайыҡ. Шулай уҡ күп ҡатлы йорттар араһында урынлашҡан тимер гараждарҙан азат итеүҙе тағы ла әүҙемләштерергә кәрәк. Ғөмүмән алғанда, ҡаланы бөтә иҫке, ташландыҡ әйберҙәрҙән таҙалап, уның йөҙөн тағы ла яҡтыртыу буйынса бер туктауһыҙ эшләү мөһим.

**Мөнирә СӘЛӘХОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# ЗАКОН РӨХСӘТ ИТӘ



**Бынан бер нисә йыл элек көсөнә ингән һәм ярайһы шау-шыу тыуҙырған "Граждандарҙың үҙ ихтыяждары өсөн баҡсасылыҡ һәм йәшелсәселек менән шөғөлләнеүе тураһында"ғы федераль закон хәтерегеҙҙәме? Кемдәр дача, баҡса участкалары тота, улар был хаҡта онотмағанлыр, моғайын, сөнки тап шул закондан һуң күптәр баҡсаларынан баш тартты йә һатты, ә һатып алыусы тапмағандары ерҙәрен ташлап китергә мәжбүр булды. Шунлыктан ташландыҡ баҡсалар һаны ла артты.**

Ни өсөнмө? Яуап бик ябай ине: бер ҡайғыһыҙ рәхәтләнеп баҡса үҫтереп, ҡала шауынан ял итеп ятҡан баҡсасылар "иләүенә" таяҡ тығып бутаған кеүек булды ул закон, үҙ йүнен күреп йәшәргә, ғаиләһен өҫтәмә витаминлы йәшелсә-емеш менән тәьмин итергә теләгән эшсән кешегә аяҡ салыусы ҡәтғи һәм бюрократик ҡағыҙҙәр йыйылмаһы ине ул. Рәсәй Баҡсасылар профсоюзы рәйесе Людмила Голосова әйтмешләй, "аңлауы бик ауыр" булған был закон 55 статьянан тороп, шуның ятһыны тиерлек башҡа закон акттарына индерелгән үҙгәрештәр булып сыҡты. Беҙҙә бит һуң шулай: тәүҙә киҫәләр ҙә, аҙаҡ етешмәгән урындарға "ямау" һалып ҡуялар. Быйыл 28 июндә РФ Дәүләт Думаһы тарафынан әлеге 2019 йыл көсөнә ингән "ауыр" законды бер аҙ еңеләйтеүсе төҙәтмәләр рәүешендә баҡсасыларға үҙ участкаларында йорт ҡоштары (тауыҡ, өйрәк, ҡаҙ h.б.) һәм йорт ҡуяндары аҫрау хаҡында ҡабул ителгән закон тап ана шундай "ямау" булды ла. Уның ҡарауы, элек баҡса ерендә ҡош-ҡорт һәм йорт ҡуяны ише бәләкәй хайуандар аҫрау рөхсәт ителмәгән булһа, хәҙер, ошо законға ярашлы, исмаһам, бәләкәй генә пенсияларына етешһеҙ көн күргән өлкән быуын үҙ ихтыяжы өсөн ҡош ите, йомортҡаны һатып алмаясаҡ, үҙенекен файҙаланасаҡ. Был да ҙур ярҙам, әлбиттә. Дөрөҫ, бындай йомарт рөхсәттең шарттары һәм сикләүҙәре лә етерлек. Мәҫәлән, тауыҡтар һәм йорт ҡуяндарын һатырға түгел, ә үҙ ихтыяжың өсөн аҫрарға. Икенсенән, төгәйенләнгән ер участкаһын унда ауыл хужалығы ҡоштары һәм йорт ҡуяны аҫрау өсөн генә файҙаланырға һәм быны өсөн рөхсәт алырға. Артабан мотлаҡ ветеринария нормаларын, санитар-эпидемиологик һәм гигиена талаптарын үтәү. Тауыҡ кетәктәре баҡса йорттарынан (шул иҫәптән күршеләрҙекенән дә) 12 метр, ә күрше участка сигенән 4 метр араһыкта булырға тейеш. Ошондай талаптарҙан һуң уйға ҡалаһың: баҡсасылар араһында йәше 70-тән үткән яңғыҙ ҡатындар байтаҡ, әлеге шарттарҙы үтәү йөҙөнән баҡса хужалығын үҙгәртеп төҙөү барыһынын да ҡулынан килерме? Өҫтәүенә, баҡсала ҡош-ҡорт аҫрау законына ҡаршы килеүсе көстәр ҙә бар икән әле. Дәүләт Думаһының "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" фракцияһы етәксеһе Сергей Миронов белдереүенсә, был законға ҡарата бизнес өлкәһе әһелдәренең үҙ дәғүәләре бар. Илдең эре ит етештереүселәре һәм ҡошсолоҡ компаниялары баҡса участкаһында ҡош-ҡорт аҫрауҙы сикләү яғында, ни өсөн тигәндә, уларҙы үҙ тармаҡтарынан күберәк табыш алыу һәм был өлкәлә монополия мәсьәләһе борсой. Өсөнсөнән, уларҙың продукцияһына ихтыяж кәмеү ихтималлығы хаҡтар төшөүенә килтереүе лә бар бит әле! Бына быныһы инде бизнестың планына инмәй. Ғәжәп, уйлап ҡараһаң, эре етештереүселәрҙе продукцияларының сифаты һәм экологик хәүефһеҙлеге бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай, ахыры. Ә бит улар етештергән ит ризыҡтарының, шул иҫәптән, ҡош итенең, ниндәй "витаминдар"ға бай икәнен халыҡ бик яҡшы белә. Мал, ҡош-ҡорт үрсетеү технологияһын тиҙләтеү, күберәк артым алыу маҡсатында уларҙы гормондар менән тыңҡыслау, сирләмәһендәр өсөн антибиотиктар ҡулланыу тураһындағы хәбәрҙәр имеш-мимеш һәм сер түгел шул, үкенескә. Был хаҡта бөтөн рәсми мәғлүмәт донъяһы шаулай, фәнни хеҙмәттәр яҙыла, медицина өлкәһе хәүеф белдерә... Үҙең етештергәнгә етәме! Асыҡ һауала, таҙа шарттарҙа, сифатлы һәм химияһыҙ ем ашатып үҫтергән ҡош итенең тәме телде йоторлоҡ һәм сәләмәтлеккә файҙа икәнен һәр кем яҡшы белә. Әйҙә, шулай булғас, ҡулынан килгән һәр кем шөғөлләнһен быны менән. Закон бит шуның өсөн ҡабул ителгән!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Был көндәрҙә ауыл ҡатын-ҡыҙҙары ниндәй хәстәрлектәр менән йәшәй?

***Сәлимә БАРЛЫБАЕВА, Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылы:*** Ауыл ҡатын-ҡыҙының бар ергә лә өлгөрөп, эштә лә, ғаиләһендә лә етешеп донъя көтөүҙәрен бер һүҙ менән генә аңлатыу мөмкин дә түгел. Күп кенә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ буҙа, ҡымыҙ эшләү, ҡомалаҡка әсетеп бешерелгән хуш еҫле икмәк һәм башҡа төр ҡамыр ризыҡтар әҙерләп һатыу, дарыу үләндәре йыйыу менән шөғөлләнә. Мал-тыуар аҫрап, ақтан өҙөлмәйҙәр: ҡатыҡын-ҡаймағын, ҡоротон-майын, эремсектең әллә нисә төрөн әҙерләйҙәр. Оҫтабикәләрҙең тилбер ҡулдары халҡымдың милли кейемдәрен тергеҙә; балитәкле күлдәктәр, таңкәле түшелдерек-селтәрҙәр, ҡашмауҙар, башҡа төр биҙәүестәр эшләп кейә ағинәйҙәребеҙ. Ауылыбыҙ йәшәйешенең әхлаҡ-дини нигеҙҙәре һағында торөусы ла улар. Мәсеткә юлдың һиуынһаны юк, аят йолалары ла, никах тантаналары ла, йәштәргә илһөйәрлек нәсихәттәре күндереүсе лә ауылыбыҙҙың абруйлы ҡатындары, ағинәйҙәребеҙ. Ҙур булмаған ауылда дүрт үҙешмәкәр коллективтың гөрләп эшләп килеүе лә күп нәмә тураһында һөйләй булыр.

Ауылдаш апайҙарым сәләмәт тормошто үҙ итә. Күптәре намаҙҙа, был үҙе генә лә күпте һөйләй. Кемдәрҙер скандинав таяғы менән йөрөй, кемеһелер йүгерә, ә йәштәр спартакиада ярыштарында көстәрен һынап ҡарай.

...Һәүетемсә генә аҡҡан тормошто ҡапыл ҡуҙғытып, ил өҫтөнә оло һынау килде. Шул мәлдә лә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҡаушап ҡалмай, киреһенсә, тағы ла әүҙемләшә төшкәндәй. Берәүҙәр йөн иләп, кемеһелер ойоҡ бәйләп, төрлө кәрәк-яраҡ әҙерләп, ил һаҡларға киткән егеттәргә посылкалар ебәрҙеләр. Ҡайғы-хәсрәттәрен дә, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы ла бергә уртаҡлашып, һөйөнөслө киләсәк көндәр теләп, бергә-бергә көн итә ауылымдың ҡатын-ҡыҙҙары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓РФ Тәфтиш комитеты рәйесе Александр Бастрыкин ҡушыуы буйынса махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар, мобилизацияланғандар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн ҡыҙыу линия эшен башланы. Граждандар ведомствоға 8-800-100-12-60 (тауыш менюһында 5 һанына баҫырға кәрәк) күп каналлы телефоны буйынса тәүлек әйләнәһенә мөрәжәғәт итә ала. Шылтыратыу бушлай. Рәсәйҙең Тәфтиш комитеты хеҙмәткәрҙәре мөрәжәғәт иткән граждандарҙы барлыҡҡа килгән проблемалар һәм һорауҙарҙы, шул иҫәптән медицина ярҙамы алыуға, тейешле түләүҙәр кеүек социаль ярҙам саралары тиҙләтеүҙе тәьмин итәсәк. Был уларҙың хоҡуҡтарын яҡлауҙа ҙур ярҙам буласаҡ.

✓Мобилизацияланған граждандар һәм уларҙың ғаиләләре торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә ваҡытында түләмәгән өсөн пеняларҙан азат ителә. Рәсәй Президенты Владимир Путин тейешле ҡарарға ҡул ҡуйған. Закон мобилизация буйынса хәрби хеҙмәт үтеү тураһында контракт төҙөгән граждандарҙың һәм уларҙың ғаилә ағзаларының әлеге контракт ғәмәлдән сыҡҡансы торлаҡҡа һәм коммуналь хеҙмәттәргә, капиталь ремонтка иғәнәне ваҡытында түләмәгән өсөн пеня һалмауҙы күҙҙә тота.

✓Пензала Башҡортостандан, Ульяновск һәм Пенза өлкәләренән иргеттәр тупланған икенсе йыйылма отряды 11 октябрҙә хәрби күнекмә урынына оҙатҡандар. БР Башлығының хәрби мәсьәләләр буйынса кәңәшсеһе Юрий Орда аныҡлап китеүенсә, Пензанан мобилизацияланған яҡташтарыбыҙҙың беренсе төркөмөн Рәсәйҙең Көньяҡ хәрби округына хеҙмәт итергә йүнәлткәндәр. Алдан билдәле булыуынса, төркөм Ҡырымға ебәрелгән. Һарытауҙың тимер юл вокзалынан резервсы яҡташтарыбыҙҙың тағы бер төркөмө хәрби өйрәнеү урындарына юлланған. Уларҙы вице-губернатор Игорь Пивоваров оҙатҡан.

✓Рәсәй Геройы, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал-майор Миңлегәле Шаймуратов һәйкәле мөһим һәм монументаль һәйкәлдәр иҫәбенә инде, улар араһында, мәҫәлән, Ржев мемориалы, Донбасты азат итеү иҫтәлегенә "Саур-Ҡәбер" комплексы бар, тип хәбәр итә "Башҡорт батальоны" телеграм-каналы. "Был иһә дөйөм хәтерҙең, тарихи күсәгилешлелектең тағы бер символы", - тиелә хәбәрҙә.

ИШАРА

**Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура буйынса Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт өлкәһендәге иң юғары наградаһы һанала. Ул БАССР Министрҙар Советының 1967 йылдың 28 ғинуары ҡарары нигеҙендә барлыҡҡа килеп, ошо йылдың октябрендә СССР-ҙың 50 йыллыҡ юбилейы уңайынан Фәйзи Ғәскәровҡа, Заһир Исмәғилевҡа, Мостай Кәримгә, Һәҙиә Дәүләтшинаға тапшырыла. 2020 йылға тиклем Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы барлығы 143 кешегә бирелә. Быйыл был премияның булдырылыуына 55 йыл тулды.**

# ПРЕМИЯЛАРҘЫҢ...

## ике яҙмышы бар



1995 йылда мәшһүр шағирыбыҙ Рәйес Түләк йәш ижадсыларҙың Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булып, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе булмәһендә: "Рауил ағай, мин был премияны Салауат Юлаев исемендәге премияның авансы итеп алам", - тип мәрәкәләгәс, ул саҡтағы Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев: "Атай-олатайҙарыбыҙ яуға сапҡанда бер ҙә аванс һорап тормаған", - тип ҡырҡа ғына әйтеп ҡуйғайны. Уларҙың был әңгәмәһе хәҙер лаҡап ҡына булып йөрөй, әммә, кемдер берәү әйтмешләй, "юморҙа ла хәҡиҡәттең бер өлөшө булғандай", заманыбыҙҙың мәшһүр шағиры Рәйес Түләктең ижады һәр йәһәттән дә Салауат Юлаев премияһына лайыҡ ине. "Ине" тиеүем шунан, мәшһүр Шәйехзада Бабич XX быуат башы башҡорт шиғриәте шоңҡары булғанда, XXI быуат башы башҡорт шиғриәте шоңҡары Рәйес Түләк үҙ ижадына лайыҡлы баһаларҙы алмайынса, донъяларҙан китеп барҙы. Ундайҙар бер Рәйес Түләк кенә түгел. Шағир һәм прозаик Мәүлит Ямалетдинов, шағирә Рәмзилә Хисаметдинова, шағирҙар Әсхәл Әхмәт-Хужа, Рәмил Ҡолдәүләт, тарих яҙарманы Спартак Ильясов, парадоксаль ижадсы Буранбай һәм башҡалар был премияға лайыҡ түгелдәр инеме ни?

Премияларҙың, күрәһең, ике яҙмышы булалыр. Уларҙы бирәләр йә алалар. Халҡыбыҙ яҙыусыһы, башҡорт әҙәбиәтенең мәңгелек "урманы" Ноғман Мусин ижады күптән инде халҡыбыҙҙың күңел сәхифәһенә, рухи йылъяҙмаһына әүерелгән. Ятраҡан яҙыусыбыҙ Салауат Юлаев премияһына дүрт тапҡыр тәҡдим ителеп, 1991 йылда ғына уға был премия бирелә. Унлыһында ла комиссия ағзалары араһынан берәү тороп, Ноғман Мусин менән икенсе бер дәғүәсегә бер премияны бүлеп бирергә тәҡдим индерә. Әммә халыҡ яҙыусыһы премияны барып алыуҙан баш тарта. Һуңынан ғына тыуған яғында бер сара барғанда уға дәүләт бүләге тапшырыла. Ошондай күренештәр премияларҙың ике яҙмышы барлығы хаҡында һөйләй ҙә инде. Йәғни бүләкте юллап алыу мөмкинлектәре барлығы хаҡында.

Былары премияға бөйлө айырым күңелһеҙ күренештәр хаҡында. Күрәһең, донъя булғас, симпатия һәм антипатия тигән ҡотолғоһоҙ төшөнсәләр булғас, уларҙы ла урап үтеү мөмкин түгелдер инде. Шуға күрә беҙ бындай хәлдәргә артабан юл ҡуймаç өсөн барыһын да асыҡтан-асыҡ яҙырға, фекер алышырға тейешбеҙҙер.

Нисек кенә булмаһын, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бар, ул халҡыбыҙҙың һәм республикабыҙҙың асыл заттарына тапшырыла. Уларҙың араһында Фәйзи Ғәскәров, Һәҙиә Дәүләтшина, Заһир Исмәғилев, Мостай Кәрим, Хөсәйен Әхмәтов, Зәйнәб Биишева, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Баязит Бикбай, Ғата Сөләймәнов, Ким Әхмәтйәнов, Назар Нәжми, Рәми Ғарипов, Рауил Бикбаев, Арыҫлан Мөбәрәков, Булат Рафиҡов, Абдулхаҡ Игебаев, Ноғман Мусин, Ғәзим Шафиҡов, Динис Бүләков, Флорид Бүләков, Риф Ғәбитов, Факиһа Туғыҙбаева, Ибраһим Абдуллин, Ҡәҙим Аралбай, Юлай Ғәйнетдинов, Абдулла Солтанов, Таңсулпан Ғарипова, Салауат Хәмиҙуллин, Рәшит Шәкүр, Ғәлим Хисамов һ.б. арҙаҡлыларыбыҙ булыуы күңелгә һөйөнөс өҫтәй. Сәғит Агиш, Нариман Сабитов, Рәми Ғарипов, Арыҫлан Мөбәрәков, Фәнил Байышев, Дан Кинельский үлгәндән һуң ғына Салауат Юлаев премияһы лауреаты тип танылa.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың шундай шиғыр юлдары бар:

Үҙ баһаһын белмәгәндәр  
Баһалы - күпкә.  
Үҙен күтәрмәҫте генә  
Күтәрәм күккә...

Ижадсы шәхесенең кимәле, әлбиттә, премиялар менән генә лә билдәләнмәй. Шул уҡ ошо юлдарҙы яҙыусы Рәми Ғариповҡа ла халыҡ шағиры исеме, Салауат Юлаев премияһы үлгәндән һуң ғына бирелде бит. Шулай ҙа лайыҡлы ижадсылар үҙҙәре иҫән саҡта премияларға һәм исемдәргә лайыҡ булһа, улар ижадҡа тағы ла нығыраҡ дәртләнер ине, юҡҡа ғына ундай баһаларҙы дәртләндереү саралары тип әйтмәйҙәр бит.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Указы менән әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премиялары лауреаттары билдәләнде. Быйыл ошо абруйлы наградаға Бөрйән районында "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни музей комплексы проекты өсөн "Архтамға" эксперт-проект бюроһы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте хеҙмәткәрҙәре: генераль директор Рөстәм Әлибаев, баш инженер Илфат Актуғанов, баш архитектор Гөлфиә Тажетдинова; "Заһир Исмәғилев мираҫының алтын биттәре" проекты өсөн Башҡортостандың Милли симфоник оркестры хеҙмәткәрҙәре: генераль директор Артур Нәзиуллин, баш дирижер Дмитрий Крюков; "Ат уйнатып алдан бара... " спектакле өсөн Башҡортостандың Кинематографистар союзы рәйесе Зөһрә Бураҡаева, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры артисы Артур Кәбиров, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡытыусыһы Рәис Низаметдинов лайыҡ булды.**

*Әмир ҒҮМӘРОВ.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Был көндәрҙә ауыл ҡатын-ҡыҙҙары ниндәй хәстәрлектәр менән йәшәй?

***Фәрхизә ШАЙМОРАТОВА, Яңауыл районы, Ахтиял ауылы:*** Айырым ҡайғы ҡайғы түгел, илгә ҡайғы килмәһен, тип йыуатыр ине борон өлкән быуын йәшерәктәрҙе. Бына беҙҙең быуынға ла оло ҡайғы, һынау килде. Тик мин был һынауҙы тыныс ҡабул иттем. Ни өсөнмө? Төптәнерәк уйлап ҡарағанда, ир-егеттәребеҙҙең бәсе китә башлағайны, минеңсә. Күберәк йомшаҡ характерлы быуын барлыҡҡа килде, тип уйлай инем мин. Ә бит беҙ, ҡатын-ҡыҙ, үзебеҙ гәйепле бында. Ирҙәребеҙ башҡарыр эштәргә лә ҡыҫылып, "үҙем" тигән һүҙҙе йышыраҡ ҡыҫтыра башлағайныҡ түгелме? Ә баһадир ирҙәребеҙ ситтәрәк тороп ҡалғыланы. "Атай" һүҙе өйҙә әҙерәк ҡулланылды, атай абруйы ҡакшай төшкәндәй тойолдо. Илдәге эшһеҙлек касафаты ла ир-егеттәребеҙҙең абруйы файҙаһына түгел ине. Себер китеп, вахтала эшләп йөрөүселәргә лә тора-бара ризаһыҙлыҡ белдерҙе ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ. Йәнәһе, ире вахтанан ҡайта ла аҡсаһын эсеп ята, йорт-хужалыҡ эштәрен онотто...

Ирҙәр хаҡында һөйләп, мин бында ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҡылығын күҙҙә тотам, сөнки бөгөнгө "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһының темаһы ҡатын-ҡыҙға ҡағыла. Тимәк, ир-егеттәребеҙ хаҡындағы һүҙҙең дә айышы - ҡатын-ҡыҙҙа. Улар үҙҙәре нисек - ирҙәре лә шулай, тимәксемен. Мобилизация, шулай итеп, бер яҡтан, бәғзе ҡатындарға ирҙәре барлығын да иҫкә төшөрөп, уларҙың ҡәҙерен аңларға ярҙам итте кеүек...

Әйҙәгеҙ, изге теләк-доғаларыбыҙҙа булып, ғәзиз улдарыбыҙ һәм ирҙәребеҙҙең иҫән-һау ҡайтыуҙарын сабырлыҡ менән көтөп алайыҡ, уларҙың ҡәҙерҙәрен белергә өйрәнәйек, ир ир урынында ҡалһын, абруйҙарын күтәрмәләйек. Бөгөн шунан да мөһимерәк бурыс юҡтыр, тик тыныслыҡ ҡына килһен илебеҙгә. Ә беҙ, ауыл ҡатын-ҡыҙҙары, башҡа йорт-хужалыҡ бурыстарыбыҙҙы яҡшы үҙләштергәнбеҙ: ауылдың ундырышлы ерендә үстерелгәнде йыйып алдыҡ, шөкөр, инде ҡышҡылыҡҡа мул ризыҡтар әҙерләйбеҙ. Өләштәренә насип булып, яҡындарыбыҙ алыҫтарҙан ҡайтып төшһән һәм ошо беҙ әҙерләгән һый-нығмәттән ауыҙ итһендәр, тип теләйек. Ҡалған мәшәҡәттәр ҡайғы түгел - булдырырбыҙ, сөнки беҙ - ауыл ҡатындары!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Хәйбулла районының Иләс ауылы ҡатын-ҡыҙҙары хәрби хеҙмәткә алынған яҡташтары өсөн 120 банка быҡтырылған һыйыр ите әҙерләгән. Ауыл халҡы аҡса йыйып, башмаҡ һатып алған һәм уны илгә тыныслыҡ килһен, Ватанды һаҡлаусылар иҫән-һау булһын тип мосолмандарса ҡорбанға салған. Аҙаҡтан ҡатын-ҡыҙҙар һуғым итен быҡтырған һәм уны Ҡаҙандағы резервсыларға сираттағы гуманитар ылау менән оҙатҡан. Ярҙам йыйыуҙа райондың һәр ауылы халҡы ҡатнашҡан. Һәр кем йылы әйберҙәр, аҡса, күстәнәс ебәргән.

✓Мобилизацияға алынған Рәсәйҙә йәшәүселәр үҙаллы медицина комиссияһы үтеп, һаулығы торошо һәм сире тураһында табип белешмәһен хәрби комиссариатҡа тапшыра ала. Һәр хәлдә призывниктың хеҙмәткә яраҡлылығы тураһында һуңғы ҡарарҙы хәрби комиссариат сығарасаҡ. "Һеҙҙең үҙегеҙ теләгән профилле белгестәрҙең белешмәләрен йыйырға һәм уны мобилизация буйынса саҡырыу комиссияһына тапшырырға хоҡуғығыҙ бар. Һаулыҡ хәле буйынса мобилизацияға яраҡлымы-юҡмы икәнден иң һуңғы ҡарарын ошо комиссия ҡабул итә", - тиелә рәсми порталда.

✓Бөгөнгә Башҡортостанда 5,117 миллион тонна ашлыҡ һуғылған. Был иһә яҡынса 98,5 процент. Көнбағыш сәселгән майҙандың 33 процентында, шәкәр сөгөлдөрөнөң 65 проценты йыйып алынған, тип хәбәр итте Башҡортостандың вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. "Урып йыйыу эштәрен 2 ноябргә тамамларға ниәтләйбеҙ, байрамыбыҙҙы - Ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре көнөн шул ваҡытта билдәләрбеҙ", - тине министр.

✓Мәскәүҙә "Алтын көҙ" агросәнәғәт күргәҙмәһе эше йомғаҡтары буйынса Башҡортостан сираттағы тапҡыр Гран-приға лайыҡ булды. Республика предприятиелары һәм учреждениелары күргәҙмәнең тармаҡ конкурстарында әүҙем ҡатнашып, 118 миҙал (67 алтын, 37 көмөш һәм 14 бронза) яуланы. Республиканың үҙенсәлекле дизайны һәм тәҡдим ителгән продукцияның төрләлөгө менән айырылып торған стендын Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин, илдең ауыл хужалығы министры Дмитрий Патрушев килеп ҡараны.

ҠЫҪҠАСА

# АУЫЛДАРҘЫ ХӘСТӘРЛӘП...

**Башҡортостан "Ауыл ипотекаһы" программаһы сиктәрендә бирелгән ипотека кредиттары күләме буйынса беренсе урынды биләй, тип хәбәр итте Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә.** "Уҙған аҙнала Мәскәүҙә, XXIV "Алтын көҙ" Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһендә, Башҡортостан делегацияһы Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин менән осрашты. Дәүләт башлығы Владимир Путиндың тәҡдиме менән ваҡыты сикләнмәгән "Ауыл ипотекаһы" программаһы өсөн айырыуса рәхмәтлемен. Хәҙер республика ипотека кредиттары күләме буйынса беренсе урынды биләй. Беҙҙә яҡынса ғаризалар күләме - 20 миллиард һумға тиклем. Был аҡсаны алырбыҙ тип уйлайым", - тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы. "Ауыл ипотекаһы" - ауыл ерендә торлаҡ һатып алыуға ҡағылған ипотека программаһы. Программаның асылы - ауылдарҙы йәнләндереү, ауыл халҡының һанын арттырыу һәм уларҙың йәшәү сифатын күтәреү өсөн рәсәйҙәргә минималь процент ставкаһы буйынса ипотека ярҙамында ауыл ерендә торлаҡ һатып алырға мөмкинлек биреү.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хабиров Ульяновск өлкәһе губернаторы Алексей Русских менән эшлекле осрашыу үткәрҙе.** Башҡортостан етәксеһе Ульяновск өлкәһенең айырым иҡтисади зоналары эше менән иҡтисадҡа инвестициялар йәлеп итеүҙең һөҙөмтәле булыуын әйтеп үтте. Артабан ул коллегаларҙы республика биләмәһендә Евразия иҡтисади үҙәген булдырыуҙа һәм төбәк-ара туристик проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашырға саҡырҙы. Ульяновск өлкәһе губернаторы үҙ-ара мөнәсәбәттең яңы өлкәләрен эҙләүҙе тураһында белдерҙе. "Башҡортостан - бай тәбиғәтле, етди иҡтисади мөмкинлеге һәм яҡшы халҡы булған уникаль төбәк, - тине Алексей Русских. - Беҙ һеҙгә өлкәнең 15-ләп предприятиеһы вәкилен килтерҙек һәм республика бизнесы менән мөнәсәбәттә аныҡ пландар билдәләнек. Ике төбәктең компаниялары бер-береһенән күпте өйрәнә ала. Уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәткә, шул иҫәптән импортты алмаштырыу өлкәһендә ынтылышы бар".

✓ **Ҡырым Дәүләт Советы депутаттары Башҡортостан балаларына 10 тонна еләк-емеш оҙатҡан.** Республиканың социаль приюттарында һәм ғаилә тәрбиәһенә булышлыҡ итеү үҙәктәрендә тәрбиәләнгән 1344 бала Ҡырымдың Белогорск районынан еләк-емеш бүләктәре аласаҡ. 10 тонна татлы күстәнәс тейәлгән автофургон Өфөгә Республика көнөнә килеп өлгөргән. "Мин Ҡырым Республикаһының Дәүләт Йыйылышы рәйесе Владимир Андреевич Константинов менән аралаштым - ярымутрау халҡы 2014 йылдан беҙ күрһәткән тәрлә яҡлы йүнәлешле ярҙам өсөн ныҡ рәхмәтле. Ҡырым үҙе Рәсәйҙең көслө төбәгенә әйләнде һәм, үҙ сиратында, Башҡортостанға бүләк яһай. Референдум һөҙөмтәһендә Рәсәй Федерацияһы составына инғән яңы төбәктәр интеграция процесын шулай уҡ тиҙ һәм уңышлы үтер тип ышанам. Бөтә ил быға ярҙам итәсәк", - тип үҙ фекерен белдерҙе Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҺӘЙКӘЛ БУЛЫП ҠАЙТТЫ...

## утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ Батыр

**Республика көнө байрамында баш ҡаланың Совет майҙанында Рәсәй Геройы, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовҡа һәйкәл асылды. Был тарихи ваҡиғала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Рәсәй Президенты ярҙамсыһы Владимир Мединский, Донецк Халыҡ Республикаһы башлығы вазифаһын башҡарыусы Денис Пушилин, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Рәйес Әбдрәшитов һәм башҡа мәртәбәле ҡунаҡтар ҡатнашты. Башҡортостан халҡын республика көнө менән ҡотларға һәм иҫтәлекле ваҡиға шатлығын уртаҡлашырға Чечен, Татарстан, Ҡалмыҡ республикалары, Ульяновск өлкәһе вәкилдәре килде. Совет майҙанына ағылған халыҡтың күплеге был көндөң һәм был ваҡиғаның Башҡортостан өсөн ни тиклем әһәмиәтле булыуын асыҡ күрһәтте.**




Һәйкәл асыу тантанаһында ҡатнашыусыларҙы тәбрикләп, республика Башлығы: "Бөгөн бөтә республика өсөн көтөп алынған һәм иҫтәлекле ваҡиға - Бөйөк Ватан һуғышында батырҙарса һәләк булған яҡташтарыбыҙ, тыуған илебеҙ һаҡсыларына арнап, монументаль композицияны асыу тантанаһы. Был мөһабәт һәйкәл менән беҙ халҡыбыҙҙың даны һәм рухы, батырлыҡ символы булған шәхесебеҙ - Миңлеғәле Минһаж улы Шайморатовҡа мөрәжәғәт итәбеҙ. Тарихи ғәҙеллекте аяҡҡа баҫтырып, дивизия командирына үлгәндән һуң Рәсәй Геройы исемен биреүе өсөн илебеҙ Президентына рәхмәт һүҙҙәребеҙҙе еткерәбеҙ. Был һәйкәл янына килгән һайын беҙ батырҙарыбыҙ рухы алдында баш эйеп, балаларға, ейәндәргә уларҙың батырлығы тураһында һөйләп, уларҙы ысын илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләйәсәкбеҙ", - тине.

"Легендар командир хаҡында яҡты иҫтәлек мәңге хәтерҙә һаҡланасаҡ, Шайморатовтың һәм уның яуҙаштарының, башҡорт иле батырҙарының ҡаһарманлығы әллә күпме быуындарға үрнәк булып торасаҡ, - тине үҙенең телмәрендә Рәсәй Президенты ярҙамсыһы Владимир Мединский. - Шайморатовтың фигураһы иҫ киткес - ул һоҡланғыс командир, легендар дивизияның рухы. Үҙенең үткән тормош юлы менән күптән халыҡ геройы исемен яулаған шәхес. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы Ҡыҙыл Армияның барлыҡ ҡоро ер ғәскәрҙәре дивизиялары араһында иң күп Советтар Союзы Геройҙарын биргән дивизия. Әлеге монументаль һәйкәлгә уларҙың барыһының да исемдәре алтын менән ҡайып яҙылған. Бөгөн асылған һәйкәл ябай түгел, ул башҡорт ерлерен һәр бер геройына ҡарата тарихи ғәҙеллектең тергеҙелеүе, уларға хөрмәт билдәһе. Беҙ генерал Шайморатовты баһалаған кеүек һәр яугирҙы хөрмәт итергә бурыслыбыҙ".

Миңлеғәле Шайморатов үҙенең Ҡыҙыл Йондоҙон ҡулына алып өлгөрмәйенсә яу ҡырында һәләк була. Архивтарҙа юғалған Ҡыҙыл Йондоҙ тик 2015 йылда ғына табылып, генерал-майорҙың тыуған еренә алып килеп тапшырыла. Башҡортостан халҡы генералыбыҙға Герой исеме биреү тураһындағы мәсьәләне күп тапҡырҙар ҡуҙғата, Кремлгә меңәрләгән ҡултамғалар йыйып оҙатыла тора. Ләкин тарихи ғәҙеллек бынан ике йыл элек кенә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров инициати-

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓1942 йылда композитор Заһир Исмәғилевтың Ҡадир Даян шиғырына ижад иткән йыры күптән халыҡ йырына әүерелде. Республика көнөндә генерал Миңлеғәле Шайморатовҡа һәйкәл асылғандан һуң, көн һайын төш мәлендә Өфөнөң Совет майҙанындағы башня сәғәттәре "Шайморатов генерал" көйөн уйнай башлай.

✓"Легендар комдив, Рәсәй Геройы Миңлеғәле Шайморатовҡа һәйкәл асыу - федераль кимәлдәге ваҡиға һәм илһөйәрлек тәрбиәләүҙең сағыу өлгөләренең береһе, - тине РФ Дәүләт Думаһы депутаты, генерал-полковник, Рәсәй Геройы Владимир Шаманов. - Республика етәксеһе Радий Фәрит улының Рәсәй Президентына үтенесе тарихи ғәҙеллекте тергеҙергә мөмкинлек бирҙе һәм дивизияның 78 Советтар Союзы Геройы сафына легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына етәкселек иткән полководецтың да исеме өҫтәлде. Бөгөн иһә унда Шайморатов исемен йөрөткән батальон дошманға ҡаршы көрәшә. Ошо була ла инде быуындар бәйләнеше".

✓Башҡортостан юлдаш телеканалының "Честно говоря" тапшырыуында Өфөнөң Киров һәм Ленин райондары хәрби комиссары Юрий Алферов хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда өлөшләтә мобилизация этабы аҙағына яҡынлаша. Уның һүҙҙәренсә, республикала Рәсәй Оборона министрлығының хәрби частарҙы комплектлау буйынса ҡуйған бурыстарының байтаҡ өлөшө үтәлгән дә инде. "Барыһы ла планға ярашлы бара, даими урынлашҡан урындарҙан частар хәрби әҙерлек полигондарына сығарыла башлай, ә уларҙың урынын янынан комплектлау өсөн саҡырылғандар биләй", - тип билдәләне Юрий Алферов.

✓Өфө мэры Ратмир Мәүлиев ағымдағы йылдың сентябрь йомғаҡтары буйынса Волга буйы федераль округы субъекттарының баш ҡала хакимиәте башлыҡтары медиарейтингында тәүге бишәү иҫәбенә инде. "Медиалогия" бойондороҡһоҙ тикшеренеү компанияһы белгестәре әҙерләгән рейтингта ул бишенсе урынды биләй", - тиелә баш ҡала мэрияһы сайтында. Беренсе урынды Түбәнге Новгород мэры Юрий Шалабаев алды, икенселә Ҡаҙан мэры Илсур Мәхәмәтшин, өсөнсөлә - Пермь башлығы Алексей Демкин, дүртенсе баҫҡыста Чебоксар мэры Денис Спирин килә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Һәйкәлдә, Миңлегәле Шайморатовтың шәхесендә, башҡорт халҡында булған иң яҡшы һыҙаттарҙың тарихи күсәгилешлеге һынландырылған һәм был скульптура композицияһында ла сағылыш тапҡан.***



ваһы менән тормошҡа ашырыла: Рәсәй Президенты ҡарарына ярашлы, генерал-майор Миңлегәле Шайморатовҡа Рәсәй Геройы исеме бирелә.

Тамырҙары менән башҡорт, Рәсәйҙең халыҡ рәссамы Салауат Щербаков менән Башҡортостандың атҡаҙанған архитекторы Константин Донгузовтың берҙәм проекты буйынса эшләнгән монументаль һәйкәл үҙенең мөһабәтлеге менән хайран ҡалдыра. Архитектура-скульптура комплексы колоннада менән бергә 62х29 метр тәшкил итә. Композицияның бейеклеге, рельеф менән бергә 15 метр, гранит колоннаданың бейеклеге 7,7 метр, мемориал башняларының бейеклеге 8,8 метр, ә атлының иң юғары нөктәһе 13,5 метр. Көнсығыш һәм көнбайыш ҡанаттарҙан торған колоннада 24 бағананы һәм 6 ярымтүңәрәкте үҙ эсенә ала. 6,5 метрлыҡ бейеклектәге ат скульптураһы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының һәм боронғо башҡорт һуғышсыларының данлыҡлы күренештәрен сағылдырған ике бронза горельеф менән тулыландырылған. Мемориаль манараларҙа Рәсәй һәм Башҡортостан гербы, генерал Шайморатовҡа Рәсәй Геройы исемен биреү тураһындағы ҡарар һәм Башҡорт кавалерия дивизияһының 78 Советтар Союзы Геройы һәм Дан орденының 5 тулы кавалерҙары исемлеге урынлаштырылған.

Миңлегәле Шайморатовҡа һәйкәл монументаль ансамблдең мәғәнәле үҙәге булып күҙәләнә. Скульптор уны көсөргәнешле кавалерия һөжүме ваҡытындағы кеүек итеп һынландырған. Унның ҡыйыу һәм тәүәккәл торошонда күренекле шәхес - ҡурҡыу белмәҫ кавалерист һыҙаттары ярылып ята. Һәйкәлдә, Миңлегәле Шайморатовтың шәхесендә, башҡорт халҡында булған иң яҡшы һыҙаттарҙың тарихи күсәгилешлеге һынландырылған һәм был скульптура композицияһында ла сағылыш тапҡан.

Монументаль һәйкәлдең һәр бер элементы айырым символик мәғәнәгә эйә, постаментҡа ике яҡлап ҡуйылған рельефтарҙың һәр береһе айырым теманы аса. Уларҙа беҙ башҡорт халҡының быуаттар дауамындағы йәшәйешен һәм яугирлыҡ юлын асыҡ күрә алабыҙ. Мәҫәлән, беренсе рельефтағы бәләкәй гармунсы малай Миңлегәләнең бала сағын һынландыра, бурлактар һәм ябай халыҡ иңенә төшкән ауыр өлөш тураһында һөйләй. Әсәһе үлгәндән һуң Миңлегәләнең Өфөлә матрос булып хеҙмәт итеүе тураһында рельефтағы пароход "һөйләй". Башҡортостандың символы - ҡурай, Шайморатовтың ырыуы гербы - бөркөт, башҡорт эпосы геройы Урал батыр, 1812 йылғы Ватан һуғышында "Төньяҡ амурҙары" исемен алған башҡорт яугирҙары, 1814 йылда башҡорттар еңеү маршы менән ингән Париждағы Триумфаль ҡапҡа һәм 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының байрағы һәм хәрби наградалары - шулай уҡ рельефты тулыландырып, уны мәғәнәүи йәһәттән асып, һәйкәлде ҡарарға килеүселәргә тарихи сығанаҡ ролен үтәй. Икенсе рельефта һүрәтләнгән 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы үткән хәрби юл, уның командирҙары һәм дивизия составына ингән полктар, Рейхстаг бинаһы һәм тар-мар ителгән дошман символдарына ҡарап, легендар дивизияның ғына түгел, ә тотош Совет ғәскәрҙәренең бөйөк яу юлын күҙ алдына баҫтыра алабыҙ.

Эйе, Бөйөк Ватан һуғышындағы яу юлы ла еңел булмаған халҡыбыҙ өсөн. Был хаҡта Рәсәй Федерацияһы Оборона министрының генераль инспекторы Валерий Баранов тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрҙө үҙенең сығышында: "Бөйөк Ватан һуғышы беҙҙең ил өсөн ҡырыҫ, ҡаты һынау булды. Советтар Союзы 27 миллионға яҡын кешеһен юғалтты. - тине ул. - Һуғыш алдынан Башҡортостанда, мәҫәлән, 3 миллиондан ашыу кеше йәшәй, Ҡыҙыл Армия һәм Хәрби флот сафына 700 меңдән ашыу кеше алынып, уларҙың 300 меңдән ашыуы яу яланында ятып ҡала. Республика 4 кавалерия дивизияһы, 5 уҡсылар (стрелковый) дивизияһы ойоштороп, һуғышҡа ебәрә. Яугирҙарҙың 208 меңе орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә, ә 278 кеше Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Ә 250-нән ашыу хәрби осош яһаған летчик Муса Гәрәевҡа ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Бөгөнгө көндә лә республиканың батыр улдары намыҫ менән алдарына ҡуйылған бурысты атҡара".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был һандар артында күпме ҡыйралған яҙмыштар, ҡоролмаған ғаиләләр, атайһыҙ үҫкән балалар, ғазап һәм һағыш, күҙ йәше һәм төҙәлмәҫ күңел яралары. Әллә күпме йылдар үтһә лә, был ҡанлы тарихты оноторға хаҡыбыҙ юҡ. Балалар йөрәгендә Миңлегәле Шайморатов кеүек азамат ирҙәрҙең, һуғышты үтеп тере ҡайтҡан һәм яу ҡырында һәләк булған башҡа яугирҙарҙың данлыҡлы тормош юлы тураһында яҡты иҫтәлек һаҡланһын өсөн бар көсөбөҙҙө һалырға бурыслыбыҙ. Һәм әлегеләй һәйкәлдәр был бурысты атҡарып сығыуҙа ҙур роль уйнай һәм оло әһәмиәткә эйә.**

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләнә.**





*ҺОРАУ-ЯУАП*



# КРЕДИТ КАНИКУЛДАРЫ ҺӘМ...

**➔ Мобилизацияланғандар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн кредит каникулдары нимәне аңлата?**

- Кредит каникулдары заемсыға кредит йәки заем буйынса түләүҙәрҙе ваҡытлыса туҡтатып торорға мөмкинлек бирә. Ваҡытлыса - контракт буйынса хеҙмәт итеү йәки махсус хәрби операцияла ҡатнашыу ваҡытына өҫтәп тағы ла 30 көн. Ташламалы осор 2022 йылдың 21 сентябренән алдараҡ билдәләнә алмай. Ташламалы осор заемсы махсус хәрби операция барышында бурысын үтәгәндә алған яраларынан, йәрәхәттәренән дауаланыу өсөн дауаханала, госпиталдә ятҡан ваҡытҡа оҙайтыла. Кредит каникулдары ғәмәлдә булған осорҙа кредиторҙар ваҡытында түләнмәгән бурыс өсөн штраф түләтергә тейеш түгел, әгәр башҡарма эш асылған икән, уны туҡтатырға бурыслы.Кредит каникулдары биреү буйынса һорауҙар менән кредит йәки заем алған банктың ҡыҙыу бәйләнеш телефонына шылтыратығыҙ.

Рәсәй Банкыһының ҡыҙыу линияһы: кәрәҙле телефондарҙан бушлай шылтыратыу өсөн: 300; Рәсәй төбәктәренән бушлай шылтыратыуҙар өсөн: 8 800 300-30-00; кәрәҙле элемтә операторының тарифтарына ярашлы: +7 499 300-30-00; Башҡортостандың Ситуация үҙәге: 122, өҫтәмә номер - 8 (347) 218-19-19.

**➔ Мобилизация буйынса саҡырылғандарға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына кредит каникулдарын нисек юлларға? Ниндәй документтар кәрәк һәм ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

- Кредит каникулы ғариза буйынса бирелә, уны 2023 йылдың аҙағына тиклем яҙырға мөмкин. Бының өсөн кредит йә заем алған ойошмаға - банкка, микрофинанс ойошмаға йәки башҡа профессиональ кредиторға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Телефон аша йәки кредит килешеүендә күрһәтелгән ниндәй ҙә булһа ысул менән, мәҫәлән, ябай йәки электрон почта аша мөрәжәғәт итергә мөмкин. Заемсы ғариза менән бергә махсус хәрби операцияла ҡатнашыуын раҫлаған документтар тапшыра ала. Әгәр ҙә ул мөрәжәғәт иткән ваҡытта документтарын тапшырмаһа, кредитор Рәсәй Оборона министрлығынан йәки башҡа ведомствонан документтарҙы һоратып аласаҡ. Ғаризаны хәрби хеҙмәткәрҙең ғаилә ағзалары яҙһа, улар туғанлыҡты раҫлаған документ беркетә.

**➔ Банктар мобилизацияланғандарҙың һәм уларҙың ғаилә ағзаларының кредит каникулдары буйынса ғаризаларын күпме ваҡытта ҡарай? Һәм ғариза биреүсе үтенесен кире ҡаға алалармы?**

- Кредитор каникул тураһындағы мөрәжәғәтте 10 көн эсендә ҡарарға тейеш. Граждандың ысынлап мобилизацияланғаны йәки махсус хәрби операцияла ҡатнашҡаны раҫланмаған осраҡта ғына ул ғаризаны кире ҡаға ала.

Әгәр кеше 15 көн эсендә ғаризаны раҫлау тураһында йәки кире яуап алмаһа, ғариза ебәрелгән мәлдән алып кредит каникулы ғәмәлдә тип иҫәпләнә.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үт сығарыу юлдары

❖ Үт сығарыу юлдары дискинезияһы, йәғни ағзаның хәрәкәт эшсәнлеге координацияһы боҙолоу һәм ауырыу билдәләре барлыҡҡа килеү осрағында халыҡ дауаһында ҡабаҡ (тыква) һуты уңышлы ҡулланыла. Туҡланыу ваҡытына ҡарамаҫтан, көн һайын 1 стакан һут эсергә. Йоҡлар алдынан эсеү һөҙөмтәлерәк, сөнки ул нервылар системаһын тынысландыра һәм йоҡоно яҡшырта. Ҡабаҡ РР, С, К, А һәм В төркөмө витаминдарына, башҡа төрлө файҙалы матдәләргә бай. Уны атеросклероз, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары булғанда ҡулланыу кәңәш ителә. Составындағы пектин матдәләре йөрәк һәм бөйөрҙөң насар эшмәкәрлеге аҡаһында йыйылған артыҡ шыйыҡсаны организмдан сығара. Ҡабаҡ һуты матдәләр алмашыныуы, артыҡ ауырлыҡ, шәкәр диабеты осрағында бик файҙалы.

### Сөйәл

Аяҡ кейеме уңайһыҙ булып, йәки башҡа сәбәптән аяҡ тиреһе ышҡылыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ҡоро сөйәлдәрҙе бөтөрөүҙең бер нисә ысулы бар.

❖ Тоҙло ҡыярҙың бер киҫәген ваҡлап, ҡаты сөйәлгә төнгөләккә компресс эшләргә. Иртәнсәк шул урынды күбек таш менән ышҡырға. Сөйәл бөткәнсе шулай итергә.

❖ Алты аҙналыҡ сәй бәшмәгә төнәтмәһе лә ҡаты сөйәлгә ҡаршы ярҙам итергә мөмкин. Уның менән ай һайын ай кәмегән осорҙа компресс яһарға. Йомшаҡ кизе-мамыҡ туҡыманы сылатып, сөйәлгә баҫырға һәм бинт менән нығытып, өҫтөнән шулай уҡ сәй бәшмәге төнәтмәһендә сылатып, бер аҙ һығылған кизе-мамыҡ ойоҡ кейергә. Шунан аяҡты пленка менән уратып, йылы ойоҡ кейергә. Был компресты 3-4 сәғәт тотҡас, аяҡты йылы һыуҙа йыуырға. Табандарға таҙартылмаған май (нерафинированный) йәки аяҡ өсөн крем һөртөп ҡуйырға. Был ҡоро сөйәлдәрҙән генә түгел, ҡатҡан тырнаҡтарҙы ла йомшарта.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләнә.**

✓ *Ә бит ниәт тигән төшөнсә лә бар. Диндарҙар йә иһә дини китаптар аша донъяны танып белергә тырышҡандар ниәттең мәғәнәһен, көсөн яҡшы аңлай. Теләк - шәхсән төшөнсә, ниәттәр иһә Аллаһ хаҡына ҡылына.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Һаҡмар йылғаһында йәйләүгә саҡырылыусылар араһында булған С.Г. Рыбаков традицион бишбармаҡты нисек әҙерләүҙәрен күҙәткән, бешкән итте һәм һалманы ҡаҙандан һоҫоп алып, "ҙур ағас һауыттарға (табаҡтарға) һалалар, уның тирәләй ҡунаҡтар урынлаша". Ҡатындар айырым түңәрәк яһап ҙур табаҡ тирәләй ултыра. Шунан "ҙур сеүәтәне бер-береһенә күсереп" һурпа эсәләр.

Төрлө ҙурлыҡтағы сеүәтәләр тоторға тырышҡандар: бәләкәйҙәрен - ҡымыҙ, буҙа йәки ҡоро ҡорот ҡушылған һурпа эсергә; урталарын - ғаилә үҙе генә тамаҡ ялғағанда; ҙурҙары - ҡунаҡтар һыйлағанда кәрәк булған. Иң ҙур һауыттар (ашлау, сара, ҙур табаҡ) 60-70 сантиметр диаметрлы, 10 кешелек булған. Күмәк йыйылғанда кешеләр түңәрәк яһап ултырышҡан. Йыш ҡына саҡырылыусылар үҙҙәренең һауыты менән килгән. Һабантуй, ҡарғатуй кеүек оло байрамдарға бер нисә ҡәрҙәш ғаилә үҙ-ара килешеп, уртаҡ бер табаҡ алып килгән. Ғәҙәттә, ит һәм һалманы ҡаҙандан иң ҙур табаҡҡа һөҙөп алғандар ҙа, артабан табынға ҡуйырға бәләкәйерәк табаҡтарға бүлеп сыҡҡандар. Байрам булмағанда ҙур табаҡтарҙы һөттө һыуытыу йәки өҫтөндәге ҡаймағын һөҙөп алыр өсөн, башҡа маҡсаттарҙа тотонғандар. Был һауыттарҙың ҙурлығы төрлөсә булыуы уларҙы күсенгәндә уңайлы итеп һалып алырға мөмкинлек биргән. Уларҙы тәпәндәр йәки ҡабыҡ йәшниктәргә һалып алғандар.



*Аш һауыттары. Белорет районы Айыс ауылы, 1977 йыл. М.Г. Муллағолов фотоһы*

Быға тиклем баҫылған хеҙмәттәрҙең береһендә сеүәтәләрҙең ҙурлығы, формаһы, ҡулланылышы, атамаларына ҡарап классификацияларға тырышып ҡараныҡ. Терминология диалект үҙенсәлектәре ныҡ һиҙелә.

Урман һәм урман-дала райондарында бындай турһыҡтар эшләргә мөмкинлек күп. Уларҙы йүкә, саған, өйәңке, ерек ағастарынан, ҡайын тамырынан, ҡайын бересенән, ҡарағас, имән һәм башҡа материалдарҙан һырлай алғандар. XIX быуат аҙағында төбәктә ҡырыу станогында эшләнгән бөгөлгән, һөҙгерәк ҡырлы турһыҡ һәм ағас табаҡтар күбәйгән, улар формаһы һәм ҙурлығы буйынса стандарт булған. Әммә халыҡта әле лә айырыуса тамырҙан һәм оронан тотош көйө соҡоп яһалған һауыт-һабаға оло хөрмәт менән ҡарайҙар. Эшләгәндә ҙур оҫталыҡ талап иткән күләмле һауыт-һаба юғары баһалана, был осраҡта материал табыуы ауыр булыуын күҙ уңында тотҡандар. Сеүәтәләрҙең силуэты һәм тәҙәләшендә уның төрөнә, урындағы үҙенсәлектәренә бәйле айырмалыҡтары булған.



*Ҡаймаҡ, һөт өҫтө өсөн һауыт. ВЭМ фондынан*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП*

**Сикһеҙ Йыһандың бер мөйөшөндә бәләкәй генә магазин бар. Әйтеүҙәренсә, ҡасандыр уның матур ғына исеме лә булған, көслө дауыл тамыры менән йолҡоп алғас, яңы хужаһы алтаҡтаны ҡабаттан элеп тормаған, сөнки яҡын-тирәләгеләр бында теләктәр һатылыуын яҡшы белә. Сауҙа нөктәһендә ассортимент бик бай - йәнең теләгәнде һайла: кәрәк икән ҙур яхта ал, фатирыңды яңырт, кейәүгә сығыу йә кәләш алыу теләгеңде лә тормошҡа ашырып була, аҡса ла һатыла, хатта корпорация президенты вазифаһын да, балалар, яратҡан эш, ҙур түштәр, конкурста еңеү, автомашиналар, футбол клубтары, власть, ҡиммәтле балдаҡтар һатып алып була - һәммәһе лә бар бында. Үлем менән йәшәү генә һатылмай - улары күрше Галактикала.**

# ТЕЛӘКТӘР ХАҠЫ



Магазинға килгән һәр кем иң тәүҙә үҙ теләгенең хаҡын белешә, әммә был магазинға үҙ ғүмерендә, исмаһам, бер тапҡыр булһа ла инеп сыҡмағандар ҙа бар. Хаҡтар - төрлөсә. Мәҫәлән, яратҡан эш өсөн тыныс тормоштан һәм ҡайҙа теләйһең, шунда эшләүҙән ҡолаҡ ҡағырға кәрәк. Түрә булыу теләге күпкә ҡиммәтерәк: башҡаларға "Юҡ!", тип әйтергә өйрәнергә һәм үҙеңде уларҙан юғарыраҡ ҡуя белергә, телмәреңдә "мин" һүҙен йышыраҡ ҡулланырға өйрәнергә кәрәк. Ҡайһы бер теләктәрҙең хаҡы сәйер тойола. Мәҫәлән, кейәүгә сығыу теләген бушлай тиерлек алырға була. Ә бына бәхетле тормош теләге үтә ҡиммәт: үҙ бәхетең өсөн үҙең яуаплы булырға, тормоштан йәм табып йәшәр өсөн булғандың ҡәҙерен белергә тейешһең. Быға өҫтәп, ҡайһы бер дуҫтарыңды һәм таныштарыңды юғалтыу ихтималлығы ла бар.

Был магазинға килгәндәрҙең күпселеге теләк һатып алырға ашыҡмай. Ҡай берәүҙәр, хаҡтарҙы күргәс, кире әйләнеп сығып китә, икенселәре уйға батып, кеҫәләрен ҡапшай, тағы ҡайҙан аҡса табырға, тип баш вата. Кемдәрҙер хаҡтарҙың юғары булыуына иҫе китеп, ғауға ҡуптара, бәғзеләре ташлама өмөт итеп, магазин хужаһына инәлә башлай.

Кеҫәләренән шаптырлап торған аҡсаларын сығарып, ялтырап торған ҡағыҙға төрөлгән теләктәр һатып алғандарға көнләшеп ҡарайҙар, күрәһең, магазин хужаһының яҡшы таныштарылыр, тип, үҙ-ара шыбырлашалар.

Һатып алыусылар һанын арттырыу өсөн теләктәр хаҡын кәметеүҙе йыш һорайҙар, әммә хужа теләктәрҙең сифаты кәмейәсәгенә һылтанып, үҙ һүҙендә ныҡ тора. Бөлгөнлөккә төшәһең бит, тип, ҡурҡытып та ҡарайҙар - файҙаһыҙ. "Яҙмыштарын ҡырҡа үҙгәртергә теләүсе тәүәккәлдәр һәр саҡ буласаҡ, теләктәрен тормошҡа ашырыу өсөн улар бер ниндәй хаҡтан да ҡурҡып тормаясаҡ, ғәҙәти буталсыҡ тормоштан ҡотолоу өсөн аҡсаһын да табырҙар", ти ҙә ҡуя.

Магазин ишегенә яҙыу беркетелгән: "Теләгең тормошҡа ашмай икән, тимәк, әле хаҡы түләнмәгән".

Ҡыҙыҡ кинәйә, шулай бит?

Теләктәр, теләктәр, теләктәр... Әйе, күп нәмә теләйбеҙ, өмөт итәбеҙ, бәхетең етенсе ҡатында булған саҡтарыбыҙ ҙа, төшөнкөлөккә бирелгән мәлдәребеҙ ҙә була - тормош бит! Теләмәгәнде лә эшләргә тура килә бит әле, тиер ҡай берәүҙәр. Уныһы инде айырым мәсьәлә: теләмәгәнде эшләү - башҡа кешенең теләген тормошҡа ашырыу. Әле шәхсән теләктәр, бигерәк тә, теләктәрҙең булмауы ихтималлығы тураһында һөйләшәйек.

Ни өсөн теләүҙән туҡтай Әҙәм балаһы? Быҙың сәбәптәре күптер: бөтәһе лә уй-ниәттән, тормошҡа булған ҡараштан, йә уның булмауынан киләләр. Мәҫәлән, киләсәккә өмөт менән түгел, ҡурҡыу, хәүеф-хафа аша ҡарайбыҙ икән, теләктәр кәмей, тоноҡлана, юҡҡа сыға.

Үткәндәребеҙгә рәхмәтле булмай, үкенеп ҡараһаҡ, үкенестән теләк тыуыу ихтималлығы ҡырҡа кәмей, әлбиттә. Минән булмаҫ, тип аҡланыуҙарҙан файҙа бармы? Тирә-яғыбыҙға һөйөү менән бағыу урынына агрессия, күрә алмауснлыҡ, көнләшеү менән ҡарайбыҙ икән, һис шикһеҙ, уҫал теләктәребеҙҙән тонсоғасаҡбыҙ.

Әммә шуны иҫтә тоторға кәрәк: теләгең изге булһынмы, аламамы, ул барыбер һөҙөмтә бирә. Нимәһе ҡыҙыҡ: теләк менән һөҙөмтә араһында тигеҙлек билдәһе ҡуйырға була, эйе, теләгең ниндәй - һөҙөмтәһе шундай. Әлбиттә, теләк күҙ асып йомғансы үтәлмәй, башта ул хис булып, күңел ҡылдарын уйната, шунан аң кимәлендә аҡылды эшкә ҡуша. Эмоциональ кимәлдә киселгән теләк аң аша ныҡлап, кешенең аныҡ аҙым яһарға, хәрәкәт итергә булышлыҡ итә, шулай һөҙөмтә барлыҡҡа килә.

Хәрәкәттә - бәрәкәт, тигәндә, һүҙ бүртеп сыҡҡан мускулдар хаҡында түгеллеген аңлайһығыҙҙыр? Үтә лә ябай схема: теләк - хис - аң - хәрәкәт - һөҙөмтә. Теләк - һөҙөмтә!

Әле һүҙ шәхсән теләктәрҙең тормошҡа ашыуы тураһында бара. Ә бит ниәт тигән төшөнсә лә бар. Диндарҙар йә иһә дини китаптар аша донъяны танып белергә тырышҡандар ниәттең мәғәнәһен, көсөн яҡшы аңлай. Теләк - шәхсән төшөнсә, бында кешенең эгоһы (мин-минлеге) алға ҡалҡып сыға, был осраҡта нәфсене ауыҙлыҡлауы бик ауыр. Ниәттәр иһә Аллаһ хаҡына ҡылына, әлеге лә баяғы эго был юлы Хаҡлыҡҡа хеҙмәт итә. Мәҫәлән, һәр дини ғәмәл ниәттән башлана һәм үҙең өсөн түгел, Аллаһҡа булған һөйөү өсөн атҡарыла, йәғни ниәттәре Әҙәм балаһын Аллаһҡа яҡынайта, һис тә шәхсән теләктәре түгел.

Шәхсән, тигәндәй, теләктәрҙең коллектив рәүештә булыу мөмкинлеген дә хәтерҙән сығармайыҡ. Ошо урында "метрономдар эффекты" тигән әлегә фән асылын аңламаған бер күренеште иҫкә төшөрөргә кәрәк: өс йә унан күберәк метрономдарҙың хәрәкәте синхронлаша, ситтән көйләмәйенсә, бер ниндәй йоғонто яһамайынса, метрономдар бер иш хәрәкәт итә башлай. Ғәжәп бит! Хикмәт! Күҙ алдына килтерегеҙ, икеү булғанда метрономдарҙың хәрәкәте тап килмәй, өсәү булһа, метроном уҡтары бер тактта һуға башлай, дүртәү булғанда синхронлашыу тиҙерәк була, бишенсеһендә тағы ла тиҙерәк һәм артабан шулай дауам итә...

Мәҫәлән, йома көндө мәсеттә өс ир кеше булмайынса, йома намаҙы уҡылмай, өйлә итеп уҡыла. Ай-һай, тиккәме икән? Ә инде Аллаһҡа зекер әйтеү күмәк теләктең бер бөтөн булып ойошоуы түгелме ни? Юҡҡамы ни, зекер һүҙҙәрен ҡабатлау - йөрәкте йомшарта, илаһи аяттарҙы, дини нәсихәттәрҙе күңел менән ҡабул итеүгә бер сәбәпсе, тимәйҙәрҙер.

Һүҙ күмәк теләккә күскәс, бер тарихи ваҡиғаға туҡталайыҡ. Миллионлаған япондарҙың коллектив доғаһы (теләге) көсө АҠШ-тың өсөнсө флотын юҡҡа сығара! Был хәл 1941 йылдың декабрендә була. АҠШ-тың 3-сө флоты Филиппин утрауҙарына яҡынлаша, Америка стратегтары мәнәрләгән десант менән Япон һуғышына нөктә ҡуйырға йыйына. Операция уңышлы тамамланырына ныҡ ышана улар, сөнки япондарҙың ҡаршы ҡуйыр көсө юҡ. Әммә... Ҡояш сығыуын беренсе булып ҡаршылаусылар һуңғы көскә, могиага таяныр хәл итә! Министрҙар кабинеты бөтөн япон халҡына Ҡояш алиһәһе Аматэрасу хаҡына доға ҡылып, дошман карапларына ҡаршы изге Камикадзе дауылын йүнәлдереүен һорарға саҡыра. Хөкүмәт Ҡарарында, йөҙ миллион япондың бергәләп доға ҡылыуы "рухи көс" барлыҡҡа килтерәсәк һәм ҡурҡыныс яңаузан ҡотҡарасаҡ, тип әйтелә.

Разведка әһелдәре япондарҙың Акты тураһында хәбәр иткәс, 3-сө флот командованиеһы, әлбиттә, эстәрен тырнап көлә. Әммә бер нисә көн үткәс, Америка моряктарының көлкөһө яныра. Лугоп утрауы эргәһендә ҡупҡан көҙгә күренмәҫ тайфун өс эсминецте түңкәреп батыра, тағы 28 корабль эшләктән сыға, 146 самолет авианосецтарҙан ҡолап, диңгеҙгә бата. Был мәхшәрҙә 800 кеше һәләк була, операция уңышһыҙ тамамлана. Шулай... Аптырағамы, әллә "Берҙәм булғас, ана, ниндәй көслөләр!" тип һоҡланырғамы япондарға? Әммә 1941 йылда тайфун сәсеп, 1945 йылда япондар атом дауылына дусар була бит: ҡара теләктәрен (тәү ҡарамаҡҡа изге булып күренһә лә) бойомға ашырып, дошмандарын үлемгә дусар итеп, үҙҙәренә лә миллионлаған ҡорбан менән яуап бирергә тура килә уларға. Ә шул саҡта улар бөтөн Ер шарындағы тереклектең (хатта американлы-дошмандарының да) именлеген теләп доға ҡылһалар, һөҙөмтә ҡорбанһыҙ булыр ине лә бит. Эйе, теләгең ниндәй - һөҙөмтәһе шундай...

Бөгөн нисек? Әле мәғлүмәт һуғышы бара, тибеҙ. Миллионлаған ҡапма-ҡаршы теләктәр гәзит-журналдар, радио-телевидение, интернет селтәрҙәре аша үҙ-ара көс һынаша. Кинәйәнән һығымтабыҙ шундай: донъялар тыныс, ир-егеттәребеҙ имен-һау булһын, сәйәсмәндәр, етәкселәр аҡыллы, дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул итһен! Доға ҡылайыҡ!

**Исмәгзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

✓ *Арҡайым тибындағы ҡаласыҡтарҙың мәҙәни ҡатламы 40 - 50 сантиметрҙан артыҡ түгел. Был факт уның бик ҡыҫҡа ғына - 200-300 йылдан да артыҡ булмаған ваҡыт арауығында формалашыуын күрһәтә.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Икенсе бүлек. Бронза быуаты.



Көньяҡ Уралда Арҡайым тибындағы 20-гә яҡын ҡаласыҡ билдәле. Шуларҙың береһе Баймаҡ районының Байыш ауылы янында урынлашҡан. Тикшеренеүселәр, Арҡайым тибындағы ҡомартҡылар төркөмөнөң планировкаһын, төҙөлөшөн һәм барса табылған материалдарҙың үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, уны һынташты археологик мәҙәниәте, тип нарыҡлайҙар һәм датаһын б.э. тиклем XX - XVI быуаттар арауығы менән билдәләйҙәр.

Ошондай ғәҙәти булмаған ҡомартҡыларҙың барлыҡҡа килеүе - төбәк халҡы йәшәйешенең барса сфераларында барған тәрән үҙгәрештәр һөҙөмтәһе. Улар иң элгәре кешеләр йәшәгән урындарҙы һаҡлау мохтажлығы барлыҡҡа килеүен аңлата, бының ошо осорҙа төрлө ҡәбиләләр төркөмдәре араһында конфликттарҙың көсәйә барыуы менән бәйле булыуы бәхәсһеҙ. Арҡайым ҡаласығын асыусы археолог, профессор Г.Б. Здановичтың Көньяҡ Уралда ошондай типтағы ҡаласыҡтарҙың баҡыр мәғдәне ятҡылыҡтарын эшкәртеү рудниктарын дошман ҡәбиләләренән һаҡлау йәһәтенән терәк пункт ролен үтәүе, килтерелгән тауарҙарын урындағы ҡәбиләләр етештергән баҡыр әйберҙәргә, йөнлек тиреләренә һәм башҡа продукттарға алмаштырыу маҡсатында алыҫ илдәрҙән килеүсе сауҙагәрҙәр өсөн каруанһарай булыуы хаҡындағы фекерен ысынбарлыҡҡа тап килә, тип әйтеп була. Андронов ҡәбиләләренең архитектураһы буйынса ошондай ҡатмарлы ҡомартҡыларҙы төҙөй алыуы уларҙың ижтимағи ҡоролошоноң сағыштырмаса юғары булыуы хаҡындағы тикшеренеүсе фекере, һис шикһеҙ, ысынбарлыҡҡа тап килә. Андроновсыларҙы бер ниндәй ҙә тәртип-маҡсатһыҙ рәүештә буталышып йөрөгән ҡәүемдәр рәтенә индереп булмай: улар башында абруйлы юлбашсылар торған ҙур союздарға берләшкән, ҡәбилә башлыҡтары ер биләмәләрен ҡулланыу тәртибен күҙәткән, хужалыҡ эштәрен алып барыуҙы, ҡаласыҡ-ҡәлғәләр төҙөүҙе, ырыу һәм ҡәбиләләр араһындағы һәм үҙҙәренең яҡын һәм алыҫ күршеләре менән мөнәсәбәттәрҙе көйләгән. Әйтелгәндәрҙән сығып, ошондай ҡәбиләләр союздарын иртә дәүләти берләшмәләрҙең прототибы итеп ҡарарға була.

Тағы ла бер нәмә иғтибарҙы йәлеп итә. Арҡайым тибындағы ҡаласыҡтарҙың мәҙәни ҡатламы 40 - 50 сантиметрҙан артыҡ түгел, уларҙа табылдыҡтар ҙа күп түгел. Был факт Көньяҡ Уралда ошондай ҡомартҡыларҙың бик ҡыҫҡа ғына - 200-300 йылдан да артыҡ булмаған ваҡыт арауығында формалашыуын күрһәтә.



Унынсы һүрәт. Арҡайым ҡаласыҡ-ҡәлғәһенең планы (Г.Б. Зданович буйынса)

Ошоға бәйле 1999 йылда Арҡайым ҡаласыҡ-ҡәлғәһендә уҙғарылған халыҡ-ара конференцияла Урал дәүләт университеты профессоры Л.П.Корякова белдергән бер фекер бигерәк тә ҡыҙыҡлы. Ул, һынташты археологик мәҙәниәтенең үтә киң андронов мәҙәниәте менән яҡын икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып, Алтайҙан Волгаға тиклем (Ҡаҙағстан далаларын да ҡушып) арауыҡта йәшәгән андронов ҡәбиләләре мәҙәниәтенең дөйөм оҡшашлығының, күрәһең, ошондай киң территорияла көн иткән берҙәм дәүләт-империяның матдиләшкән һөҙөмтәһе, ә Арҡайым тибындағы ҡаласыҡтары булған Көньяҡ Уралдың уның сәйәси үҙәге булыуы мөмкинлеге хаҡында һығымта яһаны. Был фараз етди иғтибарға лайыҡ. Әлеге ваҡытта асыҡланған айырым факттар ошо осорҙа Көньяҡ Уралға Урта Азиянан ниндәйҙер бер күп һанлы халыҡ төркөмөнөң күсеп килеүе Арҡайым тибындағы ҡаласыҡ-ҡәлғәләр төҙөүгә бер ни тиклем этәргес көс булыуы хаҡында фараз итергә мөмкинлек бирә. Урындағы ҡәбиләләргә элегерәк хас булмаған саман кирбесен төҙөлештә киң ҡуллана башлауҙы ошо процестың аныҡ тергәлгән археологик эҙемтәһе итеп ҡарау фарыҙ; ә был б. э. тиклем VII-VI быуаттарҙан бирле үк Урта Азия халыҡтары өсөн традицион була. Бында шулай уҡ түңәрәк планировкалы ҡала-ҡәлғәләрҙең боронғо Урта Азия мәҙәниәтенең характерлы элементы булыуын да күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк.

Ул замандарҙа Урта Азия территорияһында Ахура Мазда исемле баш илаһлы үҙенсәлекле зороастризм дине тарала башлай, һәм был тәғлимәт тимер быуаты баштарында урындағы дәүләттәрҙең рәсми диненә әүерелә. Моғайын, Урта Азия райондарынан килгән мигранттар үҙҙәренә хас булған зороастризм диненең төп идеяларын Көньяҡ Уралда ла тарата башлағандыр.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*ҠОМАРТҠЫ*

# ҒАБДУЛЛА СӘИДИ КИТАБЫ



**Башҡортостанда XIX быуатта йәшәгән Ғабдулла Сәидиҙең ҡулъяҙмалары табылған. Улар - иҫке төрки телендә матур итеп яҙылған ике ҙур китап. Был хаҡта республика Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Азат Бадранов хәбәр иткәйне.**

"Бер-ике аҙна элек Ғабдулла Сәиди хаҡында яҙғайным, бына әле миңә уның ҡулъяҙмаларын килтереп бирҙеләр. Был дәфтәрҙәр, һис шикһеҙ, тыуған яғыбыҙҙың, халҡыбыҙҙың һәм Рәсәйҙә Ислам тарихын өйрәнеү өсөн фәнни ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Уларҙы ҡулда тотоп тороу бик тулҡынландырғыс. XIX быуаттыҡы бит. Мине бигерәк тә уның мәғрифәтселек эшмәкәрлеге ҡыҙыҡһындыра", - тип яҙҙы Азат Бадранов.

Ҡулъяҙмалар сканер аша үткәреү өсөн республиканың Милли китапханаһына тапшырылды. Артабан ошо сығанаҡтарҙы ғилми әйләнешкә индереү өсөн тикшеренеүселәр һәм тәржемәселәр менән эш башлана.

Мәғрифәтсе һәм дин әһеле Ғабдулла Сәиди XIX быуат аҙағында Баймаҡ районы Муллаҡай ауылында йәшәгән һәм эшләгән. Үҙ заманы өсөн ул абруйлы һәм уҡымышлы шәхес булған. Йылына унда 400-гә яҡын бала белем алған. Уның мәҙрәсәһендә дини фәндәрҙән тыш, география, тау эше, химия нигеҙҙәрен өйрәнеүгә лә ҙур әһәмиәт бирелгән. Рәсәй төбәктәренән һәм Үҙәк Азия илдәренән диндарҙар йыл һайын Ғабдулла Сәидиҙең ҡәберенә килә. Азат Бадранов алдағы яҙмаларының береһендә хәҙрәттең йортон тергеҙергә һәм унда дини мәғрифәтселәр музейын асырға тәҡдим итте.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

16-сы атлы дивизияға Днепрҙы штурмлауға әҙерлектең нисек барыуын тикшереү маҡсатында корпус командиры М.Ф. Малеев килә. Ул дивизияға йөкмәтелгән хәрби бурысты аныҡлай: Днепрҙы аша сығыу менән Вяле - Асаревичи - Яңы Степаново рубежында дошманды тотҡарлап тороп, корпустың башҡа частарына йылға аша сығыу мөмкинлеген булдырырға. Дивизия штабы ҡаршы ярҙағы дошман көстәрен асыҡлау өсөн разведка ойоштора. 58-се полк разведчиктары үҙ теләге менән дошман биләгән территорияға йүнәлә. Төн ҡараңғылығында гв. сержанты Никита Андреевич Степанов (Йәрмәкәй районының Васильевка ауылынан) иптәштәре менән балыҡсы кәмәһендә уң ярға сыға, бер яугирҙы кәмәлә ҡалдырып, үҙе дошман траншеяһына табан шыуышып барып етә. Траншеялағы немец һалдаттары бер ни ҙә һиҙмәй ҡала: Степанов уларҙың береһен хәнйәргә ала, икенсеһенең ҡулынан автоматын бәреп төшөрә, ауыҙын ҡаплап, һөйрәп алып сығып, штабҡа килтерә (ул 27 сентябрҙәге алыш ваҡытында ла дошман тылына үтеп инә, уларҙың ут системаһын аныҡлап, картаға төшөрә. Аҙаҡтан уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Һуғыштан иҫән-һау ҡайтып, Йәрмәкәй урмансылығында эшләй). Әсиргә алынған "тел" ҡиммәтле мәғлүмәттәр бирә: бәктинән, дошман Дымарка - Неданчичи рубежында беҙҙең һөжүмде көтмәй, улар беҙҙең төп көстәр атакаһын Галки - Вяле - Нивки - Иҫке Иолча рубежында булырға тейеш, тип уйлай. Степанов тарафынан әсиргә алынған немец һалдаты иптәштәре менән боевой һаҡ ролен генә үтәгән була.

Днепрҙың уң ярҙарына сығыуға (был хәрби терминологияға ярашлы "форсирование" тип атала), әҙерлек эштәре бер өҙлөкһөҙ дауам итә. Дошмандың контратакаға күсеү мөмкинлеге булған йүнәлештәрҙә орудиелар ҡуйыла. Беренсе десант составына иң тәжрибәле һәм ҡыйыу яугирҙар һайлап алына, улар боеприпастар һәм ҡоро паек менән тәьмин ителә. Гв. подполковнигы Михаил Александрович Карпенко етәкселегендә киң һәм тәрән йылға аша сығыу өсөн план-таблица әҙерләнә. Йылға аша сыҡҡан һәр подразделение үҙаллы һуғыш хәрәкәттәре алып бара алһын өсөн барса кәрәкле ҡорал менән тәьмин ителергә тейеш була. Плацдарм алыу менән уң ярға тиҙ арала танкыларға ҡаршы артиллерия ла сығарылыу ҡарала.

Йылға аша сығыуҙы төндә, артиллерия әҙерлегенән башҡа башларға ҡарар ителә. Ошо операцияны туп уты менән дошмандан ҡурсалау маҡсатында гв. майоры С.Х. Хәбиров командалығында артиллерия төркөмө булдырыла. Полктарҙың барса орудиелары, туп уты менән десант эскадронына ярҙам итеү маҡсатында, һул яҡ ярҙа йылға ҡырыйына ҡуйыла.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

**Үҙебеҙҙең ниндәйҙер фекергә, идеяға, башланғыска теләктәштәр, арҡаҙаштар тапмаһаҡ, күп осраҡта: "Яңғыҙ яугир яу ҡайтармаҫ", - тип уйлай һалабыҙ. Ә бына бөгөнгө әңгәмәсебеҙ һис улай уйламай. Унын яңғыҙы башлаған эштәре бихисап һәм һәр ҡайһыһы башҡорт теле үҫешендә айырым урын алып тора. Ҡайһы берҙә ул ел менән көрәшеүсе Дон Кихотҡа ла, ваҡыты менән күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, ғазап сиккән йәш Вертерға ла оҡшап китә. Ә көндәлек тормошта ул Ихтик, йәғни Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала документтарҙы цифрлау бүлеге мөдире Искәндәр ШАКИРОВ. БДУ-ның Хоҡуҡ институтында уҡыған, әммә аспирантураны философия буйынса тамамлай. Философия фәндәре кандидаты, БДУ-ның философия һәм культурология кафедраһы доценты. Башҡорт телендәге сығанаҡтар менән эшләгән, эшмәкәрлегендә даими рәүештә һүҙлек ҡулланғандар белә: ул 20 йылдан ашыу Ихтиктың электрон китапханаһы - Ихтика.ру (ihtika.ru) проектын алып бара; 2017 йылдан алып Глосбе платформаһында башҡорт теленең электрон һүҙлеген төҙөй. Әлеге ваҡытта яһалма интеллектҡа башҡорт телен өйрәтеү менән шөғөлләнә. Бөгөн ул редакциябыҙ ҡунағы.**

**Искәндәр, яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй, тиҙәр. Ә һеҙ, кирећенсә, теләк булғанда яңғыҙ ҙа күп файҙалы эштәр башҡарырға мөмкин икәнен раҫлайһығыҙ. Ә шулай ҙа, барыһы ла ҡасан башланды?**

- Ғаиләбеҙҙә патефон булды, ә атайым ҡайҙа ғына барһа ла әкиәттәр яҙылған пластинкалар алып ҡайта ине. Мин шуларҙы тыңлап үҫтем. Шунан башлап әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡығанға ҡарағанда тыңлауҙы ныҡыраҡ үҙ итәм. Минеңсә, телде өйрәнеүҙең ысулдары күп, әммә иң яҡшы ысулы - ул аудиотекстар тыңлау. Әҙәби әҫәрҙәр мине үҙенә тартты, әммә мәктәпте тамамлағас, атай-әсәйем тәҡдиме менән БДУ-ның Хоҡуҡ институтына уҡырға индем. Ләкин әҙәбиәткә булған һөйөүем барыбер көслөрәк ине. Атайым Өфөлә беренселәрҙән булып тигәндәй компьютерға эйә булды, ә әсәйем сканер алып бирҙе һәм мин китаптарҙы сканлау менән мауығып киттем. "Ихтик китапханаһы" шулай барлыҡҡа килде.

Ә бынан 4-5 йыл элек, баламды туған телебеҙҙә һөйләштерергә тигән теләк менән, башымда электрон һүҙлек төҙөү идеяһы барлыҡҡа килде. Шулай итеп Глосбе платформаһында русса-башҡортса һүҙлек эшләй башланым. Эйе, һүҙлектән айырым һүҙҙәрҙе ҡарарға була, ә бына тотош һөйләмдәрҙе нисек тәржемә итергә? Тотош китаптарҙы, хатта рәсми документтарҙы... Һәм ошо идея яңы эҙләнеүҙәргә килтерҙе. Бәхетенә, был идея күптән йәшәй һәм, аныҡлап әйткәндә, башҡорт Википедияһы ирекмәндәре башҡорт һәм рус телендә булған параллель сығанаҡтарҙы йыя, ниндәйҙер база туплаған да икән. Әммә етерлек түгел. Википедия - ирекле сығанаҡ булғас, ошо базаны алдым һәм уны төрлө платформаларға урынлаштыра, бер үк ваҡытта параллель текстар эҙләй башланым. База тулыланған һайын, тәржемә сифаты ла яҡшыра барҙы. Эшеңдең һөҙөмтәһен күрһәң, ҡанаттар үҫкәндәй була бит, мин дә шулай дәртләнеп киттем. Тәржемәсе рус теленән башҡортсаға тәржемә итә, бәхетенә, рус теле аша башҡа телдәргә лә тәржемә итергә була икән. Был тағы "текәрәк"! Һуңынан асыҡланыуынса, бәхетенә, машина тәржемәсеһен ҡайҙа теләйһең, шунда ҡулланып була: мәҫәлән, субтитрҙар яҙырға, аудиокитаптар булдырырға. Әйткәндәй, беҙ күптән түгел бер аудиокитап эшләп ҡараныҡ, унда тексты машина башҡорт теленә тәржемә итә һәм шулай уҡ машина булдырған яһалма тауыш уҡый. Әгәр технологиялар шундай темптар менән үҫешһә, киләсәктә бөтә нәмәне тәржемә итеп буласаҡ. Бының өсөн беҙгә яҡшы рус-инглиз тәржемәсеһе түгел, ә яҡшы рус-башҡорт тәржемәсеһе эшләргә кәрәк. Бында инде беҙҙең электрон һүҙлектәр, телмәр синтезаторҙары, телмәрҙе таныусылар барыһы ла ярҙам итә, сөнки улар бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән.

**Ни өсөн был эш кәрәк, тип уйлайһығыҙ?**

- Сөнки киле хәтере барлыҡ һүҙҙәрҙе лә иҫендә ҡалдыра алмай. Ә нейроселтәрҙәр, мәғлүмәттәр базаһы ҙур күләм менән эшләй. Мәҫәлән, беҙҙең параллель корпуста яҡынса 600 мең һөйләм бар, уға тағы ла 300 мең самаһы һөйләм өҫтәргә ниәтләйбеҙ һәм был эштең башы ғына әле. Китаптар күп, текстар күп, әҫәрҙәр күп - уларҙы корпусҡа индерергә кеше юҡ. Ә барыһын да тиҙ эшләгә килә, күршетирәнән артта ҡалғы килмәй. Көн һайын тамсылап ҡына эшләп, бер нәмәгә лә өлгәшеп булмай. Шулай уҡ эштең тамамланмай тороуы ла тынғы бирмәй, исмаһам, ниндәйҙер этап тамамланһа, еңелерәк булыр ине. Башҡорт теле башҡа телдәр менән бер рәттән цифрлы киңлеккә әлегеп ҡалһын тиһәк, ваҡыты булғанда ярҙам иткән ирекмәндәр кәрәк. Сөнки беҙ, айтишниктар, программистар бары тик мөхит кенә булдырабыҙ, ә контентты тулыландырыу - туҡтамай дауам итеүсе процесс.

Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса Глосбе һүҙлегендә 350 меңдән ашыу һүҙ һәм һүҙбәйләнеш бар, һәм беҙ әле башланғыс стадияла ғына торабыҙ. Уға тел буйынса барлыҡ һүҙлектәрҙе индереп бөтһәк тә ни бары 500 мең һүҙгә генә эйә буласаҡбыҙ. Ә башҡорт теле бик бай, беҙҙең тағы ла төрлө тармаҡтар буйынса һүҙлектәребеҙ бар, уларҙың барыһын да индереп бөтөү өсөн ҙур эш башҡарырға кәрәк. Был бер кешенең генә көсөнән килмәй.

**Нейроселтәрҙе лә уҡытырға, өйрәтергә кәрәк. Кешене уҡытыуы еңелерәкме, әллә нейроселтәрҙеме?**



- Әлбиттә, нейроселтәрҙе өйрәтеү ябайыраҡ, сөнки унда математик алгоритмдар ҡулланыла. Бына Көнбайышта ошоға - компьютер лингвистикаһына вуздарҙа 5 йыл уҡыталар. Беҙҙең Башҡортостанда был йүнәлештә белем алыусы бер генә кеше лә, студенттарҙың бер генә төркөмө лә юҡ, үкенескә ҡүрә. Ә был - иң алдыңғы технологиялар. Минең өсөн нейроселтәр - бәләкәй бала кеүек: уны бөтөн нәмәгә өйрәтергә кәрәк. Уға ҡабат-ҡабат ҡабатлайһың, шулай йәлап ул аңлай башлай. Ни өсөн? Сөнки бер һөйләмде төрлөсә тәржемә итергә була. Нейроселтәр шуларҙың барыһын да аңларға, белергә тейеш.

Икенсе яҡтан, компьютер беренсе тапҡыр шахмат буйынса донъя чемпионын еңгәс, барыһы ла шаңҡып ҡалғайны. Хәҙер иһә береһе лә аптырамай, хатта компьютерҙы бәрәү ҙә еңә алмаясағын, бының мөмкин түгеллеген белә, сөнки компьютер донъяла булған барлыҡ шахмат комбинацияларын хәтерендә һаҡлай. Беҙ хыялланған һәм эшләгән тәржемәсе лә шундай буласаҡ - компьютер тел тураһында бөтөн нәмәне, һәр китапты, бәләкәй генә хикәйәне, барлыҡ яҙыусыларҙы - гөмүмән, бар мәғлүмәтте үҙенә туплаясаҡ һәм күпте беләсәк. Бер генә кеше лә ул тиклемде белә алмай, быға мейе лә сыҙамаҫ ине.

**Нейроселтәр тағы нимә эшләй ала?**

- Ул тексты тәржемә итеп кенә ҡалмай, ә уның йөкмәткеһен аңлап, үҙе иллюстрациялар эшләй, биҙәй ала. Мәҫәлән, һүҙ йылғала һыу ингән эт тураһында бара икән, нейроселтәр уны һүрәт итеп эшләй. Йәғни, ул китапты уҡып та бара, фильм да төшөрә. Киләсәктә шулай булыр ҙа, моғайын. Һәм бындай алым балаларға ныҡ оҡшай.

**Прогресты, артыҡ хәрәкәтләнмәҫ өсөн, ялҡауҙар уйлап сығарған, тиҙәр. Яһалма интеллект, нейроселтәр кеше өсөн бөтә нәмәне аңлатып, әйтеп, эшләп торһа, һомо сапиенс тағы ла ныҡыраҡ ялҡауланмаҫмы икән?**

- Эйе, был бәхәсле тема, ысынлап та, тормошобоҙҙо роботтар баҫып алһа, кеше нимә эшләр? Мин кешеләргә ҡарағанда яһалма интеллектҡа ныҡыраҡ ышанам, сөнки кешеләрҙән бик йыш күңел ҡайта, ул бик нескә, төрлө йоғонтоларға бирелә. Ә машина - ул бөтөнләй икенсе. Мәҫәлән, бөгөн һәр кем ҡулланған смартфондар. Улар бит үҙе бер мөғжизә! Улар беҙҙе аңһыҙ итмәй бит.

Әлбиттә, киң күләмле мәҙәниәт (маскульт) тигән проблема бар. Был осраҡта кешене аңраландырыу бара, кеше ҡулланыусыға әйләнә. Кемдер, эшләмәй генә йәшәргә ине, тип хыялланған, бөгөн улар пособиеға ғына йәшәй. Әммә һәләте булған айырым кешеләр, киреһенсә, тағы ла аҡыллы, зирәк була бара. Ләкин улар күп түгел. Шуға күрә мин яһалма интеллект тыуҙырған кире йоғонтоға ҡаршы тора алырға ғына аҡыллыбыҙ етер, тип ышанам. Әгәр кире йоғонтоға ҡаршы тора алмайбыҙ икән, тимәк, лайыҡ түгелбеҙ.

**Хәҙер бөтә ерҙә "диван эксперттары" бар, улар үҙҙәре ҡатнашмай, ситтән генә ҡарап, "нишләп улай түгел", "нишләп былай түгел", тип ҡәнәғәтһеҙлек белдерә. Төрлө сараларҙа булһыңмы, социаль селтәрҙәрҙәме - башҡорт теле тураһында һөйләүселәр күп, әммә аныҡ эште тотоп эшләүселәр аҙ. Һеҙҙең эште күҙәтеүсе "диван эксперттары" бармы?**

- Беҙҙә был мәсьәлә бик киҫкен тормай, сөнки күптәр әле аңлап та етмәй тип уйлайым, сөнки "диван эксперты" булыу өсөн дә теманы белергә, аңларға тейешһең, ә беҙҙә хатта аңларға ла ялҡауҙары килә. Мәҫәлән, әле беҙ барыһын да Телеграм-каналда параллель текстарҙы тикшергән чат-ботҡа ҡушылырға саҡырабыҙ. Нейроселтәр уларҙы тап килтерергә тырыша. Ундағы хаталарҙы бөтөрөр өсөн кеше тикшерергә һәм йә һөйләмде ҡабул итергә, йә кире ҡағырға тейеш. Ошо эшкә ҡушылмайҙар түгел, ҡушылалар, әммә әүҙем эшләүселәр бик аҙ. Ҡалғандар балласт булып тора. Ә беҙҙең күршеләрҙән артта ҡалғы килмәй. Волга буйы

# БЕҘҘЕ

## нейроселтәрҙе

**Телде ҡулланыуҙың киләсәге - заманса технологияларҙа. Башҡорт телен шунда индереп ҡалһаҡ, телебеҙ йәшәйәсәк. Әлегә беҙ уй-фекерҙе текст аша ғына ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ, ә яһалма интеллект быны инҡар итеп, беҙҙе икенсе кимәлгә алып сығасаҡ. Бөгөн бик күп балаларҙың һәләте асылмай ҡала һәм беҙҙең белем биреү системаһының быға көсө һәм ҡеүәте етмәй. Әгәр баланың барыһын да белгән, бәләкәй саҡтан уны аңлаған һәм уның теләктәрен үтәгән, уны үҫтергән дуҫы булһа, һәр бала вундеркинд булыр һәм тормошобоҙ үҙгәрер ине.**

✓ ***Ҡайһы берҙә башҡорт телен, юғары мәҙәниәт йәки классик музыка кеүек үк, элитар телдәр, тип тә уйлайым. Һәр кем Чайковскийҙы тыңламай бит. Ә тыңлаусылар тулы ҡанлы тормош менән йәшәй.***



федераль округында марийҙар, сыуаштар, удмурттар кеүек "монстрҙар" бар. Улар тау аҡтара, тиергә мөмкин. Марийҙарҙа Андрей Чемышев - ҙур эштәр башҡарырға һәләтле "ғифрит", ул беҙгә һәр саҡ ярҙам итә, аңлата һәм: "Егеттәр, артабан үҙегеҙ эшләгеҙ. Һеҙҙә хәл-торош күпкә яҡшы, ерегеҙ ҙур, халҡығыҙ күп, нимәгә мыжыйһығыҙ. Һеҙ түгел, беҙ мыжырға тейеш. Һеҙ шундай мөмкинлегегеҙ булғанға Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле булып, ҙур эштәр атҡарырға тейеш, ә һеҙ эт һуғараһығыҙ. Ваҡыт көтмәй, балалар тыуа, бөгөн эшләмәһәгеҙ киләсәктә уларҙы туған телдән мәхрүм итәһегеҙ. Был бик аяныслы буласаҡ", - ти.

Тағы шуны билдәләп китер инем: быға тиклем күптәр машина тәржемәсеһенең тәржемәләренән көлә, ҡәнәғәтһеҙлек белдерә ине, ә хәҙер "Һеҙҙең тәржемәсегеҙ шымара бара", тиҙәр, шул уҡ ваҡытта уның һөйләмдәрҙә ябайлаштырыуын, хаталар ебәреүен белдерәләр, әммә бераү ҙә ҡолмай. Был да ҡыуаныслы, сөнки йәйлап шымара-шымара, бер көн килеп юғары сиԩ һалым түләүселәр аҡсаһына эшләй. Бер-бер хәл була ҡалһа, беҙ унда ниндәй дискылар булғанын да белмәйәсәкбеҙ. Шуныһы йәндә көйҙөрә.

Әммә хәҙер беҙ был турала уйламайбыҙ, сөнки уларға ҡарағанда күберәк эшләй алдыҡ. Бында нимә әйтеп киткем килә: быңа Фирҙәүес Хисаметдинова - ул башҡорт теле ғилеменең апостолы, командаһы менән Башҡорт теленең аңлатмалы академик һүҙлегенең 10 томын сығарыуға өлгәште. Был - буй етмәҫ бейеклек. Беҙ ошо күп томлыҡты цифрлап, ундағы барлыҡ мәғлүмәтте базаға индерәбеҙ. Һәм шуның менән телде кодификациялау тамамланасаҡ, тиергә мөмкин, сөнки 10 том үҙенә барлыҡ һүҙлектәрҙе алған. Унда хатта диалектизмдар һәм күп миҫалдар ҙа бар. Миҫалдар, әйткәндәй, машина фондынан алынған.

**▸ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты үҙе корпус эшләй, БДУ - үҙе айырым. Волонтерҙар үҙҙәре үҙ алдына тырыша. Ни өсөн ошо бер үк эште башҡарыусылар берләшеп, эште еңеләйтергә һәм тиҙләтөнләй икенсе. Бында ла шулай: дәүләт эшләгән эштә һөҙөмтә ҡыҙыҡһындырмаған кешеләр төркөмө йыйыла, мотивация юҡ. Ә бөгөнгө баҙар иҡтисады осоронда үҙен-үҙе алға һөргән нимәләр уйлап тапҡы килә. Дөрөҫөн әйткәндә, башҡорт теле өлкәһендә баҙар механизмы бөтөнләй эшләмәй, сөнки тел менән аҡса эшләп булмай. Нимәләр эшләүселәр булһа ла, улар үҙҙәренә зыян килтереп, үҙ иҫәбенә эшләй. Бары тик тормоштан, эшләгән эшенән ҡәнәғәтлек ала. Моғайын, улар өсөн ошо кисереш матди байлыҡҡа ҡарағанда ҡиммәтерәктер. Ҡайһы ваҡыт шуны үҙемдә күҙәтәм: бер кемгә бер нәмә кәрәк түгел, ә һин һаман да нимәләр эшләргә тырышаһың, эшләйһең - әйтерһең дә, яңғыҙ яу ҡайтарған яугирһың һәм шуның менән бәхетлеһең!

**▸ Ғәҙәттә, күптәр ҙур энтузиазм менән башлай ҙа, бер ниндәй ҙә яҡлау, терәк, ярҙам тапмайынса, йәйлап "яна"... "Янмаҫ" өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

- "Яныу" - бик ауыр тема. Күп дуҫтарым "янды", күптәрләһә, һуңынан үҙҙәренә лә был шөғөл оҡшап ҡалды, тиҙәр. Әлбиттә, уны уҡытыусылар ҙа үҙ эшендә ҡуллана ала. Әлегә, әлбиттә, чат-бот бик ябай ғына, әммә беҙ уны Айгиз Ҡунафин менән киңәйтергә, статистика күрһәткесен өҫтәргә ниәтләйбеҙ. Мәҫәлән, һәр кеше үҙенең бер көндә, бер аҙнала ниндәй өлөш индергәнен ҡарай аласаҡ. Әгәр ошондай күрһәткес булһа, бағыусылар табып, ирекмәндәрҙе нисектер дәртләндерергә лә булыр ине. Статистика бит был эшкә кемдең ниндәй өлөш индергәнен асыҡ күрһәтеп тора. Чат-ботты шулай йәйлап камиллаштырһаҡ, киләсәктә ул бар халыҡты берләштергән милли проект булыр тип өмөтләнәбеҙ.

**▸ Бөгөн һәр тармаҡта ирекмәнлек киң ҡолас ала. Ә быңа интеллектуаль ирекмәнлеккә кешеләрҙе нисек ылыҡтырырға? Нисек улар күңеленә дәрт һалырға?**

- Һуңғы ваҡытта шуға инандым: әгәр кемделер үҙеңдең командаңа алырға теләһән, шул кешегә шәхсән мөрәжәғәт итергә кәрәк. Башҡа ысулдада белгән, бәләкәй саҡтан уны аңлаған һәм уның теләктәрен үтәгән, уны үҫтергән дуҫы булһа, һәр бала вундеркинд булыр һәм тормошобоҙ үҙгәрер ине. Телдәр ҙә күп булыр һәм был бер ниндәй ҙә ауырлыҡ тыуҙырмаҫ ине, сөнки туған теле аша башҡа телдә ниндәй телде аңлай алыр ине бала. Был әлегә хыял, әммә уны тормошҡа ашырыу мөмкин.

Ҡайһы берҙә башҡорт телен, юғары мәҙәниәт йәки классик музыка кеүек үк, элитар телдәр, тип тә уйлайым. Һәр кем Чайковскийҙы тыңламай бит. Ә тыңлаусылар тулы ҡанлы тормош менән йәшәй. Башҡорт телен заманса технологияларға индерергә тырышыусыларҙы ла тулы ҡанлы тормош менән йәшәй тип уйлайым...

**▸ Йәғни һинең эшмышың тел эшмышы менән үрелеп бара, һин үҙең тел булып, уның һәр өнө булып яңғырайһың?..**

- Мин бәләкәйҙән әсәйемдең тыуған ауылы Малайҙа (Ҡырмыҫҡалы районы) үҫтем. Һәр йәй башҡорттар араһында, тәбиғәттә йәшәнем һәм башҡорт телен, алаһы ла, ҡо-

# БЕРЛӘШТЕРӘСӘК...

## башҡортсаға өйрәтеү проекттары

фатлы тәржемә итә лә башлар, тигән өмөттәбеҙ.

"Диван эксперттары", әлбиттә, булған һәм буласаҡ. Әммә беҙҙең мөхиттә эшлекле кешеләр тупланған, улар аҙ һөйләй, күп эшләй, шунан киңәнес ала. Беҙҙең өсөн иң ҙур баһа - башҡалар һөйләнеп торғанда ла ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеү, хатта аяҡ салырға тырышыусылар ниндәйҙер кимәлдә сәмләндереп тә ебәрә әле ул.

**▸ Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты башҡорт теленең корпусын эшләй. Һеҙ уны ҡулланаһығыҙмы, сөнки әҙер корпусты ҡулланып, уны тәржемә итеп ҡуйыуы еңелерәк, корпусты ирекле ҡулланыу мөмкинлеге бармы?**

- Бик сетерекле тема һәм һорау... Хәйер, хәҙер бик сетерекле лә түгел инде. Мин үҙем унда ете йыл эшләнем. Машина фонды лабораторияһында эшләгән барлыҡ лингвистарҙы ла яҡшы беләм. Шуға ҡарамаҫтан, ошо йылдар эсендә беҙгә бер генә файл да бирмәнеләр. Беҙ китаптарҙы китапхананан алып, уларҙы үҙебеҙ сканлап эшләй башланыҡ. Был алйотлоҡ, әлбиттә, әммә ысынбарлыҡ шулай. Ни тиһәң дә, Фәндәр академияһы - бюджет ойошмаһы, унда хеҙмәткәрҙәр бюджет аҡсаһына, яуланған гранттар иҫәбенә, йәғтергә тырышмай? Сәбәп нимәлә? Ни өсөн берҙәмлек юҡ?**

- Мин административ вертикаль яҡлы түгел, селтәр структураһы (горизонталь) яҡлы. Әйҙә, төрлө төркөмдәр, йәмғиәттәр күп булһын. Улар үҙ-ара нисек тә булһа аңлашыр, сөнки бер ҡаҙанда ҡайнайбыҙ бит. БР Хөкүмәтенән Тәржемәләр үҙәге ойоштороу тураһында белдерҙеләр. Шәп яңғырай! Унда алтаҡталарҙан алып рәсми ҡағыҙҙарға тиклем тәржемә итәсәктәр. Әммә унда, ғәҙәттә, төрлө кимәлле чиновниктар йыйыла һәм эш алға бармай. Шул уҡ ваҡытта улар ирекмәндәрҙе артҡы планға ҡыҫырыҡлай. Административ рәүештә эшләнгән эш ҡамасаулай ғына, уның менән алға китеп булмай. Шул уҡ Машина фонды ла дәүләт тарафынан булдырылғайны, ә ул беҙ теләгәнсә эшләмәй...

**▸ Ихтик китапханаһы ла - ирекмәнлек һөҙөмтәһе. Википедия ирекмәндәре, мәҫәлән, кәрәкле сығанаҡтарҙы рәсми китапхана сайтынан түгел, ә Ихтик китапханаһынан табырға мөмкин, тиҙәр. Ни өсөн грант алып эшләгән дәүләт учреждениелары эшенә ҡарағанда ирекмәндәрҙең эшмәкәрлек һөҙөмтәһе яҡшыраҡ килеп сыға?**

- Һөҙөмтәлелеккә килгәндә, шәхси фирмалар күпкә яҡшыраҡ, һөҙөмтәлерәк эшләй, сөнки уларҙа эшкә ҡараш бебеҙҙең мөхиттән юғалды. Үҙем дә шундай хәл-торош кисерҙем, ике тапҡыр йөнем көйөп: "Башҡаса был эштәрҙең береһе менән дә шөғөлләнмәйем, үҙем өсөн йәшәргә килә, мин донъя буйлап сәйәхәт итер инем, китаптарҙы сканлап ултырғансы, уларҙы иркенләп уҡыр инем, нимәгә миңә былар барыһы ла", - тип ташлап ҡуйғаным булды. Шунан мин туған телгә биргәнгә ҡарағанда, был эштән үҙемә күберәк алғанымды аңлап, ҡабат тотонам... Күңелем менән был эштең минеке икәнен аңлайым, сөнки мин телем менән бер бөтөн.

**▸ Бөгөн төп маҡсат - ошо параллель текстарҙы тикшереү буйынса чат-боттың эшен тағы ла әүҙемләштереү. Хәҙер уҡыуҙар башланды, шөкөр, башҡорт теле мәктәптәрҙә уҡытыла. Ә быңа ошо чат-ботты бит дәрестә лә ҡулланырға йәки уҡыусыларға өйгә эш итеп бирергә була...**

- Коллегам Ислам Байгужин, төркиәтсе, шәреҡ телдәре буйынса белгес, шул уҡ ваҡытта ул БДУ-ның Башҡорт филологияһы һәм шәрҡиәт факультетында ла уҡыта. Мин чат-ботҡа еңел генә инер өсөн QR-кодтар менән визиткалар эшләнем, ә Ислам факультеттағы тәржемәсе һөнәренә уҡыған студенттарына уны таратып, ошо чат-ботта тәжрибә тупларға ҡуштЫ. Студенттар тәүҙә теләр-теләмәҫ кенә эшрҙы белмәйем. Быға тиклем ҡулланып ҡараған башҡа ысулдар ниңәләр эшләмәй...

Ғөмүмән, интеллектуаль ирекмәнлеккә аҡғалар йәлеп итеүҙе мин философик мәсьәлә тиер инем. Сөнки бер үк нәмәне аңлатаһың, аңлатаһың, һөйләйһен, сығыш яһайһың - һөҙөмтә юҡ. Тимәк, бында мин, йәғни уҡытыусы, башҡаларға төп фекерҙе еткерә алмайым, йәиһә улар миңе аңлар кимәлдә түгел. Йә булмаһа, беҙ, энтузиастар, бик аҙбыҙ һәм башҡорт теленең киләсәге ошо бер төркөм кешеләрҙән башҡа береһенә лә кәрәкмәй... Бәлки, башҡорт теле ошо ҙур тиҙлек ала барған поезд вагонына эләгергә тейеш түгелдер, ә беҙ уны шунда тығырға тырышабыҙҙыр?..

Әгәр минән: "Һуңғы туҡталышығыҙ ниндәй?" - тип һораһалар, "Ул башҡортса яһалма интеллект, йәғни гаджеттарҙағы Алиса, Siri, Alexa, Cortana һ.б. кеүек виртуаль ассистенттар булдырыу", тип яуаплар инем. Был - яһалма интеллекттың беренсе стадияһы ғына. Телде ҡулланыуҙың киләсәге - заманса технологияларҙа. Башҡорт телен шунда индереп ҡалһаҡ, телебеҙ йәшәйәсәк. Әлегә беҙ уй-фекерҙе текст аша ғына ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ, ә яһалма интеллект быны инҡар итеп, беҙҙе икенсе кимәлгә алып сығасаҡ.

Бөгөн бик күп балаларҙың һәләте асылмай ҡала һәм беҙҙең белем биреү системаһының быға көсө һәм ҡеүәте етмәй. Әгәр баланың барыһын лаһы ла булһа ла, башҡорттарҙы яраттым. Был һөйөү минең ҡаныма һеңгән. Атай-әсәйҙе яратмау мөмкин түгел, башҡа атай-әсәй кәрәк тә түгел. Туған тел менән дә шулай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Барлыҡ башҡорттарҙы берләштергән проекттар күп түгел, ҡайһы берҙәре хатта кешеләрҙе айыра. Ә нейроселтәрҙе башҡортсаға өйрәтеү проекттары (Глосбе, параллель һөйләмдәрҙе тикшереү чат-боты) берләштереүсе проект тип уйлайым һәм беҙ барыбыҙ бер булып, дәррәү тотоноп, башҡорттоң да төшөп ҡалғандарҙан, телебеҙҙең дә бер телдән дә кәм түгеллеген күрһәтергә тейешбеҙ. Әлегә беҙ ниндәй байлыҡ тауы өҫтөндә баҫып торғаныбыҙҙы ла аңлай алмай, һаман бер урында тапаныуыбыҙҙы дауам итәбеҙ.**

**Башҡорт тарихы бик оҙон, ә алда нимә буласағы - билдәһеҙ. Ә тел - ул шул тиклем тәрән метафизик донъя, уға бер сумһаң, сығып булмай, сөнки тормош физик донъя менән сағыштырғанда күпкә байыраҡ, күпкә сағыураҡ", - ти Искәндәр Алик улы. Ә һеҙ һаман башҡорт телен үҫтереү һәм һаҡлап ҡалыу өсөн нимә эшләргә тип баш ватаһығыҙмы? Артыҡ баш ватырға кәрәкмәй - тотоноға ла эшләй башларға! Иң еңел юл - Телеграмм каналда "Параллель һөйләмдәрҙе тикшереү" тип яҙып, чат-ботҡа ҡушылырға һәм алға!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.**

**✓ Ә мин икеләнеп ҡалдым; алдымда кәртә, был яҡта яҡшылыҡ, теге яҡта яманлыҡ, әлегә мин гонаһһыҙ, бер аҙҙан шул кәртәне аша сығып, ят кешенең биләмәһенә инһәм, сикте үтһәм, ҡараҡҡа әүереләм. Ни эшләргә?**





# ҠАРАУЫЛСЫ

(Хикәйә)

Хәйҙәр ТАПАКОВ

–Матур урлау нисегерәк була инде ул?

-Ҡомағайланмай, нәпсеңде ауыҙлыҡлап, тейешен генә алыу сибәр ҡараҡлыҡҡа инә.

- Килештек! Бер бөртөк кенә ҡарбузды алабыҙ, шунан да артыҡ түгел.

- Улайһа, Баланлы Үҙәк тапҡырына кил, эңер төшөүгә. Ҡултығыңа киндер тоҡ ҡыҫтырырға ла онотма!

- Нисек инде, киндер тоҡ? Бәрәүҙе генә алырға килештек тә баһа!

- Иш янына ҡуш, тигәнде беләһеңме? Һин берҙе алаһың, мин икенсеһен, йәнә аяҡҡа эләккәндә лә яҙа ебәреп булмай. Арҡыры ятҡанды ашатлап үтеү гонаһ ул, бик беләһең килһә!

Тел биҫтәһе менән һүҙ көрәштереү - стенаға борсаҡ менән бәреүгә бәрәбәр, шуға бәхәскә тартҡан кәзекләшеүҙе ары һуҙмай, ҡул ғына һелтәнем.

Кис, көтөү ҡаршылағандан һуң, Мөҙәристәрҙең лапаҫ башында ҡоролған ҡыуышында йоҡлайым, иртә таң менән ҡайтырмын, тип алдашып, өйҙән сығып китеп, Аҡташ аҡланына барып, ер аҫтынан сусайып сыҡҡан аҡ ташҡа барып һаҡтым да ҡояш байыуын түҙемһеҙләнеп көтә башланым. Ә аҡлан ситендәге суҡ ҡайын осона эленгән ҡояш байымай ҙа байымай, көтә торғас, тәҡәтем ҡалманы, барып ҡайынды һелкетеп, ҡояшты офоҡҡа тәгәрләтер хәлдәмен, тик ул тау ҡырластарына бәрелеп йәнселер бит, шуныһы ғына тота, һипһендерә. Бына яйлап-яйлап көн яҡтылығы һүрәнләнде, ер өҫтөнә шыйыҡ эңер шәүләһе ятты, төн яҡынлашыуын белдереп, эргәләге Ҡоҙоҡ Бите уйпатында төн ҡошо Саҡ үҙәләнеп ҡысҡырҙы, Суғы әлегә өндәшмәй, уныһы сәхәрҙә тауыш бирә торған, ғәҙәттә. Бергә, парлашып йөрөһәләр ни булған, юҡ бит, береһе икенсеһен эҙләп, ғүмерҙәре заяға уҙа, береһе икенсеһен таба алмай.

Гелән муйынымда йөрөткән бетеүҙе өйҙә ҡалдырып сыҡҡайным, хәҙер үҙемде ҡото киткән, фарты ҡасҡан бер етем зат итеп тойҙом. Барыбер дөрөҫ эшләнем, ни булһа ла булыр, юғиһә, муйынға изге яҙыу тағып, урлыҡта йөрөп булмай бит, яҡшыны ямандан айырмаған иманһыҙҙар ғына ҡара эшен аҡ тип иҫбатлап, хилафлыҡҡа бара, намыҫтарын һатҡан иблестәр генә ҡылған гонаһтарын игелек тип тәҡрарларға хирес.

Килешелгән урынға барғанда тау битләүендә ҡәлғәләй ҡалҡҡан ер дүмһәйҙә япрайып үҫкән тубылғы ҡыуағы артына боҫҡан Батырйән мине алыҫтан абайлап, йәшенгән еренән сыҡты:

- Оҙаҡ көттөрҙөң, аҡшам намаҙын уҡып ҡыялмағанһыңдыр ҙа?

- Үҙең ҡараңғы төшкәс, тинең дә баһа, мыжыҡ!

Шуның менән һөйләшеү бөттө, башҡарыр эшебеҙ алдан билдәле булғанға һүҙ сыбалтмай ҡуҙғалдыҡ. Эңер ҡарағусҡыллығы ҡунған күк йөҙө аяҙлы-болотло. Әлмәғиҙә ҡарсыҡтың еҙ батмусы ҙурлыҡ тулған ай һыуҙай аҡ йөҙөн өйкөмләнгән болот менән япты, шуға сауҡалыҡтар араһында биленә һуҡҡан йыландай бормаланып ятҡан урман һуҡмағын тоҫмаллауы еңелдән түгел. Беҙгә тура түгел, һулғараҡ тартып, Борам киҫеүенең аҫҡы яғындағы Муйыллы Туғай буйына бараһы, Михайловка урыҫының баҡсаһы ҡаршы яҡ ярҙан күтәрелгәс, арыраҡ, һөҙәк асыҡлыҡта урынлашҡан. Көндөҙ Ҡарағайлы ҡаяһынан йәшел балдаҡтай түңәрәкләнеп асыҡ күренә, хәҙер ул тарафты шыйыҡ ҡараңғылыҡ шаршауы япҡан. Урман һыҙатын ҡырлатып бара биргәс, тау түбәненә төшә башланыҡ. Балаҡтарға уҡмашып бөрмәкәйҙәр йәбешеп бөттө, сәнскеле һәрпенделәр балтыр буйын әсеттереп һыҙыра, ҡайһы ерҙә абынып, ҡайһы ерҙә йығылып китәбеҙ. Эргәбеҙҙәге сауҡалыҡтан осоп сыҡҡан һайыҫҡан осоп-туҙынып шыҡырыҡлап беҙҙе эйәртә бара башланы.

- Бытбылдыҡ, әйҙә кире боролайыҡ? - Шомланып өндәшәм.

- Нимәнән шөр ебәрҙең тағы, әйкәйем?

- Йоморткa урлап яманаты сыҡҡан бурҙар ҡорондағы һайыҫҡан оҙата барған юл уңмай, тиҙәр.

- Ә һин кемдең ҡорондаһың?

- Кемдекендә булһын, һинекендә инде...

- Ә мин суфый түгелмен! Һин дә эсе арҡаһына йәбешкән ас сәүектәй шыңшыма! - Сәркәш холоҡло Батырйән семтем дә май әҫәре ҡунмаған таҡталай эсемә төртөп алды ла бойороулы бышылданы.

- Шыңшымайым да. - Ныҡлығымды белдерергә теләп, түбән һалынған сатин ыштанымды өҫкә тарттым. - Алыҫламаҫ элек, уғрылыҡҡа ҡул һелтәп, төкөрөп тә бирмәй ҡайтайыҡ та китәйекме әллә, мин аҙна аҙағына саҡлы көтөргә риза.

- Тик кенә бар. Риза имеш, как будты ҡарбузды һин ашайһың, башта Әлмәғиҙә ҡарсыҡты ҡайғыртыр инең, белекһеҙ!

"Хаҡ һүҙгә яуап юҡ!" Әләгәйығыла, резинкаһы бушаған ыштанымды күтәрә-күтәрә ары юрғалайым. Ҡуйырҙан-ҡуймай ҙа баһа артыбыҙҙан эйәрә төшкән теге һайыҫҡан. Был юлы ул сәфәребеҙҙе киренән һаплап, бәддоға уҡығандай, башын уңға-һулға ташлап шыҡырыҡлай, мискәһенә һаҡҡан һеперткеле Мәскәй әбей ише, бер юғарыға сөйөлә, бер түбәнгә ташлана.

- Был һайыҫҡан, тигәнең беҙҙе кире ҡайырырға самалай, ахры, был тикмәгә түгел.

- Иғтибар итмә: өкө, ҡарға, һайыҫҡан, ҡоҙғон барыһы ла иблес ҡоштары!

- Ә бытбылдыҡсы?

- Нимә? - Батырйән һорауымды аңламағандай туҡталды. - Бытбылдыҡ ул философ, аҡыл, фекер эйәһе бик беләһең килһә! - Абайламай ҡалдым, эңер ҡараңғылығында күрмәнем, ошо һүҙҙәрҙе раҫлап, Батырйән тағы ла һуҡ бармағын юғарыға сәнсеп алды, шикелле.

- Бытбылдыҡ ни ҡойроҡһоҙ, сыбар, ҡарап тороуға ҡойто ғына ҡош инде, ә бына өкөнөң зирәклеге хаҡында ишеткән бар.

- Шым, теленде тый, Һаҡмарға яҡынлайбыҙ, ә тау үренән ишетелгән тауыш әллә ҡайҙарға тарала!

Һәрмәнеп, шыуып тигәндәй, текә үрҙән төшә башланыҡ. Ошоғаса салғыйҙан тартып йөҙәткән селек-тубылғылар ярҙамға килде, уларға йәбешеп түбәнләүе бик тә ҡулай. Бына беҙ тигеҙлеккә сығып, Һаҡмар ярына килеп терәлдек.

- Оло юлда ятҡан кисеү өҫтәрәк. - Батырйән торған урыныбыҙҙы үҙенсә тоҫмалланы.

Әгәр шул яҡҡа барып һайыраҡ урындан сығабыҙ тиһәк, теге ярҙа был яҡҡа ҡарай тағы бер текә үрләсте аша төшөргә кәрәк. Уныһы үҙе бер ыҙа. Шулай булғас, ошонан маташтырайыҡ, туранан тартайыҡ.

- Сисенәбеҙме?

- Ә һуңынан әйберҙәреңде нисек тапмаҡсыһың? Ошо килеш керәбеҙ һыуға. Кейем менән йылыраҡ та булыр әле.

- Ә мин матурлыҡҡа сыҡҡандағын кейгәйнем бит әле. Сандалийҙарым да мәктәптеке. Мәтегә болғанғы килмәй.

- Юлбаҫарҙарҙың ҡасан ҡупшы кейенеп, юл баҫырға сыҡҡандарын күргәнең бар? Хәйер, һин гонаһтың ни икәнен белмәгән мулла нәҫеленән бит әле, онота ла ебәрәм, улайтып тәтәйҙәй ҡуҫтарланып алғас, моғайын да, урлыҡҡа барыуҙы кәләш кейәүләү йолаһы менән бутағанһыңдыр.

- Бытбылдыҡ, бигерәк күп бытылдайһың. Улайһа мин алдан. - Шулай тип шыбырланым да балаҡтарымды төрә башланым.

- Юҡ инде. Мин. Һин был һуҡмаҡты белмәйһең, ә миңә ярҙағы ғына түгел, һыу төбөндәге таштар ҙа таныш. Хәҙер сығып, теге яҡ ярға күтәрелгәс, шыуышып, илле-алтмыш аҙым ара барырға кәрәк. Ары рәшәткәле кәртә булыр. Был яҡ буйҙағы бер рәшәткәнең ҡаҙауы һурылған. Шуны ҡайырып инәһең дә...

- Йылан көйшәгәнен һиҙеүҙән тыш, күрәм, уғрылыҡ шөғөлө лә һиңә ят түгел икән!

- Килгән бар бында.

- Улайһа бур-бытбылдыҡ булып сығаһың түгелме?

- Һин дә гонаһлы, элекке көн сәлдереп апҡайтҡан өгөрсәне маҡтай-маҡтай ашай инең әле.

- Өләсәйем, әгәр харам ризыҡты һиңә мәжбүр итеп ашаталар икән, уның гонаһы мәжбүр иткәнгә төшә, тип яҙылған Ҡөрьәндә, ти.

- Мин мәжбүр иттемме? Үҙең теләнселәнең!

- Өгөрсәнең ниндәй юлдар менән килгәнен мин ҡайҙан белгән тиһең!

- Етте, күп лыбырҙайһың бигерәк, киттек. Был тирәлә һыуҙың тәрәнлеге күкрәк тәңгәленән юғары ҡалҡмай. Тоҡто юғалтып ҡуйма, тешләп алып сыҡ, юғиһә, майғул була торғанһың.

- Ә мин әлегә йөҙә белмәйем...

- Эттәрсә лә белмәйһеңме?

- Әҙәмсә лә, эттәрсә лә!

Батырйән елкәһен тырнап алды:

- Әйтәм бит, тәрән түгел. Әгәр бик ҡурҡһаң, минең күлдәк яғаһына йәбешеп бар. Вапше-то, тиҙәк һыуҙа батмай!

- Тиҙәк, имеш, һин үҙең һыйыр ҡоймағы, бик тә беләһең килһә!

- Бында һунарға килдеңме, әллә кәсекләшер өсөнмө? Эйәр миңә!

Йәйге селлә ҡыҙҙырғандан һуң яңы һауылған һөттәй йылы тулҡындар тәнде наҙлы иркәләне. Табаным менән тойҙом, һыу төбөндә ялпаҡ ҡына түгел, сурайып ятҡан таштар ҙа байтаҡ ҡына икән. Ни тиһәң дә, өҫ кейеменән бигерәк сандалийҙар йәл: сейә ҡыҙыл төҫтә, ялтыр ҡаптырмалы инеләр. Эшлектән сығарҙым былай булғас күркәмлеккә тотонғанды.

Беҙҙең барыр тарафты яҡтыртырға теләгәндәй, болот араһына боҫҡан ай күренде, тирә-яҡ көмөш нурға ҡойонғандай балҡып китте.

- Нимәгә кәрәк булды әле был? Хәйерсегә ел ҡаршы, бөтә ер ус төбөндәгеләй асыҡ күренә хәҙер! - Батырйән ризаһыҙлыҡ белдерҙе. - Башҡаса сара юҡ, тәүәккәлләргә кәрәк, беҙгә кире ҡайтаһы ла бар бит әле, һуңға ҡалырға ярамай.

Бына һыу тубыҡҡа етте, бил тапҡырынан булды, күкрәкте күмде. Бер нисә урында аяҡтар аҫтындағы таштарға абынып, соҡорға сумып, һыу йотоуымды иҫәпкә алмағанда имен-аман сыҡтыҡ теге яҡҡа. Текә ярҙан артылған Батырйән ергә һылашып ятты ла, йыландай уҫал ыҫылданы:

- Инде ауыҙыңа һыу уртла, өнөң тығылһын, баҡсанан сығып, кире теге яҡ ярға аяҡ баҫҡансы, һөйләшеү, аралашыу бөттө, тапҡан табышың өсөн, имен-аманлығың өсөн бары үҙең яуаплы, бер кем дә түгел!

- Әгәр берәй нимә миңә срушны талап итеһә?

- Беҙ әлеге мәлдә бер генә нәмәгә килгәнбеҙ - ҡарбузға, бары шул ғына. Рәшәткә егенән ингәс, уң яҡ ҡулда ҡарбуз, һулаҡай яҡта өгөрсә түтәлдәре, тура тартһаң - кишер, һуғандар...

- Тәжрибәле бурға оҡшағанһың.

- Ярай фәрештә булып ҡыланма, һыуға бер тапҡыр төшкән кеше икенсе тапҡыр еүешләнеүҙән ҡурҡмай!

- Мин бөгөн килдем һәм башҡаса йөрөмәйем. Ҡарбузды ла бер бөртөк кенә алам. Артығы кәрәкмәй.

- Үҙең ҡара, ызначит, мин һулаҡайға, һин уңға... Эшебеҙҙе ослағас, теге ерҙә осрашабыҙ!

Шыуышып, 20-25 аҙым ара үттек, алға һуҙып һәрмәнгән ҡулыма әсеттереп сәнске ҡаҙалды, ауырттырып, тубыҡ ташҡа бәрелде. Батырйән ҡорбанына боҫоп яҡынлаған һеләүһен ише йылғыр, тауышһыҙ шыуыша. Кәртә янына еткәс, ул тоҫмаллап табып, ҡаҙауы һурылған рәшәткәне бер яҡҡа ҡайырғайны, теге ваҡытһыҙ бимазалауға ризаһыҙлыҡ белдереп, мыжығандай сыйнай биреп ҡуйҙы. Алыҫта, күҙ күреме ерҙә ҡарайып ҡалҡҡан, берҙән-бер тәҙрәһендә ут йыҙлаған будка яғынан йыбанып ҡына эт өрөүе ишетелде. Ишетелде лә тымды. Тынлыҡ. Тәбиғәттә лә ундай һиллек була икән дә баһа, ҡолаҡ тондорғос тынлыҡ, хатта артыбыҙҙа ятҡан Һаҡмарҙың ағышы ла ишетелмәй. Батырйән эскә үтте лә ҡомға һеңгән тамсылай юҡҡа сыҡты.

Ә мин икеләнеп ҡалдым; алдымда кәртә, был яҡта яҡшылыҡ, теге яҡта яманлыҡ, әлегә мин гонаһһыҙ, бер аҙҙан шул кәртәне аша сығып, ят кешенең биләмәһенә инһәм, сикте үтһәм, ҡараҡҡа әүереләм. Ни эшләргә? Баштан уҡ ризалашмаҫҡа кәрәккән, хәҙер һуң инде... Күҙ алдыма кинәт ҡаҡ һөйәккә ҡалып түшәгендә ятҡан Әлмәғиҙә ҡарсыҡ килеп баҫты, уның хәлһеҙ тауышы ҡолағымда яңғырағандай итте: "Һалҡын ғына ҡарбуздан ауыҙ иткем килә үҙәгемә үтеп..." Бәлки ул, ошо әжәл дарыуылай ризыҡтан ауыҙ итһә, шәбәйеп китер, кем белә. Кәрәк тирәкте йыҡтыра, юҡ, кире сигергә ярамай!

**(Дауамы. Башы 39-40-сы һандарҙа).**

✓ *Барлығыбыҙҙы ғына түгел, миҙгел асылғанда яңы көстәр менән ниндәй яңылыҡтар тәҡдим итә алыуыбыҙҙы күрһәтеү маҡсатын да ҡуябыҙ. Яңы ижади миҙгелде асыу - байрам! Ул коллективта эшләгән һәр бер кеше өсөн тантана.*



*СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ*

# ЯҢЫ МИҘГЕЛ АСАБЫҘ

**Ашаған белмәй, тураған белә, ти халҡыбыҙ. Шулай, ҡунаҡ аҙ ултырып, күп һынай ҙа, табын хужаһын уйға һалып ҡайтып китә. Тамашасылар менән сәхнә артистары араһындағы мөнәсәбәт тә ошоға тартым: сәнғәт һөйөүселәр концертҡа килеп, артистар башҡарыуындағы уйланылған, киҫелгән, беселгән, тегелгәнде ҡарап, күңел бушата ла ғәҙәти тормошона кире ҡайта, хистәр һүрелә, тәьҫораттар яйлап онотола, етемһерәп ҡалған сәхнә яңы ҡунаҡтарын көтә. Сәнғәт күпере нисек һалыныуын һорашып, Сибай концерт-театр берекмәһенең ижад буйынса директор урынбаҫары Рәмил Париж улы ТУЙСИНҒА мөрәжәғәт иттек:**



- Ижади миҙелде асыу һәм ябыу һәр мәҙәниәт усағы өсөн изге йола, уларҙың эшмәкәрлегенең тәртибе шулай. Ситтән ҡарап, яңы эш башлау тип аңларға ярамай, дөрөҫөн әйткәндә, ул ябылмай - эш туҡтамай, рәсми рәүештә тамашасыларыбыҙға үҙебеҙҙең барлығыбыҙҙы күрһәтеү, тип аңларға кәрәк. Барлығыбыҙҙы ғына түгел, миҙгел асылғанда яңы көстәр менән ниндәй яңылыҡтар тәҡдим итә алыуыбыҙҙы күрһәтеү маҡсатын да ҡуябыҙ. Яңы ижади миҙгелде асыу - байрам! Ул коллективта эшләгән һәр бер кеше өсөн тантана, күңел торошобоҙҙо эшкә көйләү, яңы дәрт-дарман менән старт алыу тигәнде лә аңлата. Яңы килгән артистарҙы дөрөҫ итеп күрһәтеү, концерт барышында тамашасы менән таныштырыу, уларҙы сәнғәт донъяһына индереү, шуға ярашлы итеп программа төҙөү - барыһы ла ошо көндә күренә. Шуға күрә программаның йөкмәткеһендә байрам кәйефе сағылып ятырға тейеш. Ниндәйҙер етди алымдар ҡулланып та асырға була миҙгелде, ләкин ул саҡта тамашасы ла, артистар ҙа байрам һулышын тоймаясаҡ. Халыҡҡа аңлайышлы итеп, һәр бер артистың мөмкинлектәрен, үҫешен күрһәтеү маҡсатын да онотоларға ярамай, үткән йылда нисек ине лә быйыл нисек, үҫеш бармы-юҡмы икәнен күрһәтеү зарур.

Үткән йылды, мәҫәлән, беренсе тапҡыр үҙ көсөбөҙ менән мюзикл жанрында асып ебәргәйнек, быйыл икенсе форматтағы театрлаштырылған тамашаны һайланыҡ. Ни өсөн? Был аҙымыбыҙ "Сулпан" балалар театры менән берләшеп эшләй алыуыбыҙҙы, татыулыҡты, уртаҡ потенциалыбыҙҙың ансамблен күрһәтә. Тема һайлауға килгәндә, ижад миҙгеле рәсми ябылғас та художество советында өҫтә әйтеп үтелгән талаптарҙы иҫәпкә алып, төрлө тәҡдимдәрҙе тыңлап һайлайбыҙ һәм худсовет ағзалары, ҡуйыусы-режиссер, сценарий авторы бер фекергә килгәс кенә әҙерлек башлана. Әлбиттә, теманың актуаль, тәрбиәүи мәғәнәле булыуы, ниндәйҙер анығ проблеманы күтәреүе мөһим. Беҙ уны үҙебеҙсә, тик сибайҙарса күрһәтергә тейешбеҙ. Ижад төшөнсәһе бик киң, ана шул киңлектең бер кәрәкле тармағын дөрөҫ табыу - шарт: үткән миҙгелдәрҙә ҡулланылған әҫәрҙәр ҡабатланмаһын, ҡабатланған хәлдә лә икенсе юҫыҡта булһын. Ошондай һөйләшеүҙәрҙән һуң һайланған тема буйынса сценарий яҙыла, ҡуйыусы-режиссер тәғәйенләнә. Уларҙың бер-береһен аңлап, гармонияла эшләүе генә уңышҡа алып килә. Музыка буйынса етәксе сюжет һыҙығын музыкаль яҡтан байытып, йырҙар үреп, бер бөтөндө хасил итә, шунан йырҙар һайлайбыҙ, яңыларын яҙабыҙ, халыҡ араһында билдәле булған йырҙарҙы ла тик үҙебеҙсә башҡарабыҙ. Профессиональ коллектив булараҡ, кемдеңдер күсермәһен дә үҙебеҙсә эшләйбеҙ. Ул йырҙар сәхнәнән башҡарылған булыуы ла ихтимал, әммә уларҙы икенсе форматта бирәбеҙ, бер йырсы икенсеһенә оҡшамаған һымаҡ, йырҙың формаһын, стилен, музыкаль яҡтан оҙатылыуын да үҙгәртәбеҙ, мәҫәлән, элек баянға ҡушылып йырланғанды оркестр оҙатыуында башҡарырға мөмкин.

Бейеү ансамбленә килгәндә, сценарий буйынса кәрәк булһа, яңы бейеүҙәр ҡуйыла, репертуарҙа булған бейеүҙәр менән бер рәттән элек, бынан күп йылдар элек башҡарылған бейеүҙәр яңынан тергеҙелә - шулай итеп, һәр тармаҡ артистары бирелгән йүнәлеш буйынса эш башлай һәм һөҙөмтә сәхнәлә тулы килеш күренә. Эш барышында сценарий үҙгәрергә лә мөмкин, сөнки режиссерҙың үҙ ҡарашы бар, бер үк күренештәрҙе ул үҙенсә тойомлауы ихтимал, уның иңендә ҙур яуаплылыҡ ята.

Быйылғы миҙгел асыу байрамында үҙгәрештәрҙе халыҡ үҙе килеп күреп, үҙҙәренсә баһа бирһә, бик шат булырбыҙ. Коллектив тулыланды: йәш бейеүселәр килде, әле тамашасыға таныш булмаған йырсыларҙы, алып барыусыларҙы, музыкаль етәксене күрәсәкһегеҙ. Ят йөҙҙәр, ят таланттар менән танышырға, таныш артистарығыҙҙың яңы сығыштарын күрергә саҡырабыҙ!

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

## Роман яҙыр өсөн...

Был мәҙәк хәл тураһында миңә яҙыусы Раил Байбулатов һөйләгәйне. Икеһенең дә ауыр тупраҡтары еңел булһын, улар - шағир һәм ғалим Ғилемдар Рамазанов менән Мәскәү янындағы Переделкино ижад йортонда бергәләп ижад итергә барғандар. Раил ағай был саҡта үҙенең "Дала таңдары" романын, Ғилемдар ағай шиғырҙар яҙған.

Ижад йортоноң изге йолаһы буйынса, улар ашханаға ла бергәләп йөрөгән. Ашарға ултырған һайын Ғилемдар ағай тәрилкәһендәге итен Раил ағайҙыҡына һала икән. Байбулатов был хәлгә уңайһыҙланыуын белдергәс, Рамазанов:

- Мин бит шиғыр яҙам, Раил туғаным, һин оло әҫәр - роман яҙаһың. Роман көс талап итә бит, - тигән аңлатма биргән.

## "Һәм башҡалар" араһында

Яҙыусылар союзында эшләгән саҡ. Йәйҙең оҙон көнөндә бүлмәмә Мостай Кәрим килеп инде. Һаулыҡ һорашты ла:

- Мин һиңә, Әхмәр, бер генә һүҙ әйтергә килдем. Мин һаман да классиктар араһында йөрөйөм ул, - тине.

Башҡа бер һүҙ ҙә әйтмәне ул, хушлашты ла, сығып китте. Оҙаҡ ваҡыт уйланып йөрөнөм: ысынлап та, был һүҙҙәре менән ул миңә нимә әйтергә теләне икән? Һуңынан ғына иҫемә төштө. Ошо хәлдән бер нисә көн алда мин радиоға интервью биргәйнем, шунда барлыҡ күренеклеләр рәтендә ағайҙың исемен әйтергә онотҡанмын икән дә.

Ошоға оҡшаш бер хәл яҙыусыларҙың сираттағы бер съезында булды. Бер яҙыусы докладсының сығышында ниндәй фамилияларҙың нисә тапҡыр телгә алыныуын һанап ултырған. Тик, үкенескә күрә, докладсы уның фамилияһын бер тапҡыр ҙа телгә алмаған. Съезд үткәс, ул докладсыға үҙенең дәғүәһен:

- Минең ике съезд араһында шунсама китабым сыҡты, ике тапҡыр журналдың лауреаты булдым, бер китабым уҡыусылар тарафынан "Йыл китабы" тип баһаланды. Һеҙ үҙ сығышығыҙҙа фәләнден фамилияһын 20, фәләндекен - 15, төгәндекен 10 тапҡыр телгә алдығыҙ, ә мине, исмаһам, исем өсөн булһа ла бер тапҡыр ҙа әйтмәнегеҙ, - тип белдергән.

- Һеҙ минең докладты бик иғтибарһыҙ тыңлағанһығыҙ, иптәш, - тип уға яуап биргән докладсы, яҙыусының үҙенә контрһөжүмгә күсеп, - мин һеҙҙең фамилияны барлығы 25 тапҡыр телгә алдым.

- Алдашмағыҙ, миңә ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ яҙған докладҡа тағы бер тапҡыр күҙ йүгертеп сығығыҙ. Мин был мәсьәләне был көйө ҡалдырмайым, кәрәкле урынға ялыу яҙам, - тип оторо ярһыған яҙыусы.

- Ышанмаһағыҙ, бына ҡарағыҙ, - тип докладсы телмәре яҙылған ҡағыҙҙы күрһәтергә тотонған, - минең докладта барлығы 25 тапҡыр "һәм башҡалар" тип әйтелә. Ана шул "һәм башҡалар" араһындағылар исемлегендә һеҙ беренсе урында тораһығыҙ...

Был мәсьәләнең аҙағы нисек бөткәндер, әммә "һин һәм башҡалар араһында" тигән лаҡабы тороп ҡалды.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

*БАШҠОРТСА АТАМАЛАР*



# ҠОШСОҠ, ИСЕМЕҢ НИСЕК?

***Ҡарағош*** **-** русса большой подорлик. Дала бөркөтөнән бәләкәйерәк, ҡара-ҡуңыр төҫтә, ҡойроғо тирәһе аҡһыл.

***Төйләгән*** **-** русса черный коршун. Ҡойроғоноң уртаһында һай ғына соҡоро барлығы менән башҡаларҙан айырылып тора. Ҡуңыр көрән төҫтәге, башының өҫкө яғы аҡһыл төҫтә. Тауышы ҡалтыраулы, ҡолон кешнәүенә оҡшаш.

***Ҡарсыға*** **-** русса ястреб. Урта кәүҙәле ҡоштар иҫәбенә инә, төҫө сыбар, оло ҡоштарҙы үҙенсәлекле арҡыры ала һыҙаттары буйынса таныйҙар, йәшерәк ҡоштарҙың күкрәк тирәһендә буй-буй сыбар һыҙаттары була. Оҫҡан ваҡытта етеҙлектәре менән айырылып торалар. Төрҙәрен һанап үтәйек. Ҡор ҡарсығаһы - тетеревятник; ваҡ ҡарсыға - перепелятник; һунағара, йылан һары - змееяд.

***Ыласын*** **-** русса сапсан. Ҙур ыласындарға ҡарай, шулай ҙа шоңҡарҙан бәләкәйерәк. Арҡа өлөшө һорғолт, йәки ҡарағусҡыл, эс тирәһе аҡ, алһыу, йә һарғылт төҫтә, арҡыры һыҙаттар менән сыбарланған була. Ыласындар ғаиләһенә түбәндәге ҡоштар ҡарай: балапан ыласын - балобан; ҡыйғыр, ҡыйғыр ыласын - чеглок; шоңҡар - кречет; торомтай - обыкновенная пустельга; яғылбай - дербник; мүктәрге - кобчик.

***Ала ҡарға*** **-** русса серая ворона. Кешеләр йәшәгән ерҙәргә ныҡ эйәләшкән һоро, ә башы, ҡойроғо һәм ҡанаттары ҡара төҫтәге киң таралған бик һиҙгер, аҡыллы ҡош. Ала ҡарғаның "туғандары"исемдәре һәм уларҙың рус теленә тәржемәһе: ҡоҙғон - ворон; ҡара ҡарға - грач; сәүкә - галка; һайыҫҡан - сорока; бараба, урман сәүкәһе - сойка; ҡыжғылдаҡ - кукша; баян ҡош, сыбар һайыҫҡан - кедровка;

***Һоро торна*** **-** русса серый журавль. Көл төҫөндә, асыҡ булғанға күрә шулай атайҙарҙыр. Ҡыҙыл түбәле, елкәһенән аҡ юлаҡ төшкән, муйыны ҡара ғына ҡош.

***Аҡ торна*** **-** русса стерх. Тышҡы төҙөлөшө буйынса һоро торнаға оҡшаған, әммә тәүгеһенән ҙурыраҡ. Тәне тотошлай аҡ төҫтә, ҡанатының аҫҡы өлөшөндә генә ҡара һыҙат бар. Беҙҙең халыҡта торнаға айырыуса үҙенсәлекле мөнәсәбәт әле лә һаҡлана. Борон ҡайһы бер ырыуҙар торнаға табынған. Бөгөн дә торнаға бәйле төрлө ышаныуҙар йәшәй халҡыбыҙҙа. Мәҫәлән, яҙғы осорҙа торналарҙың тоҡом арттырыу мәле еткәндә ата торнаның бейегәнен ҡарарға ярамай тигән тыйыу әле лә бар.

***Аҡҡош, ҡаңғылдаҡ аҡҡош*** **-** русса лебедь-кликун. Исеменән үк күренеүенсә, аҡ төҫтәге матур, йөнө ҡабарып торған ҡош. Аҡҡоштоң бүтән төрҙәре һәм уларҙың русса варианттары: ваҡ аҡҡош - малая лебедь; ышылдаҡ аҡҡош - лебедь-шипун.

***Селән*** **-** русса серая цапля. Һоро торнанан бер аҙ бәләкәйерәк, республикала ярайһы уҡ иркен таралған ҡош. Арҡаһы - һоро, түше һәм муйын тирәләре аҡ төҫтә. Оҙон нәҙек муйынында буйҙан-буйға һуҙылған ҡара тимгелдәрен күрергә була. Елкә тирәһенән ҡара өлпөһө һәлберәп тора. Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына ишетелеп ҡалған тауышы шығырлауҙы хәтерләтә. Селәндең бүтән төрҙәре һәм руссаға тәржемәһе: аҡ селән - большая белая цапля; ҡауылдаҡ селән - обыкновенная краква.

**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабын файҙаланып,**
**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Кешеләр ни өсөн "Берекҡәндән яу өркҡән", "Күмәкләгән яу ҡайтарған", "Булыр илдең балаһы берен-бере батыр, ти; бөлөр илдең балаһы берен-бере бахыр ти", тигән мәҡәлдәрҙе онотто һуң?*



ИНТЕРНЕТТАН



# МАҠСАТЛЫ БУЛЫУ...

## сәләмәт итә

■ Маҡсатҡа ынтылып йәшәү - кеше характерының ыңғай сифаты ғына түгел. Тормошта маҡсат булыуы кешенең физик сәләмәтлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Чикаго психологтары һәм физиологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, маҡсатлы йәшәгән кешеләр араһында иртә һәм осраҡлы үлем һирәк осрай. Бынан тыш, физиологтар әйтеүенсә, маҡсатлы кешеләр хроник ауырыуҙар менән һирәгерәк яфалана, уларҙың һаулыҡ торошо күпкә яҡшыраҡ була.

■ Мүк еләгендә органик кислоталар, А, В төркөмө, С витаминдары күп. Шуға ла табиптар күҙ мизгелендә өлгөргән был еләкте рационға күпләп индерергә кәңәш итә. Бынан тыш, мүк еләге антиоксидантарға бай. Бары 240 грамм еләктә 567 миллиграмм полифенол була. Был матдә "насар" холестеринды сығарыусы булып иҫәпләнә. Еләктәге фенол берләшмәләре бактерияларға ҡаршы яҡшы көрәшә, шуға ла уны һалҡын тейгәндә ҡулланыу дөрөҫ буласаҡ. Көнөнә бер ус мүк еләге ашау хәтерҙе яҡшырта, ҡан тамырҙарын нығыта.

■ Балалар тәрбиәһе буйынса белгестәр шундай тикшеренеү үткәреп ҡараған: 4 йәшлек сабыйҙарға бер нисә минут "Губка Боб" йәнһүрәтенән сюжеттар күрһәткән. Һуңынан уларға берәй нәмә эшләргә ҡушылған. Тиҫтерҙәре йәнһүрәт ҡараған ваҡытты уйнап, йә һүрәт төшөрөп үткәргән балалар был эштәрҙе тиҙ үк башҡарған, ә йәнһүрәт ҡараусылар төркөмө иғтибарын туплай алмай йонсоған. Ғалимдар фекеренсә, балалар үҙҙәрен йәнһүрәт геройы итеп тойоп, уларҙың "хаослы ҡылығы"н ҡабатлай, ә был персонаждар тиҙ хәрәкәт итә һәм уларҙың ҡылығында йышыраҡ логика бөтөнләй булмай. Бындай йәнһүрәттәр ҡараған балалар ҙа бер урында ултырып сыҙамай, иғтибарһыҙ булғанлыҡтан, киләсәктә улар насар уҡыясаҡ, шулай уҡ улар үҙҙәрен нисек тотоуҙарын һәм тойғоларын контролдә тотмаясаҡ.

■ Һуңғы осорҙа бөтөн донъяла хроник арыуға зарланып, табиптарға мөрәжәғәт итеүселәр артҡан. Уларҙың барыһы ла тирлек симптом сифатында тиҙ арыуҙы атаған. Табиптар иһә был сирҙең уларҙың һәр бишенсеһендә генә булыуын раҫлай. Һәм ул сир "Электрон йоҡоһоҙлоҡ" тип атала. Бөгөнгө заман кешеһе тәүлек әйләнәһенә яҡшылап ял итә алмай: кинола, театрҙа ултырғанда ла социаль селтәрҙә аралаша, төндә һыу эсергә торғанда ла электрон почтаһын тикшереүҙән тыйыла алмай, кеҫә телефоны ла гел үҙе янында. Шулай уҡ ҡала ситендә лә, метро һәм кафеларҙа ла интернеттың булыуы был сирҙе аҙҙыра ғына. Төрлө форумдарҙа ултырыусылар "XXI быуат эпидемияһы"на килтереүсе ике сәбәпте билдәләй: гипотериоз - ҡалҡан биҙе әүҙемлеге түбәнәйеүе һәм "адреналинлы арыу". Был симптом, арыуҙан тыш, үҙенен эсенә аш һендереү, йоҡо менән проблемалары, нервылар ҡаҡшыуын, аңлатып булмаған ауыртыныуҙарҙы ала. Оксфорд университеты профессоры, эндокринолог Джон Васс иҫәпләүенсә, кешеләрҙең үҙҙәренә үҙҙәре диагноз ҡуйыуҙары һәм мейенең адреналин системаһын түбәнәйтеүсе дарыуҙар ҡабул итеүе бауыр, йөрәккә насар тәьҫир яһауы ихтимал. Профессор фекеренсә, был "сир"ҙән ҡотолоу өсөн йоҡларға ятыр алдынан телефон, ноутбук һәм башҡа ҡорамалдарҙы һүндереү, ә ял көндәренең береһендә өйҙән ситтә ял итеү ҙә етә.

УЙЛЫҒА - УЙ

**Йәмғиәттә ниндәйҙер бер идеяға, темаға, күренешкә, ваҡиғаға ҡарата мең кешелә мең төрлө фекер булыуы ихтимал. Һәм шулар араһында оҡшаш фекерҙәр үҙ-ара берләшеп, ҡапма-ҡаршы ике яҡҡа бүленеп китҡән осраҡ та була. Был тәбиғи хәл, сөнки Юғары Аң йыһанды, фани донъяның үҙен шул ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан яралтҡан.**

# ХАЛЫҠ МӘҠӘЛДӘРЕ...

## хәҡиҡәт һөйләй



Ҡөрьәндән ошоға дәлил аяттарҙы килтерәйек. "Әгәр Аллаһ теләһә, Ул һеҙҙе бер өммәт яһаған булыр ине..." (Әш-Шура (Кәңәш) сүрәһе, 8-се аят).

"Кешеләр бер генә өммәт ине, әммә бүленделәр..." (Йунус (Юныс) сүрәһе, 19-сы аят).

"һәр өммәт өсөн Беҙ улар тотҡан ғибәҙәт ҡылыу йолаһын яһаныҡ... " (Әл-Хадж (Хаж) сүрәһе, 67-68-се аяттар).

Миллиардлап йылдар йәшәү дәүерендә Ер шарында әллә күпме цивилизациялар булыуы һәм юҡҡа сығыуы тураһында мәғлүмәтте Ҡөрьән-Кәрим түбәндәге аят аша аңлата: "Беҙ уларҙың барыһын да гонаһтары өсөн тотоҡ. Уларҙың ҡайһыларына өйөрмә ебәрҙек, һәм ҡайһы берҙәрен көслө тауыш алды, һәм уларҙың ҡайһы берҙәрен ерҙән йотторҙоҡ, ҡайһыларын һыуға батырҙыҡ. Аллаһ уларҙы йәберләүсе булманы, улар үҙ-үҙҙәренә золом ҡылдылар" (Әл-Ғәнкәбут (Үрмәксе) сүрәһе, 40-сы аят).

Тимәк, ошондай бүленгәнлек Аллаһ Тәғәлә тарафынан кешелеккә һынау өсөн ебәрелгән. Бүленгән илдәр, халыҡтар, фирҡәләр, ырыуҙар һәм башҡа төркөмдәрҙе "Дауылһыҙ көндә дау барын, вайымһыҙ көндә яу барын онотма", тип иҫкәртә халыҡ мәҡәле. Халыҡ аҡылы ошо мәҡәлгә ҡаршы икенсеһен дә һаҡлаған: "Яуҙа батыр, дауҙа аҡыл енер". "Ҡаршы яҡтың фекерендә ниндәй хикмәт бар, ни өсөн улар шулай уйлай, ә миненсә түгел", тигән торошҡа килтерер сабырлыҡта һыналған һәр аҡыл әйәһе.

Дау ҡупҡанда, бәхәс сыҡҡанда, минең һүҙем һүҙ булып ҡалырға тейеш, тип ҡабарыныу ҡаршы яҡты дошманыңа әйләндереүгә генә этәрә түгелме һуң? Аҙмы ни кешелек тарихында бындай хәлдәрҙең ҡабатланыуға, ҡыйралышҡа килтереп еткереү осраҡтары! Илдәр араһында ғына түгел, йәмғиәттәге халыҡтар, фирҡәләр, хатта туғандар араһына тиклем үтеп инде кеше-ара мөнәсәбәттәрҙе тарҡатыусы был сир.

Тәбиғәттә йән өсөн хәүеф тыуғанда малдың - малы, ҡоштарҙың -ҡоштары бер урынға тупланып, һаҡланыу сараһын күрә белгәндә, кешеләр ни өсөн "Берекҡәндән яу өркҡән", "Күмәкләгән яу ҡайтарған", "Булыр илдең балаһы берен-бере батыр, ти; бөлөр илдең балаһы берен-бере бахыр ти", тигән мәҡәлдәрҙе онотто һуң? Ошо аҡылды тотмай, интернет кимәлендә, гәм алдында бер-береңде хурлау, башҡаның кәмселектәрен фашлау хәҙер көндәлек гәҙәткә әйләнде.

"Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел", тигән кәңәште онотмай, килеп тыуған низағтарҙы һынау итеп ҡабул итеп, уйланырға, үҙеңдекенә тап килмәгән фекергә лә ҡолаҡ һалырға, башҡаны ихтирам итеү әҙәбенә әйә булғанда, әҙәм балалары тарҡалышыуҙан тыйылыр ине бит!..

Ҡапма-ҡаршы яҡтар аҡылға килһә, йәғни кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә берен-бере кәмһетеүҙән, мыҫҡыллауҙан арынһа, үҙ-ара килешеү ихтималы бар, әлбиттә. Был бик хуплана торған күренеш. Бының өсөн бары үҙеңдән алда башҡаға яҡшылыҡ теләү инстинкты уянырға тейеш. Урал батырыбыҙ, мәҫәлән, беҙҙең һәр беребеҙгә кеше һәм шәхес булып үҫеүҙең өлгөлө вариантын ҡалдырған бит. Уның:

Күккә лә осор - яҡшылыҡ,
Һыуға ла батмаҫ - яҡшылыҡ,
Утта ла янмаҫ - яҡшылыҡ,
Телдән төшмәҫ - яҡшылыҡ.
Бары эшкә баш булыр,
Үҙеңә лә, кешегә лә
Мәңге ейер аш булыр, - тигән васыяты ғына ла ни тора!

Ике яҡ үҙ-ара килешә алмаған осраҡтарҙа нисек хәл ителәүһуң бындай ваҡиғалар? Ҡапма-ҡаршы яҡтарҙы тыныслыҡҡа өгөтләү, яраштырыу өсөн урталыҡты һаҡлау бурысын йөкмәгән өсөнсө көс кәрәк, шулаймы? Хас та бизмәндең ике яғын тигеҙләп торған урталыҡ! "Яҡшы һүҙ яу ҡайтарыр", тигән мәҡәл шуға ишаралай түгелме? "Яҡшы һүҙ йән аҙығы, яман һүҙ баш ҡаҙығы", тип тә белмәй әйтмәгән халыҡ.

"Яҡшы һүҙҙең әһәмиәте тураһында Изге Китап һүҙҙәрен дә иҫкә төшөрәйек: "Аллаһтың миҫал итеп яҡшы һүҙ килтергәнен күрмәнеңме ни? Ул һүҙ яҡшы ағас һымаҡ: тамырҙары ныҡ, ботаҡтары күккә олғашҡан...Раббының рөхсәте менән ул һәр ваҡыт емеш биреп тора. Бәлки, аҡылға килерҙәр, тип Аллаһ кешегә миҫал килтерә.

Ә насар һүҙ хаҡындағы миҫал ерҙән йолҡонған ағас кеүек: уның ныҡлығы юҡ. Иман килтергән кешеләрҙе Аллаһ тоғро һүҙ менән донъялыҡта ла, әхирәттә лә нығыта, ә залимдарҙы юлдан яҙҙыра. Аллаһ Үҙе ни теләһә, шуны эшләй" (Ҡөрьән Кәрим: "Ибраһим" сүрәһе, 14:24-27).

Әйҙәгеҙ әле, милләттәштәр, ошо илгә ауыр мәлдәрҙә айышына төшөнмәй, уйламай әйтелгән һүҙҙәрҙән, низағлашыуҙарҙан, урынһыҙ бәхәстәрҙән, битәрләшеүҙәрҙән, үҙ-ара ғәйепләшеүҙәрҙән тыйылайыҡ! Тыныслыҡ урынлаштырыуҙы иң тәүҙә үҙебеҙҙән, үҙ даирәбеҙҙән башлайыҡ!

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БӘЛӘКӘЙ ҠАЗАЛАР БИР...



**Минең ҡартәсәй былай ти торғайны: "Эй Аллам, бәләкәй ҡазалар бир, улар мине оло ҡайғынан ҡотҡарыр!" Йәшерәк саҡта был һүҙҙәр миңә сәйер тойолдо, сөнки мәғәнәһенә һис тә төшөнә алманым. Олоғая төшкәс кенә ябай башҡорт әбейенең ошо һүҙҙәренә юғары фәлсәфә һалынғанын аңланым.**

Ысынлап та, тирә-яғыма ҡарайым да, ҡартәсәйемдең һүҙҙәренә инанам. Беҙгә бит тормошта ауырлыҡтар бушҡа килмәй. Улар - яңылыш йәшәүебеҙҙе иҫкәртеүсе һәм төҙәтеүсе ысынбарлыҡ. Эйе, күп кенә бәләкәй ҡыйынлыҡтар беҙҙе уйланырға һәм төҙәлергә мәжбүр итә. Әгәр инде уларҙы ҡабул итмәһәк, тормош оло ауыр ҡайғы аша дөрөҫ юлға баҫтыра. Был фекерҙе һуңғы осорҙа карма системаһы ла фәнни нигеҙләп иҫбат итә.

Кеше бәләкәй ауырлыҡтарға битараф булырға өйрәнһә, ул оло ҡайғыны ла ҡабул итәсәк. Дөрөҫөрәге, уға ундай ҡаза бөтөнләй килмәйәсәк. Тик быға өйрәнеү өсөн тормошҡа ҡарашыңды үҙгәртергә, ғүмерҙең фани икәнен аңларға, бер нәмәнең дә мәңгелек түгеллеген белергә, был донъяла ҡайғырырлыҡ һәм нәфрәтләнерлек бер нәмә лә юҡлығын юғары кимәлдә тойорға кәрәк. Ауырлыҡтар - кешенең тормошҡа ҡарашы ғына бит ул. Бер үк ауырлыҡ кемдер өсөн - оло ҡайғы, икенсе кеше уны тоймай ҙа үткәреп ебәрә.

Шулай булғас, ҡартәсәйем әйтмешләй, әйҙә, был донъяла бәләкәй ауырлыҡтар осрап торһон, әгәр уларҙы тыныс ҡабул итһәк, беҙгә оло ҡайғы килмәҫ. Килһә лә, беҙ уны еңел үткәрә белербеҙ.

**Наил ҒӘЙЕТБАЕВ.**

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# КЕРӘН



**Шифалы үҫемлектәр араһында керән (хрен обыкновенный) ситтәрәк тора. Үҙен йүнләп ашап та булмай, бер аҙ тәмләткес кенә итеп ҡулланмаһаң. Дауалау саралары араһында ла алдынғы түгел: халыҡ дауаһында уны аппетитты яҡшыртыу, бәүел ташы ауырыуында бәүел ҡыуҙырыу, шәкәр кимәлен төшөрөү өсөн ҡулланырға кәңәш итәләр, әммә быларҙың барыһынан да һөҙөмтәлерәк тәьсир иткән башҡа үлән, йәшелсә-емештәр бар. Керәндәге аскорбин кислотаһы ла хатта тамырын таҙартҡас, бер сәғәт үтеүгә тарҡалып ҡуя. Шулай ҙа керәнде ташлап ҡуймағыҙ, донъяла файҙаһыҙ бер нәмә лә юҡ.**

Бер тыныс холоҡло, ипле генә кейенгән урта йәштәрҙәге ир ярҙам һорап мөрәжәғәт итте. Әллә күпме табиптарға барып күренгән, үҙенең хәлен яҡшы белә, минең яуап ниндәй булырын да төҫмөрләйҙер. Уға бауырҙың криптоген циррозы тигән, йәғни сәбәбе билдәһеҙ цирроз диагнозы ҡуйылған. Ауырыу алкоголь менән дә шаярмаған, зыянлы предприятиела ла эшләмәгән, ни бары бала сағында һары ауырыуы (Боткин ауырыуы) менән сирләгәнме тип фаразлағандар, әммә табиптарҙың был һығымтаһы раҫланмаған. Ҡыҙым дауалағанда керәнде лә ҡушырға тәҡдим итте һәм ауырыуға ике-өс айға тәғәйенләнгән комплекс төҙөнөк, араларында керән япраҡтарынан төнәтмә лә бар ине. Уны әҙерләү ысулы менән аҫтараҡ таныштырам. Ә һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтер инем: ҡасандыр билдәһеҙ сәбәптән бауыр циррозы менән интеккән ир бөгөн һин дә мин эшләп йөрөй, балаларын аяҡҡа баҫтыра.

**Глистар.** 20-шәр грамм ҡырылған керән һәм һарымһаҡҡа 0,5 литр араҡы ҡойоп, 10 тәүлек төнәтергә. Көнөнә 1 ҡалаҡ эсергә. Был дауа паразиттарға оҡшамай һәм улар организмды ташлап ҡаса.

**Тауыш юғалһа.** 1 ҡалаҡ ҡырылған керәнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә, һығып алырға. Етерлек күләмдә шәкәр өҫтәргә. Көнөнә бер нисә тапҡыр аҙ-аҙлап уртлап 1-әр балғалаҡ эсергә.

**Отит.** Керән тамырының һутын һығып алып, тамыҙғыс (пипетка) ярҙамында көнөнә 3 тапҡыр ҡолаҡҡа 1-2 тамсы тамыҙырға.

**Бауыр циррозы.** 5-7 керән япрағын ваҡлап турап, 0,5 литр араҡы ҡойорға һәм ҡараңғы урында 1 аҙна төнәтергә. Япраҡтарҙы айырыуса Иван көнөнән алда, июль айының тәүге биш көнөндә алыу яҡшы, йәш япраҡтар һутҡа тулышҡан була. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Һөҙөмтәле.

**Стенокардия.** Ауылда былай дауаланғандар: тамырҙың һутын һығып алып, яртылаш бал ҡушып бутағандар. Иртәнге аштан бер сәғәт алда ҡатышманы бутап, 2 балғалаҡ ҡабырға. Был рәүешле 1 ай дауаланырға. Үҙегеҙҙе насар тойһағыҙ, әҙерәк ашарға. Ике айҙан һуң тағы ла ҡабаттан дауаланыуҙы башларға мөмкин.

**Тирелә ҡара пигмент таптары, һипкел, ҡояшҡа янғанда.** 50 грамм ҡырылған керәнгә 250 мл аш һеркәһе (9 процентлы) ҡушырға, шешәнең ауыҙына йым ғына бөкө тығып, ҡараңғы һәм һалҡын урынға ҡуйырға. 2 аҙнанан төнәтмәне һөҙөргә һәм 1,5 литр һыуыҡ һыу өҫтәргә. Ошо шыйыҡсаны биткә иртәнле-кисле кипкәнсе һөртөргә.

**Гипертония.** 250 грамм керән тамырын ҡырып, 3 литр ҡайнатылған һыу ҡойоп, талғын утта 20 минут ҡайнатырға. Һыуынғас һөҙөп алырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

Керән бик күп инфекцион ауырыуҙарҙан да файҙалы. Яңы һығылған һутында лизоцим - аҡһым матдәһе күп. Ул микробтарҙың тышҡы ҡатламын тарҡата ала, шул рәүешле организмда бактерияларға ҡаршы сик барлыҡҡа килтерә.

Әммә керәнде бөтәһе лә ҡуллана алмай. Ул юғары әселекле гастрит, ашҡаҙан һәм бөйән язваһы булғанда ҡырҡа тыйыла. Колит, бөйөрҙәрҙең шешенеү сирҙәре осрағында ла уны дауаланыуҙа ҡулланырға ярамай. Ашҡаҙан аҫты биҙе лә керән менән "һыйышмай". Уны күп ҡулланған осраҡта гастроэнтерит ауырыуы барлыҡҡа килергә мөмкин. Бәүел ҡыуҙырғыс сифатында ҡулланырға мөмкин, әммә бөйөрҙәр патологияһына бәйле шешенеүҙәр булғанда тыйылырға. Керәнде саманан тыш күп ҡулланыу ауыҙ, ашҡаҙан, эсәктәрҙең лайлалы тиресәһен яндырыуы бар.

**Рим ӘХМӘДОВ китабынан.**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ЯЛҒАН ИНТЕРНЕТ-МАГАЗИНДАР



**Интернет-магазиндан онлайн һатып алғанда тауарҙы күреп йәки уның сифатын тикшереп булмай. Һатып алыусыларҙың яҙмаларына һәм баһаламаларына таянырға ғына ҡала. Кеҫәне мутлашыусыларҙан нисек араларға һуң?**

Рәсәй финанс мониторингы идаралығы намыҫһыҙ интернет-магазиндарҙы асыҡлау ысулдарын аңлатты. Алдашыу схемаларының ике төп төрө бар: сифатһыҙ йәки ялған тауарҙар тәҡдим итеү һәм банк карталары мәғлүмәттәрен урлау - "фишинг".

**"Ялған" интернет-магазиндың төп билдәләре:**

- хаҡтар башҡа майҙансыҡтарға ҡарағанда күпкә түбәнерәк;
- тауарҙы курьер аша килтертеү һәм үҙеңә барып алыу тыйыла;
- һатыусы тураһында һәм бәйләнеш өсөн мәғлүмәт булмай;
- магазин яңыраҡ ойошторолған. Уның барлыҡҡа килеү датаһын сайттың "подвалында" йәки ресурс хаҡында мәғлүмәт биреүсе махсус интернет-сервистар ярҙамында ғына табырға мөмкин;
- тауарҙың тасуирламаһы юҡ йәки ул конкуренттарҙың тасуирламаһынан ныҡ айырыла;
- менеджерҙар телефондан шылтырата һәм тауарҙы хәҙер үк һатып алыуҙы һорай;
- киң билдәле булмаған түләү системалары аша, электрон аҡсалар менән, шәхси кешенең картаһына алдан аҡса күсереүҙе талап итәләр;
- һатыусы ышаныҫҡа инеү өсөн паспортының сканын күрһәтә. Һанлы технологиялар дәүерендә ялған документ эшләү ҡыйын түгел икәнен дә белеп ҡуйыу кәрәк.

**Фишинг былай эшләй:** электрон почтаға паролде үҙгәртеү йәки сайтта теркәлеүҙе яңыртыу үтенесе менән хәбәр килә. Һеҙ һылтанма буйынса күсәһегеҙ, һәм киләһе аҙымды яһау маҡсатында "раҫлау өсөн" 1 һум күсереүгә һеҙҙең карта мәғлүмәттәрен индереүҙе һорайҙар. Әгәр бындай хәл була ҡалһа, һеҙҙең алда - "көҙгө", йәғни сайттың ялған күсермәһе. Шул рәүешле мутлашыусылар картағыҙҙың тулы мәғлүмәтен ала. Мәҫәлән, мутлашыусылар йыш ҡына популяр онлайн-кинотеатрҙарҙың игеҙәк сайттарын булдыра. Бындай ресурстар, ҡағиҙә булараҡ, төп нөсхәнән бер нисә билдә буйынса айырыла. Бер сайттан икенсеһенә күскәндә улар нимәгә лә булһа яҙылыуҙы йәки булғанын оҙайтыуҙы һорай, һәм кеше үҙ теләге менән уларға аҡса күсерә.

AliExpress сауҙа майҙансығы клондарын фишинг сайттары тип күрһәтергә була. 2020 йылда "ҡара йома" алдынан эксперттар ошондай 200 фейк тапҡан. Уларҙың береһе үҙенсәлекле маркетплейстың күсермә адресы менән булған, бары тик бәләкәй L хәрефе урынына l баш хәрефе ҡулланылған.

"Папа Джонс" пиццерияһы клиенттары ла шундай уҡ хәлгә тарыған. Былтыр кешеләр аҙыҡ-түлеккә заказ биргәндә мутлашыусыларға юлығыуҙарына зарлана. Еңәйтселәр һатып алыусыларҙан аҡса алыу өсөн ялған сайт асҡан. Ярты йылда ошондай мутлыҡтарҙан зыян 1,5 миллион һумдан ашыу тәшкил итә.

**Һаҡ булығыҙ, үҙегеҙҙе алдауға юл ҡуймағыҙ! "Роспотребнадзор"ҙың ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса "ҡыҙыу линияһы": +7 (800) 555-49-43.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Еңел булмағанда ла, нисек маҡсатҡа өлгәшергә?

Эштәр ауыр барғанда, кеше үҙе лә ауырға әйләнә, тиҙәр. Шуға ла ҡатылыҡтан, рәхимһеҙлектән арынырға тырышығыҙ.

Һеҙгә үҙегеҙҙе ҡаты кеше тип иҫәпләргә кәрәкмәй. Рәхимһеҙлек саманан артыҡ бешелекте, һәлмәкләнеүҙе аңлата. Ошоға тиклем һеҙ ыңғай өндәгетөштәр күрҙегеҙ, башҡаларға ярҙам иттегеҙ, Илаһтың теләге - рәхимһеҙлегегеҙ кәмене, аң-зиһенегеҙ яҡтырҙы.

Эштәрегеҙ ауыр барғанда, рухи "тиҙ ярҙам"ға мөрәжәғәт итеү ҙә етә. Бының өсөн телефонға түгел, ә һүҙҙәргә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ул - "ом" тигән өн (ул һуҙып, о-о-о-м-м-м тип әйтелә). Уның көсө нимәлә? Әгәр беҙ йыһан шауын тыңлай алһаҡ, ул тап шулай ишетелер ине. Был һүҙҙе ҡабатлау йыһан тауышына яҡынайыуҙың иң яҡшыһы. Был тауышҡа бөтөн нәмә яуап бирә. Үҙегеҙ ҙә тикшереп ҡарай алаһығыҙ: кемдер "ом" тип ҡабатлағанда ҡулдарығыҙҙы ус яғы менән аҫҡа ҡаратып ҡуйығыҙ. Устарығыҙҙа тирбәлеш һиҙәһегеҙ - тән шулай итеп был тауышҡа яуап бирә.

Түбәндәге күнекмәне үтәп, үҙенсәлекле тауышты буйһондорорһоғоҙ һәм күҙгә күренмәҫ терәк табырһығыҙ:

**Нисек "ом" хакимлығына эйә булырға?**

- Проблемаларығыҙҙы хәл итеүгә бағышланған өндәге-төш сеансы алдынан күҙегеҙҙе йомоп, өс тапҡыр һуҙып "ом" тип ҡабатлағыҙ.
- Проблемаларҙы хәл итеү буйынса өндәге-төш ваҡытындағы аҙымдарығыҙҙы баһалағанда, ғәҙәттә, уйҙағы өс образ ҡулланыла.
- Ваҡиғаларҙың һеҙ теләмәгәнсә хәл ителеүен ситтән күҙәтегеҙ. Тап проблема шунда икәненә баҫым яһау өсөн картинаны ҡараңғылатығыҙ йәки уйығыҙҙа ғына уға ҡара тәре ҡуйығыҙ.
- Проблеманы хәл итеүгә йәки билдәләнгән маҡсатҡа өлгәшеүгә йүнәлтелгән ниндәй аныҡ эштәр башҡарыуығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Башығыҙға нимә килә, шуны эшләүсе итеп күҙаллағыҙ. Әгәр нимә эшләргә белмәһегеҙ, түбәндә яҙылған йүнәлештә үҙгәртеү техникаһын ҡулланығыҙ.
- Уйығыҙҙа ғына проблема хәл ителгән, маҡсатҡа өлгәшелгән тип күҙаллағыҙ.

Йүнәлеште үҙгәртеү техникаһы проблеманы хәл итеү йәки маҡсатҡа өлгәшеү өсөн нимә эшләргә кәрәклегенә тиҙ яуап алыу өсөн файҙаланыла. Үҙегеҙҙе илһам сығанағы булып бер стакан һыу, бер сынаяҡ кофе йәки көнөнә бер нисә тапҡыр ҡулланған шыйыҡлыҡ тора икәнлегенә программалағыҙ. Мәҫәлән, үҙегеҙгә: "Һәр стакан һыуҙы эскән һайын мин нимә эшләргә икәнлеген асығыраҡ аңлайым", - тиегеҙ.

**Роберт СТОУН. (Дауамы бар).**



## 17 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1
4.00 Профилактика на канале с 4.00 до 13.00.
14.00, 16.00, 20.00 Вести.
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
17.30 "60 минут". [12+]
21.20 Т/с "Художник". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер! На службе закона".
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.
14.00 Новости недели (на рус.яз).
14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]
15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 "Гора новостей".
15.45 Преград. Net. [6+]
16.00 БашГост. [12+]
16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Патриот РФ. [12+]
18.00 Финликбез. [12+]
18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).
19.00, 20.30, 23.15, 0.45 Вечерний телецентр.
20.00 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Пофутболим? [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
1.45 Спектакль "Похищение девушки". [12+]
4.00, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]
4.45 История одного села. [12+]
5.00 "Ете егет". [12+]

## 18 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Художник". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер! На службе закона".
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Х/ф "Тариф на прошлое". [16+]
11.00, 5.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00, 16.00 "Дорога к храму". [0+]
12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.
13.30, 14.30, 18.30, 0.00, 2.15 Новости (на баш. яз).
15.00 Детей много не бывает. [6+]
15.30 "Гора новостей". [6+]
15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]
17.00, 3.15 Автограф. [12+]
17.45 "Криминальный спектр". [16+]
18.00 "Елкән". [6+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30, 4.15 История одного села. [12+]
21.20 Хоккей. "Спартак" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
0.30 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]
2.45 Башҡорттар. [6+]
3.45 Тормош. [12+]
4.30, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]

## 19 ОКТЯБРЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Художник". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер! На службе закона".
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Х/ф "Тариф на прошлое". [16+]
11.00 Республика LIVE #дома. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 История одного села. [12+]
12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).
15.00 "Созвездие талантов". [6+]
15.30 "Гора новостей".
15.45 "КультУра". [6+]
16.00 Тайм-аут. [12+]
17.00 "Это моя профессия". [12+]
17.45 "Ҡурай даны". [12+]
18.00 Финликбез. [12+]
19.00, 20.30, 23.15, 0.45 Вечерний телецентр.
20.00 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
1.45 Спектакль "Салават". [12+]
4.00, 4.45 Дневной канал БСТ. [12+]
5.30 Д/ф "Творец. Боец. Мудрец. Мустай Карим". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

## 20 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Художник". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер! На службе закона".
4.12 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Х/ф "Тариф на прошлое". [16+]
11.00, 5.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 20.15, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.
13.30, 14.30, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз).
15.00 "Сулпылар". [0+]
15.30 "Гора новостей". [6+]
15.45 Х/ф "Мальчишки". [6+]
16.15, 18.00 Финликбез. [12+]
17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
17.45 "Криминальный спектр". [16+]
19.00, 0.00 Вечерний телецентр.
20.00 "Сәңгелдәк". [0+]
20.50 Хоккей. "Северсталь" (Череповец) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
1.00 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]
3.15 История одного села. [12+]
3.30 "Аль-Фатиха". [12+]
4.00, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]
4.45 "Дорога к храму". [0+]

## 21 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.50 Улыбка на ночь. [16+]
0.55 Х/ф "Просто роман". [12+]

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Х/ф "Тариф на прошлое". [16+]
10.30 Автограф. [12+]
11.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45, 19.00, 23.00 Интервью. [12+]
12.00, 4.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
12.45, 15.45 Патриот РФ. [12+]
13.00 БашГост. [6+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).
13.45, 18.00 "Йома". [0+]
14.15 "Ҡурай даны". [12+]
15.00 "Городок АЮЯ". [6+]
15.15 "МузКәрәҙ". [0+]
15.30 "Гора новостей".
16.00 "Аль-Фатиха". [12+]
17.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
19.15 "Честно говоря". [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
21.15 Дознание. [16+]
23.15, 3.45 "Ете егет". [12+]
23.45 Колесо времени. [12+]
1.15 Спектакль "Радость нашего дома". [12+]
5.30 "Млечный путь". [12+]

## 22 ОКТЯБРЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Входя в дом, оглянись". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Весна перемен". [12+]
0.35 Х/ф "Русалка". [12+]
3.50 Х/ф "Мой белый и пушистый". [12+]

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Аль-Фатиха". [12+]
8.15 БашГост. [12+]
8.45 "Ете егет". [12+]
9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 Преград. Net. [6+]
11.00 "КультУра". [6+]
12.00 "Это моя профессия". [12+]
12.30 Новости (на баш. яз)./. [12+]
13.00 Үткән ғүмер. [12+]
13.30 Башҡорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Полезные новости. [12+]
17.15 Финликбез. [12+]
17.30 Дуновение памяти. [12+]
18.50 Хоккей. "Ак барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 0.00, 3.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
0.45 "Башҡорт йыры-2021". [12+]
1.30 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]
4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.30 "Млечный путь". [12+]

## 23 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1
5.35, 3.15 Х/ф "Весомое чувство". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.35 Т/с "Входя в дом, оглянись". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Роковое наследство". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
7.30 Новости (на баш. яз).
7.45, 23.00 Автограф. [12+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Ҡурай даны". [12+]
9.00 "Йома". [0+]
9.30 Новости (на рус. яз).
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 Ай текә. [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 Үткән ғүмер. [12+]
13.45 История одного села. [12+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.15 "Дорога к храму". [0+]
15.45, 3.30 Историческая среда. [12+]
16.15 "Честно говоря". [12+]
17.00 Д/ф "Мустай Карим". [12+]
18.00 "Елкән". [6+]
19.45 Патриот РФ. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 Финликбез. [12+]
20.45 Дознание. [16+]
21.00, 22.30, 4.30 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15, 3.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
23.45 Спектакль "Трамвай "Желание". [12+]
2.30 Итоги недели (на рус. яз).
4.00 "Это моя профессия". [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры
**19 октябрь "Тоғролоҡ"** (М. Ҡунафин, З. Бураҡаева инсц.), драма. Салауат БДТ гастролдә. 16+
**20-21 октябрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**22 октябрь "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 18.00 12+
**23 октябрь "Эҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры
**19-20 октябрь "Волшебная мельница"** (М. Кәрим), әкиәт. 11.00 0+
**23 октябрь "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры
Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:
**22 октябрь "Большой секрет"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+
**23 октябрь "Два кота"** (О. Штырляева). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы
**17 октябрь "Барокко forever"** концерт. 6+
**20 октябрь** Шамил Ибраһимовтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған концерт. 6+
**22 октябрь "Музыку слушаем вместе"** концерт. 0+
**23 октябрь "Вокруг света с органом"**. 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры
**17 октябрь "Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драма. 13.00, 18.00 16+
**18 октябрь "Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драма. 13.00, 16.00 16+
**19 октябрь "Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драма. 13.00, 18.00 16+
**20 октябрь "Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драма. 13.00, 19.00 16+
**21 октябрь "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ
*1444 һижри йыл.*

| Октябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (21) дүшәмбе | 6:20 | 7:50 | 13:30 | 16:18 | 18:11 | 19:41 |
| 18 (22) шишәмбе | 6:22 | 7:52 | 13:30 | 16:16 | 18:09 | 19:39 |
| 19 (23) шаршамбы | 6:24 | 7:54 | 13:30 | 16:14 | 18:06 | 19:36 |
| 20 (24) кесе йома | 6:26 | 7:56 | 13:30 | 16:11 | 18:04 | 19:34 |
| 21 (25) йома | 6:28 | 7:58 | 13:30 | 16:09 | 18:02 | 19:32 |
| 22 (26) шәмбе | 6:30 | 8:00 | 13:30 | 16:07 | 17:59 | 19:29 |
| 23 (27) йәкшәмбе | 6:32 | 8:02 | 13:30 | 16:05 | 17:57 | 19:27 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ОКТЯБРЬ ЮБИЛЯРҘАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнә.

**40-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Бабич. Дүшәнбе. Пентагон. Әлибай. Түләк. Ауыҙ. Етегән. Анар. Кавалерия. Итек. Ҡуян. Рәшә. Әсмүхә. Какао. Йофар. Дүрт. Кеҫә. Шәхес. Айыл. Елкә.

**Вертикаль буйынса:** Төлкө. Полковник. Кислород. Дәрт. Үтәбай. Аншлаг. Әйтеш. Аяҡ. Әйле. Наҙан. Фа. Чабан. Ерек. Әйбер. Нәркәс. Икмәк. Блог. Йәшник. Әсә.

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА



# АҠСАҢДЫ НИМӘГӘ ТОТОНАҺЫҢ?

**Аҡсаны әйберҙәр һатып алыуға тотонорғамы, әллә һаҡлауға һалырғамы? Әлегә ҡарабойҙай, консерва һәм шәкәр запасын йыйыу кәрәкмәй, быларға хаҡ артыу көтөлмәй. Ә нимәгә аҡса сарыф итеү кәрәк була? Был һорауға Юғары иҡтисад мәктәбенең "Үҫеш үҙәге" институты директоры урынбаҫары Валерий Миронов яуап бирә.**

**Валютанан баш тартмағыҙ.** Валютала йыйған аҡсаларҙы әлегә һумдарға алыштырмай тороғоҙ. Киреһенсә, артыҡ аҡсаны долларға алыштырыу урынлы. Санкциялар мәңгелек түгел. Берәй ике-өс йылдан был сит ил аҡсаһы киренән 70 һум торасаҡ. Шул саҡта инде туплаған аҡсаларығыҙ һумға әйләндергәндә күпкә артасаҡ.

**Теш дауалағыҙ.** Теш табиптары ҡулланған ҡайһы бер кәрәк-яраҡтар менән тәьмин ителеш өлкәһендә әле үк ҡыйынлыҡтар күҙәтелә. Был мәсьәлә ни тиклем тиҙ сиселеш табыры һәм улар күпмегә барып баҫыры билдәһеҙ. Шуға күрә, тештәрҙе әле дауалап ҡалыу отошло.

**Һаулығығыҙҙы ҡайғыртығыҙ.** Эндопротездар һәм Европанан килтерелгән башҡа медицина изделиеларын алыу ҡатмарлашырға мөмкин, йәки хаҡтары артыуы бар. Был өлкәлә лә, тештәр кеүек, алдан хәстәрләү урынлы. Сөнки ватан аналогтары донъя өлгөләренән ҡалыша.

**Дарыуҙар запасын булдырығыҙ.** Көнбайыш фармацевтика компаниялары санкцияларға бәйле Рәсәйҙә яңы дарыуҙарына һинау үткәрә алмай, был уларҙы ҡулланылышҡа индереүгә ҡамасаулай. Быға тиклем тикшерелгән дарыуҙар менән тәьмин итеү рәсми рәүештә тыйылмаған, әммә ғәмәлдә ауырыуҙар ҡатмарлыҡтар кисереүе ихтимал. Әгәр ҙә һеҙ ниндәйҙер тәғәйен дарыуҙы ҡулланып өйрәнһәгеҙ, һаҡлау мөҙҙәте сиктәрен күҙ уңында тотоп, уны күберәк алып ҡуйыуҙы хәстәрләгеҙ.

**Машина түгел, уға запчастар алығыҙ.** Европа һәм Америка автомобилдәре дилерҙар складында әлегә бар. Хаҡтары артыуын арткан, әммә киләсәктә был машиналар беҙҙең илдә үтә һирәк осрай торған ҡиммәтле әйберҙәргә әүерелеүе лә бар, шуға һатып алырға ниәтләнһәгеҙ, оҙаҡҡа һуҙмағыҙ. Ватан автомобиль сәнәғәте импортлы өлөштәрҙән әлегә тулыһынса арына алмай. Бынан тыш, көнбайыш сит ил автомобилдәренә запас частар һатып алып ҡуйыу ҡамасау итмәҫ. Икенсе яҡтан, Ҡытай етештереүселәре Рәсәйгә әүҙем килә башланы. Улар етештергәндең сифатына ышанһағыҙ, иптибарҙы шул яҡҡа йүнәлтергә мөмкин.

**Гараж һатып алығыҙ.** Запас частарҙың етешмәүе һәм ҡиммәт булыуы арҡаһында вандалдар киләсәктә парковкаларҙа ҡалдырылған машиналарҙың кәрәк өлөштәрен һүтеп ала башлауы ихтимал. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында шулай булды. Автомобилде һаҡлау өсөн гараж кәрәк.

**Видеокүҙәтеүҙе лә хәстәрләгеҙ.** Дача, гараж, машина - үҙегеҙ гел генә күҙәтеп тора алмаған барлыҡ мөлкәтегеҙ видеокамера объективынан ситтә булмаҫҡа тейеш. Бындай система үҙе үк бурҙарҙы ҡурҡыта. Был тына уғрыларҙы өркөтмәгән хәлдә лә, полиция хеҙмәткәрҙәренә уларҙың эҙҙәренә төшөүҙе еңеләрәк булыр.

**Көнкүреш техникаһын алмаштырығыҙ.** Көнкүрештә кәрәкле техникаға ла хаҡтар артыуы, аҡса булып та, кәрәкле әйберҙе табып алыуы ауырлашауы мөмкин. Иҫке һыуыткыс, кер йыуыу машинаһы, электр сәйнүген яңыртыу өсөн ҡулай осор әле. Яңылары әле ҡулланып йөрөгәндәренә ҡарағанда оҙағыраҡ хеҙмәт итеренә шик юҡ. Аҙаҡ техникаға хаҡтар үтә ныҡ күтәрелеүе ихтимал.

**"АиФ" гәзитенән.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТЕАТР ИСЕМЛЕ БУЛДЫ...



**Ошо көндәрҙә Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһенең Башҡорт драма театрына театр эшмәкәре Илшат Йомағоловтың исемен биреү тантанаһы уҙҙы. Актер, драматург һәм педагог, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Илшат Йомағоловтың тыуыуына 90 йыл тулыу уңайынан театр-концерт берләшмәһендә уның бюсы ҡуйылды, тип хәбәр итә республика Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәте.**

Илшат Йомағоловтың бюсын асыу тантанаһында Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры урынбаҫары Алмаз Сәйетов, Стәрлетамаҡ ҡалаһы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Артур Ғафаров, Театр эшмәкәрҙәре союзы рәйесе Әхтәм Абушахманов, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев премияһы лауреаты Гөлдәр Ильясова һәм Илшат Хәлил улы Йомағоловтың тормош иптәше - Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмзиә Хисамова ҡатнашты.

- Илшат Хәлил улы ошо театрға нигеҙ һалыусыларҙың береһе. Уның театрҙы үҫтереүгә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ, - тине Алмаз Сәйетов. - Илшат Хәлил улы бөтә ғүмерен башҡорт театр сәнғәтенә хеҙмәт итеүгә арнаны. Сәхнә оҫтаһы республика театр сәнғәтенең алтын фондына инген байтаҡ ролдәр ижад итте, бер төркөм актерҙар тәрбиәләп сығарҙы. Уның икенсе булмышы - драматургия. Илшат Йомағоловтың 1967 йылда яҙылған "Нәркәс" трагедияһы абруйлы театр фестивалдәре бүләктәренә һәм премияларына лайыҡ булды. Республика театрҙарында ла, унан ситтә лә уның пьесалары буйынса спектаклдәр сәхнәләштерелде. Бөгөн театрға Илшат Йомағоловтың исемен биреләбеҙ һәм талантына, яҡты хәтеренә ихтирамыбыҙҙы белдерәбеҙ.

Тантаналы саранан һуң ҡунаҡтар актер, режиссер, педагог һәм драматургтың биографияһына, ижадына арналған күргәҙмәне, шулай уҡ уның "Һөйәрҙәргә ҡапҡан" спектаклен ҡараны.

*АФАРИН!*

# ХАЛЫҠ ХӘТЕРЕ ӨСӨН...

## изге төшөнсәгә әйләнгән шәхес

**Рәми шәхесе. Ике быуатты тоташтырған был исемгә бәйле фекер алышыуҙар туҡтағаны юҡ. Әҙиптең шиғырҙары иһә иң күп уҡылғандар һәм ятланғандар исемлегендә. Эйе, йәшәүҙең мәғәнәһе ижадта сағылыш алһа, ул халыҡ хәтере өсөн изге төшөнсәгә әүереләләр. Халыҡ шағиры тураһында хәтирәләр яҙыла, уға арналған әҫәрҙәр тыуа. Ә Рәми Ғарипов хаҡында әйтелмәгән һүҙҙәр тағы ла күберәк икәне асыҡлана.**



Быйылғы йылдың ҙур яңылығы - бөйөк шағир тормошо кино сәнғәтендә сағылдырылды. "Родина" кинотеатрында режиссер Булат Йосоповтоң "Шағир көндәлеге" тип аталған фильмының премьераһы булды. Башҡорт кино сәнғәтен үҫтереүҙә баһалап бөткөһөҙ хеҙмәт күрһәткән Булат Тимербай улының был фильмы ла йәмәғәтселектә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Шығырым тулы зал фильмды бер тынала ултырып ҡараны.

Шағир көндәлеген төшөрөүсе төркөм кино сәнғәтенең мөмкинлеген күрһәтә алыуы менән һоҡландырҙы. Бер күҙ һалыу менән беҙ, тамашасылар, Рәми йәшәгән дәүер эсенә инеп киттек. Һәр деталь уйланылған, эшләнгән, теүәлләнгән. Ә бит һуғыш йылдары, һуғыштан һуңғы осор ҡомартҡыларын табыу, йүнләү еңел булмағандыр. Йәмәғәтселек Рәми Ғариповты ҙур шағир булараҡ белә, унның шиғырҙарын күптәр яттан һөйләп йөрөй.

Әммә ошо бейеклеккә алып килгән юлды барыһы ла асыҡ ҡына төҫмөрләмәй, әлбиттә. Ауырлыҡтарҙы еңеп, үҙ маҡсатына ынтылған бәләкәй, артабан үҫмер Рәмиҙәр был юлды фильмда шаҡтай тулы итеп сағылдырыуға өлгәште. Бөгөн тормошта үҙ юлын һайлаған, маҡсатына ынтылған йәш быуын өсөн был онотолмаҫ һабаҡ та булыр, тип ышанайыҡ. Шулай уҡ фильмда Рәми Ғариповтың тормошонда ниндәйҙер роль уйнаған шәхестәрҙе, ижадташ дуҫтарын күреү ҙә ҡыҙыҡлы. Кинола Рәмиҙе үҙ эсенә бикләнгән итеп күрһәтеү, шуға ла, бәхәслерәк. Һәр ижадсының ундай мәлдәре лә була. Шулай ҙа шағирҙың эргәһендә ышаныслы һәм тоғро дуҫтары ла әҙ булмаған һәм Рәми ауыр саҡтарында уларға таянған икәнен ишетеп тә, Көндәлектәренән уҡып та беләбеҙ. Рәми Ғарипов был йәһәттән дә бәхетле яҙмышлы кеше: ғүмеренең аҙағына тиклем йәнәшәһендә тоғро дуҫтар, фекер уртаҡлашыр арҡадаштар булыуы һәр кемгә лә эләкмәй!

Әҙипте, ниндәй ауырлыҡтар кисерһә лә, оптимистик һәм көрәшсе рухы ташлап китмәй. Унның ижадында яһалмалыҡ юҡ, һәр юлы йөрәк ҡаны менән яҙылған шиғырҙары бөгөн дә уҡыусыны рухландыра, көс бирә. Ул үҙенең мәктәбен булдыра. Рәми Ғарипов мәктәбе шәкерттәре - бөгөн әҙәбиәт йөгөн тартыусы төп көстәр. Унның шикелле ҙур мәктәп булдырған тағы ла берәй әҙипте исемләп атауы ла ситен. Бына шундай оло шәхестең тормош юлын, ижадын кино сәнғәтендә сағылдырыу башҡорт мәҙәниәтендә - ҙур ваҡиға. Халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай әйтмешләй, Рәми Ғарипов тураһында киләсәктә сериал эшләргә кәрәк.

Шик юҡ, Рәми тураһында яңы фильмдар тыуыр. Яңы быуын яңы һүҙен әйтер. Әле был эш башланды ғына. Был фильмды төшөрөүселәр үҙҙәре алдына ошондайыраҡ юҫыҡтағы сюжетты һүрәтләүҙе маҡсат итკәндер. Ә шулай ҙа киләсәк кино төшөрөүселәр алдына яңы бурыстар ҡуя: ни өсөн Рәмигә төрлө ауырлыҡтар аша үтергә тура килгән? Уны шул дәүерҙең бюрократияһы менән көрәшергә нимә мәжбүр иткән? Һәм система уға ҡаршы нимәләр эшләгән? Кем унның ысын дошманы? Тимәк, быларҙы асыҡтан-асыҡ һүрәтләр, Рәмиҙең ысын көрәшсе асылын асыр өсөн әле мәле етмәгәндер һәм ниндәйҙер арауыҡ үтелергә тейештер...

Ләкин боҙ урынынан ҡуҙғалды. "Шағир көндәлеге" һеҙҙе шағир йәшәгән заманға алып ҡайтыр. Ҡәһәрле һуғыш йылдарын, ғаиләнең фажиғәһен, шуға бәйле көнделәге уңалмаҫ яраларҙы, әсә фатихаһын, ижадҡа инанғанлыҡтың ниндәй булыуын күҙ алдынан үткәрергә һәм йөрәк менән кисерергә ярҙам итер.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ*

# САЛАУАТ ҠАЛАҺЫ СӘХНӘҺЕНДӘ...



**Салауат дәүләт башҡорт театрында Андрей Ивашкин пьесаһы буйынса "Һәйбәт ҡыҙыҡай Лида" трагикомедияһы сәхнәләштерелде. Ул "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты сиктәрендә тормошҡа ашырылды. Спектаклдең премьераһына 922 билет һатылған, шунның 847-һе "Пушкин картаһы" буйынса.**

Спектаклдә һүҙ Лида исемле ҡыҙ тураһында бара. Бик аҡыллы һәм ҡыҙыҡһынbackусан ҡыҙыҡай булыуға ҡарамаҫтан, Лида синыфташтары менән уртаҡ тел таба алмай һәм йылдар дауамында тиҫтерҙәре тарафынан төрлөсә ҡыйырһытыла. Ниһайәт, мәктәпте тамамлауға арналған кисә лә килеп етә. Әммә сара тиҙерәк үтеп, ошо урынды ташлап китергә хыялланған ҡыҙ ишекте аса алмай, бикле ҡала.

Спектаклдең ҡуйыусы режиссеры - Мәскәү өлкәһенең Долгопрудный ҡалаһындағы "СинемаДжой" балалар һәм үҫмерҙәр өсөн кино мәктәбе етәксеһе Нәркәс Искәндәрова. Режиссер Салауат театры менән беренсегә эшләй. "Спектакль 12-21 йәшлектәр һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн тәғәйенләнгән. Пьесала үҫмерҙәрҙе борсоған мәсьәләләр күтәрелә. Һәр ҡылыҡтың эҙемтәһе булыуы, мәктәпте тамамлаған һәр үҫмерҙең киләсәк алдында билдәһеҙлектә ҡалыуы тураһында был әҫәр. Төп маҡсатыбыҙ - бер-беребеҙгә ҡарата ихтирамлы мөғәмәлә итеүҙең мөһимлеген тағы бер тапҡыр хәтергә төшөрөү, сөнки ғүмер ҡыҫҡа һәм уны емереүгә бағышлау мәғәнәһеҙ", - ти Нәркәс Искәндәрова.

Спектаклдә ете актер уйнай, улар барыһы ла төп ролдәрҙе башҡара. Лида исемле ҡыҙ ролендә йәш актриса Йәнгүзәл Халиҡова. Ҡуйыусы рәссам - Руслан Мәғәлимов, композитор - Дарья Гарбузняк, хореограф - Алена Олефиренко. Әҫәр бер юлы ике телдә - русса һәм башҡортса сәхнәләштерелгән. Башҡорт теленә Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Нәжибә Искәндәрова тәржемәләгән.

Әйткәндәй, "Һәйбәт ҡыҙыҡай Лида" спектаклен 18 октябрҙә Өфө тамашасыһы ла ҡарай аласаҡ. Актерҙар "Орион" ижад һарайы сәхнәһендә сығыш яһаясаҡ.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӘХЕТ АЛҒА БАРҒАНДА...

## мал арты менән инә, ти

Ҡатыны яҡшы кешегә бәхет кәрәкмәй, ҡатыны яман кешегә ләхет кәрәкмәй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙҙең бәхетһеҙлектәрҙең сере шунда: бәхетлебеҙме, юҡмы, тип уйланырға ваҡытыбыҙ күп.

**(Б. Шоу).**

Бәхет - ул үҙ яҙмышыңа күнеү һәм тормоштағы хәлең менән ҡәнәғәт булыу.

**(Эразм Роттердамский).**

Ахмаҡтың тормошо ҡурҡыу менән тулы, сөнки ул бер эшен дә бөгөн эшләмәй, ә барыһын да иртәгәгә ҡалдыра.

**(Кесе Сенека).**

Әгәр ҙә бәхет йорто төҙөргә тура килһә, ундағы иң ҙур бүлмәне көтөү өсөн тәғәйенләргә тура килер ине.

**(Ж. Ренар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кешене дуҫы ҡунаҡҡа саҡыра. Ул дуҫы һонған эсемлекте эсергә тип ауыҙына яҡын килтерһә, һауыт эсендә бәләкәй генә йылан һынын күреп ҡала. Әммә хужаның иғтибарын йәлеп итмәҫ һәм үпкәләтмәҫ өсөн, һауыттағы эсемлекте төп күтәрә эсеп ҡуйырға мәжбүр була.**

**Өйөнә ҡайтҡас, был кешенең ашҡаҙаны бик ныҡ итеп ауырта башлай. Әллә күпме дарыуҙар эсә. Әммә бер ни ҙә ярҙам итмәй, ашҡаҙандағы ауыртыуҙар тағы ла нығыраҡ көсәйә. Кеше ысынлап та унның эсенә баяғы эсемлек менән бергә йылан инеүенә, хәҙер инде уны үлем сигенә алып барып еткермәй туҡталмаясағына көндән-көн нығыраҡ ышана.**

**Дуҫы был кешенең ауырыуы тураһында ишетеп ҡала һәм уны тағы ла өйөнә саҡыра. Уны элек ултырған урынына ултырта һәм эсемлек һалынған һауыт һона. "Эс, был - дарыу!" ти ҡаты итеп. Ауырыу эсергә тип һауытты ауыҙына яҡынайтҡанда унның эсендә тағы ла йылан һынын күрә. Был юлы инде ул хужаның иғтибарын ошо үҙе күргәнгә йәлеп итеүҙән тартынмай. Хужа барыһын да аңлай һәм бер һүҙ әйтмәйенсә, өйҙөң түшәменә төртөп күрһәтә. Ә түшәмдә иһә оҙон булып, йылан һымаҡ бөгәрләнеп сыбыртҡы эленеп торған була. Ауырыу һауыт эсендәге ул күргән йыландың әлеге сыбыртҡы күләгәһе булыуын аңлай. Дуҫтар бер-берейһенә ҡарап, көлөп ебәрәләр. Кешенең ашҡаҙандағы ауыртыныуҙары аҡрынлап бөтә, һәм ул һауыға...**

**...Үҙ-үҙеңде ышандырырға тырышыу, шик-шөбһәләр менән уратып алыу бына шулай ауырыуға ла әйләндерә ала шул кешене..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
14 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3540
Заказ - 1302